ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 май (һабанай) 2025
№18 (1162)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Башҡорт һатлыҡ түгел!**



2-3

**Һуңғы ветеран**



8-9

**Политрук яҙмышы**



11

**Сталинград фронтында сыныҡҡан**



13


@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

*"Батыр булып үлгәндәргә һәйкәлдәр торһон...*
*Тик тереләр - тере булһын. Тик тереләр һәйкәлдәргә ҡарап торһон...*
*Ҡарап торһон һәм һәр ваҡыт, һәр көн, һәр сәғәт, һәр минут, тын алған һайын*
*һәйкәлдәргә лайыҡ булып үлергә лә әҙер торһон!..."*

*(Фәрит Исәнғолов. "Һәйкәлдәр - тереләр өсөн" романынан)*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Һуғыш тураһында кем яҙа? Әлбиттә, яҙыусылар! Элек тә, хәҙер ҙә! Һуғыш темаһына тотонорға нимә мәжбүр итте һеҙҙе, тип бөгөнгө заман яҙыусыларына мөрәжәғәт иттек.

***Мөнир ҠУНАФИН, яҙыусы, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты:*** Тәүге яҙған хикәйәм һуғыш тураһында ине. 1985 йылда Еңеүҙең 40 йыллығына арнап, ул саҡтағы "Башҡортостан пионеры" гәзитендә баҫылды ул. 14 йәшемдә лә был тема миңә бик яҡын һәм мөһим булған. Ике малай, ауылдарын немецтар килеп баҫҡас, улар араһында йөрөп, дошмандарҙың серле документтарын урлап, партизандарға алып барып тапшыра. Йөкмәткеһе яҡынса шулайыраҡ ине. А. Фадеев ("Молодая гвардия"), В. Катаев ("Сын полка") Б. Полевой ("Повесть о настоящем человеке"), Ә. Бикчәнтәев ("Нисә йәш һиңә, комиссар?", "Бөркөт һауала үлә"), Д. Исламов ("Мәскәү юлы") һ.б. яҙыусыларҙың китабын уҡып, тәьҫирләндек. "Герой-пионерҙар" китабын беҙ ун-егерме тапҡыр уҡыйбыҙ, мендәр аҫтына һалып йоҡлайбыҙ. Уларҙың ҡыйыулығы беҙгә лә күсеүен теләйбеҙ. Ә инде һуғыш тураһында кино булғанын белһәк, бар эштәрҙе ташлап, ҡайҙан да биш йә ун тин аҡса йүнләп, клубҡа йүгерәбеҙ. Китаптағы йә фильмдағы герой менән көндәр, аҙналар буйы бергә йәшәйһең, улар менән атакаға бараһың, батырлыҡтар ҡылаһың, немецтарҙы әсиргә алаһың әле, һуңынан униһы бер урам малайҙары менән ике яҡлы уйындарға инеп китә. Тик береһенең дә нимес булғыһы килмәй, барыһы ла совет иле батыры... Аптырамайбыҙ, ҡылыс, автоматтар эшләп алып, "нимес-кесерткәндәр"ҙе ҡырабыҙ, йыуан фашист-түмәрҙәрҙе ярабыҙ, ҡайсаҡ Гитлер ялсылары - һарыҡ-кәзәләрҙе таш-гранаталар менән "дөмбәҫләйбеҙ"... ***Иң көслөһө, иң батыры - беҙ! Ни өсөн - сөнки беҙ Еңеүсе халыҡтың балалары, беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ Герой! Тимәк, беҙҙең тәндә лә, йәндә лә ҡаһармандар ҡаны аға. Беҙҙе бер кем дә еңә алмай! Иң көслө ил беҙҙеке! Беҙ шуға ышанып, инанып үҫтек. Һәм... бер нәмәгә үкендек, ниңә алдараҡ тыумағанбыҙ икән, күрһәтер инек ул дошманға күрмәгәнен, их, фашистар дөмөктөрөлдө, хәҙер бер ҡасан да һуғыш булмаясаҡ, беҙ ҙә ысын герой булыр инек, ивет, тип бойоғоп ултырған булдыҡ, уйнап туйып арығас. Олатайөләсәйҙәрҙең арҡанан һөйөп, баштан һыйпап, һеҙ һуғыш күрмәй үҫегеҙ, тыныс ҡына булһын был донъялар, тигәнен, ҡәҙимге теләк тип, артыҡ әһәмиәт бирмәй генә ҡабул иттек. Ә баҡһаң, тыныслыҡ һәр саҡ кәрәк икән...***




Олатайым Сафиулла Ғарифулла улы Ҡунафин Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һуғышҡан. Күрһәткән ҡаһармандыҡтары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ, II дәрәжә Ватан һуғышы, III дәрәжә Дан ордендары, "Батырлыҡ өсөн" һәм башҡа бик күп миҙалдар менән бүләкләнгән. Шул үҫмер сағымда олатайымдан "һуғышты һөйләтергә" ярата торғайным.

- Кисен украин ауылын алғайныҡ, - тип һөйләне ул бер саҡ. - Иртән яңынан немец килеп баҫты. Командир кисекмәҫтән китергә бойорҙо. Ғәжәп, өйҙән сығып китешләй, үҙем дә һиҙмәҫтән, соланда һөйәүле торған балтаны эләктергәнмен. Крәҫтиән ғәҙәте инде. Күптәребеҙ картуф баҡсаһы аша йүгерҙе. Ян-яҡта немец снарядтары ярыла, баш остарыбыҙҙан пулялар һыҙғыра башланы. Ышыҡланырға маташып, һарай эргәһендәге бер ҡаралты эсенә йомолдом. Ярыҡтан тирә-йүнде күҙәтәм. Бер аҙ атыу тауыштары тынғас, сығып йүгерәйем тигәндә генә ни күрәм: ҡаралтыға әҙмәүерҙәй бер немец килә. Ни булһа ла булыр, тинем дә, балтаны ҡыҫҡан килеш тын ҡалдым. Мылтыҡтан атып тауыш сығарғы килмәне. Фашистың ишекте асып ебәреүе булды, тегенең маңлайына бөтә көсөмә балта менән һелтәндем. Тауыш та сығара алмайса, "гөрҫ" итеп ауып китте. Үҙем йәнтәслим баҡса артына ҡарай ташландым...

Олатайым тыныс ҡына һөйләне был ваҡиғаны. Тулҡынланманы, шаштырманы, сәбәләнмәне. Балта күтәрелмәһә, беҙ, һинең балаларың, был фани донъяға тыумаҫ инек тә, ҡәҙерле лә, ғәзиз дә олатайым...

Бөйөк Ватан һуғышының эсендә ҡайнаған яугирҙар менән мин һәр саҡ осрашырға, уларҙың һөйләгәндәрен тыңларға яраттым, берәй хикәйәгә орлоҡ төшмәҫме, тип өмөтләндем. Ҡайһы бер эпизодтар әҫәрҙәремә ингеләп тә китте. Бик күп ветерандар хаҡында, афған, чечен утын үткәндәр тураһында ла яҙылды. Тик бер ҡасан да, үҙем яу яланында булырмын, беҙҙең быуынға ла һуғыш ялҡыны эләгер, йәндәрҙе көйҙөрөр, ҡорбандар килтерер, тип һис кенә уйланғаным булманы бит...

***Ике тапҡыр Махсус хәрби операция биләмәһенә барып ҡайттым. Әҫәрҙәр, юлъяҙмалар яҙылды, китаптар баҫылды. Ҡыҙғанысҡа, һуғыш мине лә ҡыуҙырып етте, миңә лә әсе яҙмыштарҙы күрергә, улар хаҡында тыңларға, һыҙланырға, снарядтар шартлауын, пулялар һыҙғырыуын ишетергә, баш осонда ғына квадрокоптерҙарҙың осоп йөрөгәнен күреп, ҡот оҫҡос тойғолар кисерергә тура килде. Хәтәр "уйын" икән ул һуғыш, кесерткәндәрҙе сабып ауҙарған ишеләй генә лә түгел - кеше ғүмерҙәре ҡыйыла... Ләкин был тарих, аяныслы, ҡанлы, киләсәк хаҡына данлы тарих. Ил яраһы яҙыусы йөрәге аша үткәндә, әҙип булараҡ, был теманан ситтә ҡала алманым. Яҙыуы еңел түгел, тик кәрәк. Киләсәк өсөн кәрәк. Үҙебеҙҙең тарихты үҙебеҙ яҙмаһаҡ, башҡаларҙың мәғәнәһеҙ ҡулдары алдаҡ тарих тыуҙырасаҡ.***

Кемдеңдер һөйләүенән, кисерештәренән генә сығып ижад ителгән әҫәр-картиналар ысынбарлыҡҡа бөтөнләй тап килмәҫкә мөмкин. Башҡорт үҙ күҙе менән күрмәһә, ышанмай, тигәндәй, нисек тә һалдаттарҙың окоп тормошон күреп, уларҙың күҙҙәренә тура ҡарап, улар менән бер һыныҡ икмәкте уртаға бүлешеп, дары еҫен еҫкәп, һуғыш яланына баҫып, еңеүсе ата-бабаларымдың рухын тойоп ижад иткем, ҡасандыр Илья Эренбург, Константин Симоновтар беҙҙең башҡорт дивизияһында булып, яугирҙарыбыҙҙың ысын батырлығын һүрәтләгән кеүек, минең дә браттарымды данлағым килде!

12+

✓ *Ике башҡорт, башҡортсалап һүгенешеп-ҡысҡырышып, һорау алыусы ниместәрҙе аптыратып, көрмәкләшеп китәләр. Быны ҡыҙыҡ күргән язалаусылар, хәҙер быларҙы һөсләтә-һөсләтә һуғыштыра. Арығансы айҡаша был икәү.*



ҒӘЖӘП БЕР ХӘЛ

**Күңелемдә күптән бер һуғыш тарихы йөрөй. Уныһы ла телдән-телгә күсеп килеп еткән. Мине әҙәби әҫәр итеп яҙыр типтер инде, бер апай һөйләгәйне. Уға ҡасандыр журналистика өлкәһендә эшләгән икенсе апай һөйләгән. Ул апайға алтмышынсы йылдарҙа бер һуғыш ветераны булған олатай һөйләп киткән. Көн дә гәзиткә эшкә барған ҡатынды шул тирәлә йәшәгән һәм йыш ҡына урамда осрашып һаулашып йөрөгән бер бабай туҡтатҡан да: "Ҡыҙым, һин бит гәзит кешеһе, һиңә һөйләр һүҙем бар", - тигән. Апай тыңлаған, әммә ул заманда был тарихты гәзиткә сығарырға батырсылығы етмәгән. Яҙған хәлдә лә, әҙәм ышанмаҫ йәки үткәрмәҫтәр ине. Унан һуңғы апай ҙа, "Һөйләп тә, яҙып та уҡыусыны ышандыра алмам, тип уйланым", - тип, миңә еткерҙе. Хәл ошолай булған.**

# БАШҠОРТ ҺАТЛЫҠ ТҮГЕЛ!



Төпкөл башҡорт ауылынан һуғышҡа алынған йәш башҡорт егете үҙ ғәскәрендә райондашы менән бергә тура килә. Ике башҡорт һәр ваҡыт бергә булырға тырыша, бер-береһенә тыныс тормоштағы хәл-әүәлдәрен, туған-тумасаларын һөйләп, уртаҡ таныштарын асыҡлап, бөтөнләй яҡынлашып бөтәләр. Һуғыштың иң ҡырҡыу мәлдәрендә, беҙҙекеләрҙең әле сигенеү осоронда, бер бик ҡаты алышта еңелергә тура килгәндә, совет һалдаттарының бер төркөмө, ҡамауҙа ҡалып, пленгә эләгә. Шулар араһында теге ике башҡорт та булып сыға.

Ҡулға алынған һалдаттарҙы ҡыуып, фашистар территорияһындағы ауылға алып килеп, һарайға ябалар. Унан башлана һорау алыуҙар, язалауҙар. Рухтары йомшағыраҡ булғандар бер-ике көн туҡмалыуҙан һына, бөтөн белгәндәрен һөйләй, иптәштәрен һата башлай. Үкенескә ҡаршы, беҙгә билдәле геройҙың да райондашы шулай итә. Уның һөйләгәнен ишеткән был егет, асыуына түҙмәй, башҡортсалап һүгенеп, уны әрләй. Хатта түҙмәй йүгереп килеп һуғып та ебәрә. Ике башҡорт, башҡортсалап һүгенешеп-ҡысҡырышып, һорау алыусы ниместәрҙе аптыратып, көрмәкләшеп китәләр. Быны ҡыҙыҡ күргән язалаусылар, хәҙер быларҙы һөсләтә-һөсләтә һуғыштыра. Арығансы айҡаша был икәү. Саҡ айырып алалар. Бынан ары был ике әсирҙе бер һарайҙа тотоу мөмкин булмай башлай. Беҙҙең герой милләттәшенең һатлыҡ йәнлеген күтәрә алмай, ошонда үлтереп китәм, тип бара ла йәбешә икән. Язалау отряды башлығы, уларҙың был ҡыйнашыуын, туҡтауһыҙ һүҙ көрәштереүен күҙәтә торғас, һорай икән: "Һеҙ кемдәр, ниндәй милләт?" "Башҡорттар", - тип яуаплай егет. "Ни өсөн башҡа һатылыусыларҙы тыймайһың, бында бит бер һинең дуҫың ғына һөйләмәй, башҡалар ҙа бар", - ти икән немец офицеры. "Башҡорт һатлыҡ йән булырға тейеш түгел, беҙ батыр халыҡ", - тигән уға егет.

Тотҡондарҙы айырып бикләгәндәр хәҙер. Шунда ла ҡыҙыҡ күреп, ваҡыты-ваҡыты менән сығарып, һуғыштырып алғандар. Әтәс уйыны кеүек күрептер инде. Ике бер милләт кешеһенең тотҡонлоҡта, тере ҡалыуға бер өмөт булмаған ерҙә, үҙҙәре язалаған, туҡмалған хәлдә лә, ниндәйҙер намыҫ төшөнсәләре сиктәрендә аймылыш булып, шулай алҡымдарынан алышҡаны был ят халыҡҡа аңлашылмай, әлбиттә. Улар быны уйын итеп кенә күрә.

Бер көн төндә беҙҙең геройҙы әлеге немец офицеры саҡыртып ала. Саҡырта ла, бөтөнләй әҙәм ышанмаҫ тарих һөйләй. "Минең ысын исемем Моратулла. Мин беренсе Ватан һуғышынан Германияла әсирҙә ҡалған башҡорт һалдатының улымын (атаһының исемен дә әйтә, тик герой уны онота). Әсәйем немка. Атайымдың тыуған төбәген асыҡ ҡына белмәйем, артыҡ ҡыҙыҡһынғаным булманы бала саҡта. Ҡустым бар, уның исеме Абдулла. Тик документтар буйынса беребеҙ Марат, икенсебеҙ Альберт булып киттек. Атайым иртә үлде, оҙаҡ ауырып ятты. Шул ятҡанында, үлерен белгәстер инде, мине саҡыртып алып былай тине: "Улым, мин тыуған илемде һағыныуҙан үләм. Ғүмер буйы төшөмә шундай күренеш инде: далала таң ата, ҡыҙарып ҡына ҡояш күтәрелә, ҡолағыма ат тояғы тауышы ишетелә, бына һыбайлы ла күренә, ул дыулап сабып килә, ҡараһам, ул сапҡын мин үҙем икән.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Һуғыш тураһында кем яҙа? Әлбиттә, яҙыусылар! Элек тә, хәҙер ҙә! Һуғыш темаһына тотонорға нимә мәжбүр итте һеҙҙе, тип бөгөнгө заман яҙыусыларына мөрәжәғәт иттек.**

***Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы, Ш.Бабич исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры:*** Мин фронтовик ҡыҙы. Атайым Фәтих Далха улы үҙен ике йәшкә өлкәнәйтеп яҙҙырып, һуғышҡа китә, күкрәгенә орден-миҙалдар тағып, иҫән-һау әйләнеп ҡайта. Беҙҙең бәхеткә, тип өҫтәйем әле ошо урында. Атайымдың бер туған ағаһы Сәлих олатай Сталинград өсөн барған һуғышта һәләк була. Һәр хәлдә, атайымдың үҙе үткән яу юлы тураһында һөйләгәне булманы. Ғәҙәттә, фронтовиктар ул йылдар тураһында бик асылып та бармайҙар ине. Май айында Бөйөк Еңеү алдынан йыл һайын ҡотлар өсөн уларҙы район үҙәгенә йыйып алырҙар ине. Иҫтәлеккә фотоға ла төшөрәләр. Ветерандарҙың күмәк төшкән фотоһын ҡарап ултырыу беҙгә - балаларға ла - ҡыҙыҡ була торғайны. Элекке яугирҙарҙың осрашып тороуҙары, ошондай май ҡотлауҙары һәр ваҡыт булыр һымаҡ тойола ине. Бала саҡта бит мәңгелек төшөнсәһе менән генә эш итәһең. Ләкин уларҙың сафтары йылдан-йыл һирәгәйә барҙы. Һәр фотола мин уларҙың кәмей барыуына иғтибар иттем... Хәҙер беҙҙең тотош Хәйбулла районда бер генә Бөйөк Ватан һуғышы ветераны ҡалған тип ишеттем. Бына шулай, беҙ тере һуғыш ветерандарын күргән быуын һәм был яҙмышыбыҙҙың иҫтәлекле бер дәүере.

Шуны ла әйтергә кәрәк, "Еңеү, тыныслыҡ, имен тормош" тигән һүҙҙәр беҙҙе бала саҡтан солғаны. Атайым хәрби темаға арналған китаптарҙы ҡайҙа барһа ла һатып ала торғайны. Маршалдар, генералдар тураһындағы мәғлүмәтлеләргенә һоҡлана инем. Тап шул йәһәттән ул энциклопедик һәләткә эйә булды. Хәрби тематика буйынса ауылда иң бай китапхана беҙҙә булғандыр. Атайым һәр саҡ Үҙәк радионан сәйәси хәлдәрҙе тыңлап барҙы, шул йүнәлештәге журналдарҙы алдырҙы. Әсәйем, һуғыш осоро балаһы булараҡ, үҙе күргән-кисергәндәрҙе йыш иҫләр булды. Ул Ишембай районының Аҙнай ауылы ҡыҙы. Әсәйемдең атаһы Мырҙахан шулай уҡ һуғыштан әйләнеп ҡайта алмай. Сәмиға өләсәйем уны ғүмер буйы көтөп йәшәй. Осрашыу иһә төштә генә насип була... Аҙаҡ әсәйемдең, өләсәйемдең тормошонан алынған бер ваҡиғанан "Еләк беште" тигән хикәйә лә яҙҙым. Бары геройҙарҙың исемдәре генә үҙгәртелде. Әсәйем хикәйәне уҡығас, "Исемдәрҙе үҙгәртмәҫкә кәрәк ине. Булған хәл бит ул", тине. "Еләк беште" рус телендә лә бер нисә тапҡыр сыҡты.

Эйе, тәүге хикәйәләремдең береһе - "Атай икмәге" һуғыш йылдарына арналған. Беҙ бәләкәй саҡтан һуғыш тематикаһына арналған әҙәбиәтте уҡып үҫтек, фильмдар ҙа башлыса

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә муниципалитет башлыҡтарына "Быйылғы иң мөһим ваҡиғаға" - Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына лайыҡлы әҙерләнергә ҡушты. Байрам ойошторолған майҙансыҡтарҙа халыҡтың именлеген тәьмин итеү, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар, һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләре хаҡында хәстәрлек күреү мөһим, тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Башҡортостанда 7,3 меңдән ашыу Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм инвалиды йәшәй. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Премьер-министрҙың беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев хәбәр итте. Һүҙ 88 яугир, 22 Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды, шулай уҡ 5,5 меңдән ашыу тыл эшсәне, бәлиғ булмаған концлагерь тотҡондары, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарҙың (вафат булған) ғаилә ағзалары тураһында бара.

✓Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек сиктәрендә 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышына арналған мемориалдарҙың, һәйкәлдәрҙең һәм обелисктарҙың 99 проценты ремонтланған. БР торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова һөйләүенсә, республика биләмәһендә 2381 ошондай объект иҫәпләнә, уларҙан бөгөнгө көнгә 1440 объектта ағымдағы һәм капиталь ремонт башҡарылған, был пландың 99 процентын тәшкил итә.

✓"Рәсәйҙең Үлемһеҙ полкы" дөйөм Рәсәй граждандыҡ-патриотик хәрәкәте Роспатентта акцияның эмблемаһын теркәне. Документҡа ярашлы, был логотип менән Рәсәйҙә 2033 йылға тиклем ювелир биҙәүестәр, сумкалар, рюкзактар, һауыт-һаба, баш кейемдәре, уйынсыҡтар, шулай уҡ боеприпастар, патрондар, атыу ҡоралы өсөн прицелдар етештерергә һәм һатырға мөмкин.

✓Салауат ҡалаһында яңы хакимиәт башлығы итеп Марат Заһиҙуллин тәғәйенләнде. Марат Ғәйнулла улы 1972 йылдың 13 авгусында тыуған. Әлегә тиклем Стәрлетамаҡ политехник колледжы директоры булып эшләй. Педагогик һәм иҡтисади юғары белемгә эйә. Мәғариф өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн наградалар менән бүләкләнгән. Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы.

✓1 майҙа Баймаҡта Еңеүҙең 80 йыллығына арналған велоуҙыш башланды. Баймаҡтан ете ир-егет велосипедта Өфөгә юлланды. Марафон 8 майҙа Өфөлә Дуҫлыҡ Монументы янында тамамлана. Баймаҡтарҙың Бөйөк Еңеүгә арналған бындай марафондары тәүге тапҡыр үткәрелмәй. Беренсе тапҡыр улар 1975 йылда, Бөйөк Еңеүҙең 30 йыллығына саңғыла Өфөгә юллана. Унда туғыҙ саңғысы баш ҡалаға 13 көн дауамында бара. Икенсе уҙыш 2015 йылда Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына бағышлана.

✓ *Немец офицерының хәбәрен нисек ҡабул итергә лә белмәй һалдат. Алдайҙыр, атыр алдынан албырғаталыр, тип уйлай. Офицер уны алып сығып, ауыл ситенәсә оҙатып, йүнәлеш биреп ебәргәс тә, ана атыр, бына атыр, тип килә.*



Йөрәгем шундай елкенә, ҡаным уйнай, күңелем өҫкә-күккә күтәрелә, мин сабам, сабам, сабам... Уянһам, быларҙың береһе лә юҡ. Һығылып илайым..."

Ошо ваҡиғанан һуң күп йылдар үтте, мин хәрби уҡыуға индем, хеҙмәт иттем, һуғыш башланғас, һуғышҡа алындым. Атайымдың кем булыуын берәүгә лә һөйләмәнем, үҙем дә уны юғалған индеец ҡәбиләһе вәкиле кеүек кенә ҡабул итә инем. Әммә унын ҡаны үҙенең барлығын һиҙҙерҙе. Һуңғы йылдарҙа мине ҡайҙалыр нимәлер тарта. Хатта һуғышҡа ла, бәлки, ана шул саҡырған нәмәне табырмын кеүек булып сыҡҡайным. Йыш ҡына атайымдың төшөн күрәм: далала атта сабам, сабам, сабам... Йөрәгем тулай, ҡаным ярһый... Ә асылда атҡа яҡын барғаным да юҡ.

Һин минең атайымды хәтерләтәһең. Унын шулай тыуған илем, ватаным, тип йән атыуы, ғүмер буйы шул һөйөүенә тоғро булыуы, хатта шул тип һарағайып үлеүе лә, әлеге һинең йәнең ҡыл өҫтөндә көйө өҙөшөүеңә оҡшағайны. Атайым рухына хөрмәт йөҙөнән мин һине ебәрәм. Һин, әгәр тере ҡайтһаң, үҙ илеңдә ошо хаҡта һөйлә, йәме. Илеңә әйт, һинең шундай-шундай улың, һиңә тоғро үлде, тиген..."

Немец офицерының хәбәрен нисек ҡабул итергә лә белмәй һалдат. Алдайҙыр, атыр алдынан албырғаталыр, тип уйлай. Офицер уны алып сығып, ауыл ситенәсә оҙатып, йүнәлеш биреп ебәргәс тә, ана атыр, бына атыр, тип килә. Шулайтып алыҫлашып барып, күҙҙән юғала. Үҙебеҙҙекеләргә юлыҡҡансы, бәрелеш эсенә эләгеп, ҡаты яралана. Контузия хәлендә госпиталгә килеп эләгә. Шунда ауыр хәлдә ошо тарихты үҙенә операция яһаған хирургка һөйләй. Врач иһә, был хаҡта берәүгә лә, бер ваҡытта ла һөйләмәҫкә кәңәш итә. "Бының өсөн һине тотоп атасаҡтар", - тип киҫәтә.

Һуғыш тамамланғас, райондашының ғаиләһен барып таба, унын менән бергә булыуын, батыр һалдат булып һуғышып, ҡаты алыштарҙың береһендә батырҙарса һәләк булып ҡалыуын һөйләй. Аҙаҡ оҙаҡ йылдар ғаиләһенә ярҙам итеп, балалары менән аралашып йәшәй...

Бөгөн инде ул ҡарт һалдаттың булмағанына ла тиҫтәләгән йылдар. Ул был хәлде тәүге апайға һөйләгәндә, бик өҙгөләнеп, ошо хаҡта белдертергә теләп һөйләгән, тиҙәр. "Һеңлем, яҙ әле, бәлки, шул ситтә йәшәп үлгән һалдаттың зат-ырыуы уҡыр һәм минең сәләмде ҡабул итер", - тип әйткән булған имеш ул.

Бөйөк Еңеүҙең сираттағы байрамы алдынан был телдән-телгә күсеп килеп еткән тарих, тыуған ерҙәренән ситтә ҡалған башҡорт яугирҙарының һынмаҫ рухы, һөйөү тулы сәләме булып ҡабул ителһен ине.

**З. СӘҒИТОВА.**
**Белорет районы.**

шул турала ине. Эргә-тирәбеҙҙә шул йылдарҙы хәтерләгән, ауырлыҡтарын кисергән кешеләр ҙә байтаҡ ине. "Атай икмәге" хикәйәһе тормоштан алынғанмы?" тип йыш ҡына һорау бирәләр. Тормошсан булғаны өсөн ул шулай ғүмерлелер. Иң мөһиме, уны бит балалар бик яратып уҡый. Инде ниндәй генә мәктәп уҡыусылары уны сәхнәләштермәне икән? Мин йәш быуындың геройҙарымды - ике малай яҙмышын ҡабул итеүҙәренә, уларҙы аңлауҙарына ҡыуанам. "Икмәк изге нәмә" тип нотоҡ уҡып ҡына унын изгелеген аңлатып булмай. Ә бына хикәйә аша балалар быны үҙҙәре аңлай башлай. Икенсе яҡтан, "туғанлыҡ" тигән төшөнсәгә лә мөнәсәбәт үҙгәрә. Бер ир баланың: "Үҙемдең ҡустымды ҡыйырһытҡан сағым булды. Хәҙер улай эшләмәм. Уға ағай булып, ярҙам итергә генә тырышырмын", - тигәнен нисек онотмаҡ кәрәк?

Эйе, ауыр һуғыш йылдары кешелек сифаттарын һынаны. Берҙәмлектә көс булғанда ғына ҡыйынлыҡтарҙы еңеп була. Мин иһә әҙәбиәттә шул осор балаларына хикәйә аша үҙенсәлекле һәйкәл ҡуя алыуым менән бәхетлемен.

Былтыр профессиональ яҙыусылар араһында патриотик әҫәрҙәр ижад итеү буйынса "Заман ауазы" ("Голос эпохи") конкурсында бәләкәй проза номинацияһында урын алған "Еңеү ҡанаттары" тигән хикәйәләр йыйынтығым да тотошлайы менән Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына арналған.

Һүҙ сәнғәтенең тәьҫир итеү көсө бар, халыҡтың рухы һүнмәгән. Илдә, донъяла тыныслыҡ, имен тормош өсөн беҙҙең һәр беребеҙ үҙ өлөшөн индерә ала, тигән ышаныс та уяна. Һәр хәлдә, яҡшылыҡҡа саҡырыу - беҙгә ата-бабаларыбыҙҙан меңәр йылдар аша килеп еткән изге аманат ул. Беҙ ошо аманатҡа тоғро булырға тейешбеҙ.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ПЛАНЕТА БУЙЛАП ЕҢЕҮ АТЛАЙ

**Бөтөн планета немец фашистарын Европа аша ҡыуа барып, юлында күп илдәрҙе баҫҡынсы ҡоллоғонан азат итеүсе совет ғәскәренең дошманды үҙ өңөндә дөмөктөрөүенә - Бөйөк Еңеү яулауына 80 йыл тулыуҙы лайыҡлы ҡаршылай.**

Мәскәү йөрәге Ҡыҙыл майҙан тантаналарынан алда уҡ әле нацистик Германия илбаҫарҙарын Еңеү датаһы бик күп сит илдәрҙең прогрессив йәмғәтселеге тарафынан берҙәм билдәләнде: Париж, Лондон, Аргентинаның Буэнос-Айрес, Мардель-Плата, Росарио, Парана, Обера, Ушайя ҡалаларында, Каракаста (Венесуэлла), Амстердам, Вашингтон ҡалаларында, Ҡытайҙа, Германияла, Чилиҙа, шулай уҡ башҡа бик күп тарафтарҙа, шул иҫәптән, БДБ илдәрендә Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы хөрмәтенә миллионлаған кешеләр ташҡыны "Үлемһеҙ полк" Дөйөм Рәсәй патриотик хәрәкәтенә ҡушылды һәм ҡала урамдары буйлап байраҡтар, плакаттар, фронтовик яҡындарының портреттарын тотоп, тығыҙ сафтар менән үтте. Хатта Израилдә лә һуғыш йылдарындағы Ҡыҙыл Армия флагтары һәм Рәсәй триколоры менән биҙәп, Еңеү байрамына автоуҙыш бағышларға ҡарар иткәндәр. Дөрөҫ, Вашингтонда рәсми килешелгән тәртиптә алты йыл эсендә беренсе тапҡыр үткәрелгән "Үлемһеҙ полк" акцияһын, полицейскийҙар һаҡлап килеүгә ҡарамаҫтан, урындағы украин активистары төркөмө өҙөргә маташҡан, Рәсәйгә ҡаршы лозунгылар ҡысҡырып, тәртипһеҙлектәр булдырып, тантана сафтарын таратырға тырышҡан, ләкин хоҡуҡ һаҡсылары бик тиҙ тәртип урынлаштыра алған һәм артабан акция берҙәм, ойошҡан рәүештә дауам иткән, тип яҙа МК.РУ телеграм-каналы. Рәсәйҙә иһә тарихыбыҙҙағы был төп даталарҙың береһе илебеҙҙең бөтөн ҡала-ауылдарында шулай уҡ киң билдәләнә. Төп байрам, әлбиттә, Мәскәүҙә, Ҡыҙыл майҙанда үтә. Еңеү Парадында үҙебеҙҙең өлгөлө хәрби частар менән бер ҡатарҙан 19 дуҫ илдең хәрбиҙәре ла ҡатнаша. Шулай уҡ ошо дәүләттәрҙең башлыҡтары, йылдағыса, беҙгә килеп, Рәсәй халҡының байрам шатлығын уртаҡлаша.

Ә был ваҡытта АҠШ президенты Дональд Трамп, ниһайәт, февралдән алып теләнән төшөрмәгән маҡсатына ирешә: Украина конфликтынан үҙенә "мәрәй" эләктереп, Киевты ресурстар буйынса килешеүгә ауҙара алды. АҠШ иҡтисады өсөн әһәмиәте икеле был ваҡиға донъя күләмендә, шул иҫәптән, сәйәсмән һәм күҙәтеүсе эксперттар араһында төрлө ҡараш тыуҙырҙы. Шуларҙың береһе Сергей Марков фекеренсә, мәҫәлән, Дональд Трамп менән Киев араһында Минераль килешеүгә ҡул ҡуйыу Пентагондың ҡайтанан конфликт зонаһына әйләнеп ҡайтыуына - Украинаға спутник ярҙамы күрһәтеп, Рәсәй территорияларын сәпкә тотоуға сәбәп булды. Ә быға тиклем бит Трамп Пентагонға Рәсәй ерҙәренә һөжүмдә ҡатнашыуҙы тыйғайны. Хәҙер иһә, тип яҙа күҙәтеүсе, Аҡ йорт хужаһының үҙе тәнҡитләгән элекке президент Байден курсына төшөп алыуы ла ихтимал. Әгәр шулай булмаһа, 3 майға ҡарай төндә Украинаның Storm Shedow Британия ракеталары ярҙамында Новороссийскиҙы утҡа тотоуын нисек аңлатырға? Дошман Брянск өлкәһенең автотрансформатор заводын "Град" реактив системаһы ярҙамында утҡа тотоп, шартлатты. Әйтерһең дә, Зеленскийҙың бәйле ҡулдарын систеләр: Киев һөжүмгә ташланды: Ҡырым, Анапа, Новороссийск, Тамань һәм Ростов өлкәһе тораҡ пункттары утҡа тотолдо; был төн Рәсәйгә ҡаршы 170-ләгән дрон осоролдо, бынан тыш, һигеҙ Storm Shedow ҡанатлы ракета, өс "Нептун-МД ракетаһы һәм 14 диңгеҙ шартлатҡыс аппараты файҙаланылды. Ҡоторонған Зеленский баллистик ҡоралланыу хаҡында ла ниәтен белдерә әле.

Шул арала Аҡ йортта Рәсәйгә ҡаршы яңы санкциялар әҙерләнә. Улар "Газпром" һәм эре банктар эшмәкәрлегенә ҡаршы йүнәлтеләсәк. Трамптың беҙҙең илгә йышлаған һәм Рәсәй етәкселеге менән дуҫтарса йылы мөнәсәбәт ҡора башлаған советнигы Стив Уиткоффҡа ла Мәскәү менән аралашыу каналын япмаҡсылар. Ә бына сәйәсмән Геворг Мирзоян ҡабалан һығымталар яһамай торорға саҡыра һәм Украина менән әлеге килешеүҙең Трамп өсөн һайлаусыларына 100 көн президентлыҡ осоронда, исмаһам, нимәлер эшләгәнен күрһәтеү өсөн кәрәк, ти. Дөрөҫ, һирәк ҡаҙылдыҡтар буйынса тығыҙ биттән торған был килешеүҙә АҠШ яғынан Украинаға ҡарата бер ниндәй ҙә хәүефһеҙлек йә ҡурсылау гарантияһы белдерелмәй, тик шулай ҙа килешеүҙе ошо ике илдең Рәсәйгә ҡаршы берләшеүе тип аңларға ла була, сөнки ошо ваҡиғанан һуң Ҡушма Штаттар Киевҡа 50 млн долларлыҡ ҡорал һатырға йыйына. Бынан тыш, Украина өсөн F-16 истребителдәрен хеҙмәтләндереү маҡсатында 310 млн долларға контракт әҙерләнеүе хаҡында ла һүҙ бара. Мәсьәләгә тағы бер ҡараш: Зеленскийҙы Ҡушма Штаттарға илде һатыуҙа ғәйепләүселәр ҙә бар.

Украина президенты Зеленский Рәсәй лидеры Владимир Путиндың 9 май Еңеү байрамы көндәрендә хәрби хәрәкәттәрҙе өс көнгә туҡтатып тороу хаҡындағы тәҡдимен кире ҡаҡты һәм бының менән генә сикләнеп ҡалмайынса, Рәсәйгә теләктәш сит ил лидерҙарын Мәскәүгә, Ҡыҙыл майҙанда үтәсәк байрамға бармаҫҡа өндәй башланы. Эксперттар, был унын Ҡыҙыл майҙанға хәүеф янауына ишаралауы, тигән һығымтаға килде. Ләкин, РФ Хәүефһеҙлек советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев әйтмешләй, был осраҡта Зеленский Киев менән ниҙәр буласағын яҡшы аңлай булыр, шуның өсөн дә унын аҡылһыҙ ишараһын сираттағы провокация тип уйларға ла була. Икенсе яҡтан, күп тапҡырҙар инде психик тотороҡһоҙлоғо менән дан алған Зеленскийҙан теләһә ниндәй аҡылһыҙлыҡ көтөргә була, шуға күрә Кремлдән белдереүҙәренсә, Мәскәүҙә Еңеү байрамы хәүефһеҙлеген ышаныслы тәьмин итеү өсөн бөтәһе лә эшләнә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡорт теленән халыҡ-ара диктантты 405 472 кеше яҙған, тип хәбәр итә акцияны ойоштороусылар. Офлайн майҙансыҡтарҙа 332,9 мең кеше диктант яҙһа, 72,5 мең ҡатнашыусы онлайн форматты һайлаған. Шулай уҡ Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән - 18,4 меңдән ашыу, башҡа илдәрҙән 1,6 мең кеше башҡорт теленән белемен тикшергән. Башланғыс кимәлгә 152,3 мең кеше өҫтөнлөк биргән, 167,4 меңе - иркен аралашыусылар өсөн, тағы 85,6 меңе төньяҡ-көнбайыш диалектында диктант яҙған.

✓Башҡортостан менән Үзбәкстан берлектәге "Бекабад" технопаркын булдырырға планлаштыра. Тейешле килешеүгә Үзбәкстанда "Иннопром. Үҙәк Азия" халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһе барышында ҡул ҡуйылған. Документҡа ярашлы, берлектәге технопарк булдырыуҙа яҡтар Рәсәй һәм Үзбәкстан инвесторҙарын йәлеп итергә йыйына. Бының өсөн Башҡортостан һәм Үзбәкстан резиденттарға ярҙам саралары исемлеген әҙерләй.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 29 апрелдә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам сараларына ҡағылышлы указға үҙгәрештәр индерҙе. Документҡа ярашлы, республика етәксеһе Рәсәйҙең Оборона министрлығы менән хәрби контракт төҙөгән өсөн түләүҙәрҙең ғәмәлдә булыу ваҡытын 2025 йылдың 15 майына тиклем оҙайтты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостандан илдең оборона ведомствоһы менән килешеүгә ҡул ҡуйған хәрби хеҙмәткәрҙәргә бер тапҡыр 1,6 миллион, федераль өҫтәмәне иҫәп алып, ике миллион һум түләнә.

✓Башҡортостанда ауыл еренә эшкә ҡайтҡан мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре 1 миллион һум аҡса алырға мөмкин. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған ҡарарға ярашлы, аҡсаға республика ауылдарына йәки 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларға эшкә килгән 35 йәшкәсә белгестәр дәғүә итә ала. Белгес бер һәм унан да күберәк ставкаға эшкә урынлашырға тейеш. Маҡсатлы түләү белгестәрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуҙы, шәхси автотранспорт һатып алыуҙы ла күҙ уңында тота. Ғаризалар республиканың мәҙәниәт министрлығында 15 апрелдән 15 июлгә тиклем ҡабул ителә.

✓Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдереүенсә, 21-30 апрелдәге "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы сиктәрендә үткәрелгән рейд ваҡытында врачтар 29 тораҡта 14389 кешене тикшергән һәм 14 кешелә - яман шеш, 19 кешелә - шәкәр диабеты, 408 кешелә йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын асыҡлаған. Бар пациенттар ҙа дауалауға һәм тикшерелеүгә ебәрелгән.

ҠЫҪҠАСА

# СӘСЕҮГӘ ТӨШТӨЛӘР

**Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, бөгөнгә Башҡортостандың бөтә районлары тиерлек иртә технологик операцияларҙы тамамлаған.** Планлаштырылған майҙандарҙың 99 процентында, йәғни 1104 мең гектарҙа дым ҡаплау үткәрелгән. Ужым культураларын туҡландырыу майҙандарҙың 94 проценттан ашыуында тамамланған (238 мең гектар). 49 районда сәсеү башланған да инде. Яҙғы культураларҙы сәсеү майҙаны буйынса әлеге ваҡытта Стәрлетамаҡ районы аграрийҙары алдынғылыҡты биләй, улар 39 мең гектарҙан ашыу, йәғни планға ярашлы майҙандарҙың 40 процентын сәскән. Шулай уҡ Әлшәй (20 мең гектар - 31 процент), Ҡырмыҫҡалы (17 мең гектар - 35 процент) һәм Ауырғазы (17 мең гектар - 27 процент) райондары алдынғы урындарҙа бара.

✓ **Башҡортостанда яңы һөнәри байрам - Йәштәр сәйәсәте өлкәһе хеҙмәткәре көнө барлыҡҡа килде. Республика Башлығы Радий Хәбиров уны булдырыу тураһында законға ҡул ҡуйған.** Яңы байрам июндең һуңғы шәмбеһендә, Йәштәр көнөндә билдәләнә. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, яңы һөнәри байрам булдырыу тураһында ҡарар йәштәр менән эшләгән белгестәрҙең әһәмиәтен һәм йәштәр сәйәсәтенең ролен таныу хаҡында һөйләй. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда йәштәр сәйәсәте өлкәһендә 68 учреждение эшләй, улар 179 йәштәр клубын һәм үҙәген берләштерә, ә муниципалитеттарҙа 1500-гә яҡын белгес иҫәпләнә.

✓ **Башҡортостандың йәмәғәт палатаһы "Атай ҡаһарманлығы" йәмәғәт наградаһына республика конкурсына ғаризаларҙы 2025 йылдың 31 майына тиклем ҡабул итә.** Үҫеп килеүсе быуынды лайыҡлы тәрбиәләгән, ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлаған, традицияларҙы тергеҙгән, шулай уҡ йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнашҡан өсөн йәмәғәт наградаһын Башҡортостанда алтынсы тапҡыр тапшыралар. Конкурс тураһында положениела конкурс ғаризаларын баһалауҙың өс критерийы билдәләнгән: конкурсҡа ҡатнашыусының балалар тәрбиәләүгә индергән өлөшө, йәмәғәт, ирекмәнлек эшмәкәрлегенә, уның профессиональ, хеҙмәт эшмәкәрлегендәге ҡаҙаныштарына индергән өлөшө, ғаилә ҡиммәттәрен үҫтереүгә өлөшө. Конкурс шарттары тураһында өҫтәмә мәғлүмәт өсөн телефон: 8 (347) 280-82-36.

✓ **Өфөлә "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһы эргәһендәге биләмәне төҙөкләндереү эше дауам итә.** Буш ятҡан урын өфөләрҙе йәлеп итеү урындарының береһенә әйерелде, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. Бында ҡыҙыҡлы объекттар төҙөлә, уҡыусылар экскурсияға килә. Өфө мэры Ратмир Мәүлиев һүҙҙәренсә, сентябрҙә стела янындағы скверҙа бронепоезд ҡуйыу планлаштырыла. Әле әҙерлек эштәре алып барыла. Бынан тыш, скверҙа Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһендә етештерелгән заманса двигатель ҡуйыла. Радий Хәбиров билдәләүенсә, стела тирәһендәге биләмә республика ҡаҙаныштарының үҙенсәлекле күргәҙмәһе булмаҡсы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕҢЕҮ БАЙРАҒЫН ЭЛӘЙЕК!



**Еңеү көнөндә Башҡортостанда власть органдары биналарын Еңеү байрағының күсермәләре биҙәйәсәк.**

Был - II дәрәжә Кутузов орденлы 150-се Идрица уҡсылар дивизияһы әләме. 80 йыл элек Берлинда тап уны рейхстагҡа ҡаҙағандар. Еңеү символын ҡулланыу тәртибе республика законы менән нығытылған. Уны үтәмәгән өсөн административ яуаплылыҡ ҡаралған, тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтендә.

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Еңеү байрағы - фашизмды еңеүҙең төп символдарының береһе. Был Ватанды һаҡлаған, донъяны фашизмдан азат иткән ата-бабаларыбыҙҙың иҫтәлегенә хөрмәт билдәһе булып тора. Еңеү көнөндә дәүләт власы органдары биналарына Рәсәй һәм Башҡортостан флагтары менән бер рәттән, Еңеү байрағы ла эленергә тейеш. Байраҡты Еңеү көнөнә арналған башҡа тантаналы сараларҙа ҡулланырға мөмкин.

# ҺУҒЫШ БАЛАЛАРЫНА...

**Башҡортостанда һуғыш балалары статусы булғандарға Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан 2-шәр мең һум аҡса түләнә. Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡуйған.**

Һүҙ 1927 йылдың 22 июненән 1945 йылдың 3 сентябренә тиклем тыуған һәм республикала даими йәшәгән оло быуын вәкилдәре тураһында бара. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев мәғлүмәттәре буйынса, әле Башҡортостанда улар 100 меңдән ашыу иҫәпләнә.

- Республиканан 2 мең һумды 108 меңгә яҡын ветеран алырға тейеш. Ветерандарҙың айырым категорияларына Еңеү көнө айҡанлы аҡса федераль бюджеттан түләнә. Был Икенсе донъя һуғышы осоронда фашистар һәм уларҙың союздаштары ойоштороған элекке концлагерь, гетто тотҡондарына, Финляндияға ҡаршы һуғыш, Бөйөк Ватан һуғышы, Японияға ҡаршы һуғыш осоронда һәләк булған яугирҙарҙың тол ҡатындарына, вафат булған Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың тол ҡатындарына һ. б. ҡағыла. Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге аҡсаны 9 майға тиклем тарата, бер ниндәй ҙә ғариза яҙырға кәрәкмәй, - тине Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова.

# КЛАСТЕРҘАР ТӨҘӨҮ ӨСӨН...

**Башҡортостандың һигеҙ колледжы "Йәштәр һәм балалар" милли проектының "Профессионалитет" федераль проектында ҡатнашыу өсөн һайлап алыу конкурсында еңеүселәр иҫәбенә инде, тип белдерҙе республика етәксеһе Радий Хәбиров.**

Шулай итеп, кластерҙар төҙөү өсөн колледждарға бөтәһе 800 миллион һум аҡса бүленә. Еңеүселәр исемлегендә Нефтекама машиналар эшләү һәм күп профилле, Кушнаренко күп профилле, Туймазы индустриаль, Башҡортостан аграр-технологик, Өфө яғыулыҡ-энергетика колледждары, шулай уҡ Бәләбәй механизация һәм электрлаштырыу колледжы, Башҡортостан архитектура, төҙөләш һәм коммуналь хужалыҡ колледжы бар.

Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, был юғары һөҙөмтә, сөнки башҡа төбәктәрҙә бер-ике генә проект һайлап алынған. Колледждарҙы ремонтлау буйынса төбәк программаһы дауам итә. Киләһе йылдарҙа барлыҡ урта махсус уҡыу йорттарының инфраструктураһын һәм белем биреү базаһын тәртипкә килтереү планлаштырыла.

# ФЕРМЕРҘАРҒА - ЕР

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышында фермер хужалыҡтары өсөн ауыл хужалығы участкаларының максималь күләмен 40 тапҡырға арттырыу тураһында закон ҡабул ителде.**

Республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров әйтеүенсә, республикала баҫыу етешмәү мәсьәләһе хәл ителде. Был проблема тураһында һәр ваҡыт эшҡыуарҙар менән осрашыуҙарҙа һөйләнеләр, әммә уны хәл итеү өсөн хоҡуҡи механизмдар юҡ ине.

"Башҡортостанда күп кенә уңышлы хужалыҡтар артабан үҫешергә әҙер, әммә ғәмәлдәге сикләүҙәр уларға үҙ ҡеүәтен тулыһынса асырға мөмкинлек бирмәне. Хәҙер иһә уларҙың майҙаны элеккe 50 гектар урынына 2000 гектарға етергә мөмкин. Беҙҙең 7 меңгә яҡын фермер хужалығы бар, улар миллион гектар самаһы ерҙе файҙалана. 400-ҙән ашыу ферма 2000 гектарҙан ашыу участкаға эйә һәм төбәктең аграр продукцияһының төп өлөшөн тәьмин итә. Ундай ҙур ауыл хужалығы предприятиелары республиканың артабанғы үҫешенә, инвестицияларына һәм аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген нығытыуға булышлыҡ итә. Ерҙе арттырып һәм ташландыҡ майҙандарҙы йәлеп итеп, ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙе 2030 йылға 25 процентҡа арттырыу маҡсатын ҡуйыбыҙ. Президентыбыҙҙың был йөкләмәһе Башҡортостан кеүек ҙур аграр төбәктең мөмкинлектәренә тулыһынса тап килә", - тип яҙҙы Андрей Назаров үҙенең социаль селтәрҙәрендә.

# ЛЕНИН ПАРКЫ ЯҢЫРА

**Өфөнөң Ленин исемендәге паркын реконструкциялауҙы 2026 йылдың 11 октябрендә, Республика көнөн билдәләнгәндә тамамлау күҙаллана.**

Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Арыҫланбәк Хәйҙәров әйтеүенсә, парк биләмәһендәге бөтә һәйкәл һәм мемориаль зоналар тулыһынса тәүге ҡиәфәтендә һаҡланасаҡ. "Эш тамамланғас, фонтан яҡтылыҡ-музыкаль фонтанға әйләнә, әммә уның күләме элекке кеүек ҡала. Шулай уҡ бында интерактив майҙансыҡ, бәләкәй сәхнә һәм балалар өсөн уйын комплексы, шул иҫәптән һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн дә ҡаралған. Яңыртыу проектына пандустар һалынған", - тине А. Хәйҙәров.

Паркта - 10 мең квадрат метрҙан ашыу япма, шуға күрә реконструкция етди үтәсәк. Ремонт 12 майҙа башлана. Эш барышында объект тулыһынса ябыла.

Эш хаҡы 111 миллион һум тәшкил итә. Проект федераль, төбәк һәм муниципаль бюджеттарҙан "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты һәм "Уңайлы ҡала мөхитен формалаштырыу" федераль проекты сиктәрендә финанслана.

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рәсәйҙә өс көнлөк эш аҙнаһы башланды. Был Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү көнөн билдәләү менән бәйле. Ял көндәре 8 майҙан 11-нә тиклем дауам итә. Башҡортостанда киләһе оҙайлы байрам көндәре июнь айында көтөлә. 6 июнь - Ҡорбан байрамы, ә 12 июнь - Рәсәй көнө.

✓ Ғаиләләргә 3 йәшкә тиклемге бала өсөн Әсәлек капиталынан айлыҡ аҡса 5 майҙа күсерелде. Эшләп йөрөгән хеҙмәткәрҙәргә йәш ярымға тиклем пособие ғәҙәттәгенән иртәрәк - 7 майҙа түләнә, тип иҫкә төшөрҙөләр Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә. "Республикала пенсия түләү көндәре майҙың байрам һәм ял көндәренә тап килмәү сәбәпле, аҡса ғәҙәти график буйынса: почта аша - 3-25 майҙа, банк иҫәбенә - 12, 21 һәм 23 майҙа күсә", - тип өҫтәнеләр Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса бүлексәһендә.

✓ Башҡортостанда 2025 йылғы һыу инеү миҙгеленә әҙерлек әүҙем бара. Был хаҡта Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов хәбәр итте. Мәҫәлән, ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү һәм бөтөрөү буйынса республика комиссияһы ултырышында көн тәртибендә алдағы һыу инеү миҙгелендә республиканың һыу объекттарында кешеләрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә әҙерлек мәсьәләһе ҡаралды. Уны 1 июндән асыу планлаштырыла.

✓ Башҡортостан шашкасылары йәштәр араһында Европа беренселегендә еңеүгә өлгәште. Республиканың спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Төркиәлә шашка-64 буйынса халыҡ-ара ярыштар бара. Турнирҙың тәүге көндәрендә тиҙ һәм йәшен тиҙлегендәге уйын буйынса ярыштар уҙҙы. Ишембайҙан Софья Степанова һәм Милана Хазиева еңеүсе булды. Милана шулай уҡ көмөш миҙал яуланы. Өфөнән Егор Сарбашев иһә алтын һәм бронза миҙалдар алды.

✓ Бәйләнеште үҫтереү өсөн һалым ташламалары Башҡортостандың 24 ауылында интернет үткәрергә мөмкинлек бирҙе. Һалым льготаһы сиктәрендә республиканың мөһим трассаһында - "Өфө - Инйәр - Белорет" автомобиль юлында тотороҡло элемтә һәм мобиль интернет булдырыласаҡ. 2025 йылдың аҙағына тиклем операторҙар 11 яңы база станцияһы төҙөргә һәм 76 саҡрым оҙонлоҡтағы магистралдең бөтә участкаһында элемтә булдырырға ниәтләй. Бөгөнгө көнгә алты база станцияһы файҙаланыуға тапшырылған.

✓ Күрәү һәләте сикле Стәрлетамаҡ йөҙөүселәре Артур Сәйфетдинов менән Виталий Цыбрюк Калугала үткән Рәсәй чемпионатынан 11 миҙал алып ҡайтты. 2-се спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Артур Сәйфуллин, арҡала йөҙөүҙә, брасста һәм ирекле стилдә, шулай уҡ эстафета составында ярышып, биш көмөш миҙал яулаған. Виталий Цыбрюк наградаларҙың тулы комплектын йыйған: ирекле стилдә 50 һәм 100 метрға йөҙөүҙә ике алтын миҙал, шәхси йөҙөүҙә һәм эстафетала ике көмөш һәм ике бронза миҙал алған.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## Һуғыш тураһында кем яҙа? Әлбиттә, яҙыусылар! Элек тә, хәҙер ҙә! Һуғыш темаһына тотонорға нимә мәжбүр итте һеҙҙе, тип бөгөнгө заман яҙыусыларына мөрәжәғәт иттек.

*Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА, журналист, шағирә, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры:* Һуғыш темаһына мин килмәнем, ул тыуғандан алып минең йөрәгемдә йәшәй, сөнки атайым Сәлимйән Ноғман улы илебеҙҙе дошмандан һаҡлап, фронтта алышҡан, ҡаты яраланып, госпиталдә ятҡанда өс ҡалын дәфтәр шиғырҙарын ҡалдырып, аҙаҡ һуғыш яраларынан сирләп, 28 йәшендә генә яҡты донъянан киткән. Миңә ул саҡта ни бары йәш ярым, апайыма дүрт йәш кенә була. Уйлап ҡараһаң, атайым беҙгә ғүмер бирер өсөн генә ҡайтҡан, гүйә...

Һуғыш арҡаһында беҙ атайһыҙ үҫтек, ләкин 13 йәшенән генә колхоз эшендә эшләп, 15 йәшендә тракторға ултырған әсәйебеҙ Миңһылыу Шәрифйән ҡыҙы беҙҙе етем итмәне, уның ҡарауы, тылдағы ауыр эштән сирләп, ике тиҫтә йылдан ашыу атлап йөрөүҙән мәхрүм булып, түшәктә ятты. Былар бөтәһе лә кескәйҙән мине уйландырҙы, йөрәгемә инеп ултырҙы. Һуғыш афәтенең фажиғәле эҙемтәһен үҙ яҙмышымда татырға тура килде, шуға ла бөгөнгө быуындар, айырыуса йәштәр, үҫмерҙәр тынысылыҡ, бәхетле балаасаҡ һәм икмәк ҡәҙерен белеп үҫһендәр һәм баһалай алһындар ине, тигән теләк оҙатып йөрөнө мине ғүмер буйы. Һуғыш ветерандары менән бергә тыл ауырлығын иңдәрендә күтәргән ҡатын-ҡыҙ, ул саҡтағы үҫмерҙәр ҙә өлкәнәйҙе, уларҙың сафтары кәмегәндән-кәмей башланы. Әбит тап улар Бөйөк Ватан һуғышының тере шаһиттары, илебеҙ тарихының ижадсылары. Улар китеп бөтһә, үҙҙәре менән ошо тарих биттәрен, уның мөһим, ғибрәтле һабаҡтарын мәңгелеккә үҙҙәре менән алып китәсәк!

Әмәлгә ҡалғандай, Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы алдынан ҡулыма белорус яҙыусыһы Светлана Алексиевичтың фашистар һөжүмен иң беренсе булып ҡабул иткән Беларусь ере ҡатын-ҡыҙҙары һәм балаларының һуғыш иҫтәлектәренән торған ике китабы ҡулыма килеп эләкте. Күрәһең, яҙмыш мине үҙе ошо темаға торған һайын яҡынырак этәрҙе. Шуға күрә мин дә "Йәншишмә" гәзитендәге төп эшемдән тыш, үҙебеҙҙең тыл ветерандары менән осрашып, уларҙың хәтирәләрен яҙып ала башланым. Торабара ошо иҫтәлектәргә Башҡортостандың утыҙҙан ашыу район-ҡалаларынан, ауылдарҙан, хатта сит төбәктәрҙә йәшәүсе тыл ветерандары хәтирәләре лә өҫтәлде. Был хәтирәләрҙең гәзиттә баҫылған өҙөктәрен уҡып, ошо турала радио тапшырыуҙарын ишетеп, тыл ветерандары үҙҙәре мине эҙләп килә, хаттар ебәрә башланы. Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә ҙур өлөш индергән тыл әһәмиәте хаҡындағы тарихи-документаль хеҙмәттәр, гәзиттә, рәсми тел менән яҙыла, мәғлүмәт һәм һандар теҙеп бирелә. Унда, ҡыҙғаныста, Еңеү өсөн барыһын да эшләгән, аслығын да, яланғаслығын да, күп үлемдәрҙе лә күргән, ләкин түҙгән, "Бөтәһе лә фронт өсөн!" тип көнө-төнө эшләгән айырым кешеләрҙең ул саҡ нисек йәшәүе, фиҙакәр хеҙмәттәре хаҡында шәхси иҫтәлектәре тыңлаусы йә уҡыусы аңына бөтөнләй икенсе төрлө тәьҫир итә: илата ла улар, уйлата ла... Уларҙа күпме күҙ йәше, һыҙланыу, йөрәк әрнеүҙәре, ҡайғы-хәсрәт, ғаилә фажиғәләре. Тыл ветерандары хәтирәләренән тотош һуғыш йылъяҙмаһын күҙ алдына килтерәһең.

Шулай итеп, 2010 йылда Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына 65 тыл ветеранының "Һуғыш балалары - тарих яралары" тигән тәүге йыйынтығым баҫылып сыҡты. Уҡыусылар был китапты ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул итте, был мөһим, кәрәкле эште дауам итеүемде һорауҙылар, хаттар яуҙырҙылар. Һөҙөмтәлә 2015 йылда Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына "Һуғыш яралаған бала саҡ" тигән икенсе китабым донъя күрҙе.

Һуғыш темаһы күңелемдән китмәне. Оло кешеләр менән күберәк аралашҡан һайын, төрлө төбәктәрҙә тыл хеҙмәтсәндәренең төрлө фиҙакәрлек өлгөләре, ҡаһарманлыҡ ғәмәлдәре мәғлүм булды, улар хаҡында ла башҡалар белергә тейештер, тип уйланым. Былар бит совет тәрбиәһе алған кешеләрҙең тиңһеҙ илһөйәрлек өлгөһө, тарихыбыҙ хазинаһы. Улар башҡа китаптарҙа, мәктәп дәреслектәрендә юҡ. Бөгөнгө тормошобоҙҙоң, тынысылыҡтың ҡәҙерен белер өсөн беҙ уларҙы яҙып ҡалдырырға тейешбеҙ. Ана шул балаларҙың иҫтәлектәренән "Һуғыш балалары һөйләй" тигән өсөнсө китабым Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналды һәм 2020 йылда баҫылып сыҡты.

Тормош ағышын туҡтатып булмай, ветерандарыбыҙ ҙа бик аҙ ҡалды. Рәсәй оборона министры Андрей Белоусов яныраҡ уларҙың һанын атаны: "Бөгөн Рәсәйҙә ни бары 7 меңләп фронтовик ҡалды. Уларҙы беҙ айырым хәстәрлек менән солғап алайыҡ, бөрөүһе лә иттибарһыҙ ҡалмаһын", - тине ул. Ләкин бит тыл ветерандарының да иҫәндәре бөгөн йөҙйәшәр йәштә. Быйыл сыҡҡан "Беҙ һуғыш балалары" тип исемләнгән дүртенсе китабымды Еңеүҙең 80 йыллығына бағышланым һәм унда зиһендәре теүәл, теремек 105, 107 йәшлек инәйҙәр, уларҙан тыш һуғыш йылдарында кескәй балалар булһалар ҙа, тыл ауырлыҡтарын, һуғыш афәтен бик иртә төшөнгән һуғыш балалары үҙ иҫтәлектәре менән уртаҡлаша.

...Бөгөн дә донъялар тыныс түгел, фашизм баш ҡалҡыта. Уларға ҡаршы алып барылған Махсус хәрби операция яугирҙарына бөгөн дә тыл ярҙамы ҙур. 2023 йылда сыҡҡан "Китә ирҙәр Донбасҡа, илде утҡа һалмаҫҡа" тигән шиғырҙар һәм поэмам йыйынтығын илебеҙ азатлығын яҡлап көрәшеүсе батыр яугирҙарыбыҙға арнаным. Әлбиттә, һуғыш темаһына яҙыу ауыр һәм йөрәккә төшө торған ижад ғазабы ул. Ләкин яҙыусы был теманан ситләшергә тейеш түгел, ул тема үҙе йөрәкте ярып килеп инә - был хаҡта һөйләмәй, яҙмай, донъяла нисек йәшәмәк кәрәк! Үткәндәрен онотҡандың киләсәге юҡ, тип халыҡ бик хаҡ әйтә бит.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ГӘРӘЕВ МУСА ҒАЙСА УЛЫ

М.Ғ. Гәрәев - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан хәрби хеҙмәткәр, осоусы-штурмовик, гвардия полковнигы. Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы. Ул 1922 йылдың 9 июлендә Башҡорт АССР-ының Бәләбәй кантоны (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Илеш районы) Иләкшиҙе ауылында башҡорт крәҫтиәне ғаиләһендә тыуған. Ете йәше тулғанда ғаиләһе Ташшишмә ауылына күсә, 1937 йылда Бишҡурай ете йыллыҡ мәктәбен тамамлай.

1939-1940 йылдарҙа Өфөлә Тимер юл халыҡ комиссариаты техникумында уҡый. Бер үк ваҡытта Өфө аэроклубында шөғөлләнә. 1940 йылдың 15 декабрендә Ҡыҙыл Армияға алына. 1942 йылда Энгельс хәрби авиация мәктәбен тамамлай.

1942 йылдың сентябренән Бөйөк Ватан һуғышының Сталинград фронтында 26-сы штурмлау авиация дивизияһы составында хеҙмәт итә, шул уҡ йылдың 11 декабрендә Ил-2 самолётында тәүгә хәрби осош яһай. 1943 йылдың февраленә ҡарай 11 хәрби осош яһай, "Батырлыҡ өсөн" һәм "Сталинградты обороналау өсөн" миҙалдары менән бүләкләнә.

Артабан Көнъяҡ, 4-се Украина һәм 3-сө Белорус фронттарында 944-се штурмлау авиация полкында осоусы-штурмовик, 76-сы гвардия штурмлау авиация полкында звено, эскадрилья командиры булып хеҙмәт итә. 1944 йылдан - 76-сы гвардия штурмлау авиация полкында эскадрилья командиры, гвардия капитаны, 1945 йылдан - гвардия майоры званиеһын ала.

Сталинград күгендә, Ҡырым, Белоруссия, Польша, Германиялағы һуғыштарҙа ҡатнаша. Һауа алыштарында, дошман позицияларын штурмлағанда дошмандың бик күп хәрби техникаһын, танкыларын, орудиеларын һәм тере көсөн сафтан сығара.

1944 йылдың авгусына тиклем 76-сы гвардия штурмлау авиация полкының эскадрилья командиры, гвардия капитаны Муса Гәрәев 164 хәрби осош яһай, күрһәткән батырлыҡтары һәм ҡаһарманлыҡтары өсөн, СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 23 февралдәге Указына ярашлы, Ленин ордены һәм "Алтын Йондоҙ" миҙалы менән бергә "Советтар Союзы Геройы" исеменә лайыҡ була.

Һуғыштың һуңғы этабында күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн икенсе тапҡыр "Советтар Союзы Геройы" исеменә лайыҡ була. Мәскәүҙә 1945 йылдың 24 июнендә үткәрелгән Еңеү Парадында ҡатнаша.

1951 йылда Мәскәүҙә М. В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияны тамамлай.

1951-1957 йылдарҙа 4-се махсус тәғәйенләнештәге авиацияның полк командиры вазифаһын үтәй. 1959 йылда СССР Ҡораллы Көстәре Генераль штабының Хәрби академияһын тамамлай. 1959-1964 йылдарҙа 2-се махсус тәғәйенләнештәге авиация дивизияһы командиры урынбаҫары булып хеҙмәт итә.1965-1977 йылдарҙа ДОСААФ-тың Башҡортостан өлкә комитеты рәйесе вазифаһын үтәй. Башҡортостанда спорттың хәрби-техник төрҙәрен үҫтереүгә ҙур өлөш индерә.

СССР Юғары Советының 2-4-се саҡырылыш, Башҡорт АССР-ы Юғары Советының 7-9-сы саҡырылыш депутаты. Бөйөк Ватан һуғышы тураһында бер нисә китап авторы.

1987 йылдың 17 сентябрендә Өфөлә вафат була. Баш ҡаланың Еңеү паркында ерләнә.

**Наградалары:** ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, ике "Алтын Йондоҙ" миҙалы, Ленин ордены, өс Ҡыҙыл Байраҡ ордены, III дәрәжә Богдан Хмельницкий ордены, Александр Невский ордены, ике I дәрәжә Ватан һуғышы ордены, өс Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены, күп һанлы миҙалдар.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала советы депутаттары Ленин районындағы яңы урамға күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы һәм публицист Рамазан Өмөтбаевтың исемен бирҙе. Яңы урам "Затон-Көнсығыш" торлаҡ районында урынлашҡан һәм Шмидт, Әхмәтов урамдары, "Өфө-Затон" автомобиль юлы, Ағиҙел йылғаһы менән сикләнгән. Уның оҙонлоғо 0,7 километр тәшкил итә. Рамазан Өмөтбаев 1924 йылдың 7 апрелендә Башҡорт АССР-ның Әлмөхәмәт ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан.

✓Баш ҡаланың Совет майҙанында Бөйөк Еңеү байрамы айҡанлы 6, 7, 9 майҙа байтаҡ саралар планлаштырылған. Шуға ла был майҙанда ваҡытлыса транспорт хәрәкәте сикләнергә йә туктатылырға мөмкин, тип хәбәр итәләр Өфө ҡала округы хакимиәтенән һәм халыҡты үҙҙәренең маршрутын алдан билдәләүҙе һорайҙар.

✓Быйыл Берҙәм дәүләт имтихандары 23 майҙа тарих, әҙәбиәт һәм химия буйынса һынауҙарҙан башлана. БДИ-ның тамамланыу көнө - 23 июнь. Был хаҡта Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов төбәк мәғариф министрҙарының Бөтә Рәсәй кәңәшмәһендә белдерҙе. Шулай уҡ ул илдең бөтә мәктәптәрендә "Һуңғы ҡыңғырау" - 24 майҙа, ә сығарылыш тантаналары 28 июнда үтә, тип аныҡлыҡ индерҙе.

✓"Ay Yola" этно-төркөмө үҙенең беренсе альбомын йәй башында сығарырға әҙерләнә. Был хаҡта музыкант Ринат Рамазанов Республикаға идара итеү үҙәгендә биргән интервьюһында һөйләне. Релиз 12 тректан тора, уларҙың геройҙары - башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы персонаждары Аҡбуҙат, Шүлгән, Ҡатил батшаның үгеҙе һәм башҡалар. "Был төрлө жанрлы эш, тәрән мәғәнәгә эйә, бында яҡшылыҡ менән яуызлыҡ көрәше тураһында һүҙ бара. Йәйгә тиклем тағы 2-3 сингл сығарабыҙ", - тине ул.

✓30 апрелдән 2 майға саҡлы Мәскәү өлкәһенең Одинцово ҡалаһында СССР-ҙың атҡаҙанған тренеры Владимир Гургенидзе иҫтәлегенә спорт аэробикаһы буйынса халыҡ-ара ярыштар уҙғарылды. Миҙалдар өсөн көрәштә ете илдән 400-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты. Беҙҙең республиканан был ярышта Октябрьский ҡалаһынан Александр Дергунов исемендәге Спорт акробатикаһы федерацияһы тәрбиәселәре булды һәм алтын миҙал алып ҡайтты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Урман күгәрсене**

**(Клинтух)**



Йорт күгәрсененә оҡшаған, ваҡыраҡ. Төҫө шундай уҡ, бары тик билендә аҡ табы юҡ.

Ҡатнаш һәм япраҡлы урманда йәшәй. 2 йомортҡа һала, инә ҡош төнөн, ата ҡош ҡайһы берҙә көндөҙ баҫа. Инкубация осоро - 15-17 көн. Ояһын кеше күҙенә күренмәгән ерҙә ҡорорға тырыша. 5 аҙна буйына бәпкәләрҙе ояла ашаталар, бынан һуң улар ботаҡтар буйлап йөрөй башлай.

Урал алдында йорт күгәрсененә ҡарағанда аҙыраҡ, Бәләбәй ҡалҡыулығында, Кама йылғаһына Ағиҙелдең ҡойған тамағында һәм Өфө платоһында ғына уларҙың һаны күберәк. Көньяҡ Уралдың урманлы зонаһында ғәҙәти ҡош, таулы-һаҙлыҡлы ерҙәрҙә осрағаны булманы. 1967 йылдың 21 майында Учалы районының Аҡкүл тирәһендә баҫыуҙа 6-8 урман күгәрсенән торған төркөмдө күҙәткәйнек. Икенсе көнөнә Яйыҡ йылғаһы тамағында 30-лап урман күгәрсене осраны. Шулай уҡ Дүртөйлө районында Тиҙ Танып һәм Ағиҙел йылғалары араһында ла 1990 йылдарға тиклем урман күгәрсендәрен күрергә мөмкин ине. Ырымбур өлкәһендә оя ҡора.

Урман күгәрсене төрлө орлоҡтар, башлыса ҡуҙаҡлылар менән туҡлана, баҫыуҙан иген йыйып ашауҙы өҫтөнөрәк һанай. Үҫемлектәрҙең вегетатив өлөштәрен - сәскәләрен, йәш үҫентеләрен дә ярата. Емешеләкте лә соҡой.

Йәй аҙағында тупланып йәшәй башлайҙар, сентябрҙә йылы яҡтарға юлланалар. Дала яғында көн иткән урман күгәрсендәре октябрь аҙағына тиклем осоп китеп бөтә. Туптар ҙур, йөҙәрләгән ҡоштан тора. Беҙҙең төбәктең урман күгәрсендәре әллә ни йыраҡ китмәй, Кавказ аръяғында, Яҡын Көнсығышта ҡышлай тип фаразлайбыҙ.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ОБЕЛИСК ҺАҠЛАЙ ХӘТИРӘ*

**Белорет районы Йөйәк ауылында Бөйөк Ватан һуғышында баш һалған һәм яу ҡырынан иҫән ҡайтҡан яугирҙарҙың исемдәрен мәңгеләштергән ике обелиск бар. Мәктәп алдына ҡуйылғаны үткән быуаттың һикһәненсе йылдары башында төҙәлдө. Миңә, ниңәлер, нәҡ шуныһы ҡәҙерлерәк. Мәктәпкә уҡытырға килгән йылда ойошторған тәүге эшем булғанғалыр, бәлки.**

# ҮЛГӘНДӘР ӨСӨН ТҮГЕЛ,

## тереләр өсөн кәрәк

Был эш менән бергә эҙләнеүҙәр ҙә алып барҙыҡ һәм уны әле лә дауам итәм. "Йөйәк ауылы Бөйөк Ватан һуғышында" исемле китабым өсөн документтар бик ентекләп тупланды. Һуғышта һәләк булған, яраларҙан үлгән, хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегенә утыҙ яугир инде. Еңеү менән ҡайтҡандар - ҡырҡ биш кеше. Уларҙың һаны һуғыштан һуң ауылға килеп төйәкләнгәндәр иҫәбенә лә артҡан. Барыһы ла беҙҙең ауылдаштар, улар хәҙер ауылыбыҙ зыяратында мәңгелек йортон тапҡан. Улар араһында ошо мәктәпкә әсәйем менән бергә уҡытырға килгән яугир атайым да бар.

Ә тылда Бөйөк Еңеүҙе яҡынайтыусылар исемлеге тағы ла ҙурыраҡ. Яңы документтар табыла тора, ул да киңәйә бара. Әле китабымдың электрон версияһын тулыландырыу өҫтөндә эшләүҙе дауам итәм.

Яңы белем усағы һалынғас, обелискты ете айырым-айырым биналарҙа урынлашҡан иҫке мәктәп биләмәһенән бик ҡәҙерләп яңы урынға күсереп ултырттыҡ. Әле лә күркәмлеген юғалтмай ул, уҡыусылар матур итеп тәрбиәләп тора. Республикала билдәле мәктәбебеҙ музейы менән бергә Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары исемдәрен мәңгеләштергән обелиск йәш быуынды тәрбиәләүҙә ғәйәт ҙур роль уйнай.

Ауылдаштарымдың һәр береһе тураһында күп һөйләргә булыр ине. Һәләк булғандарҙың исемлеген Ғоморҙаҡ Әбәйҙуллиндан башланым. Хәбәрһеҙ юғалған иҫәпләнде, хәҙер уның алыҫ Саксония ерендә әсирлектә һәләк булыуын белә алдыҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәбәрһеҙ юғалғандарҙың араһында әле лә яҙмышы асыҡланып бөтмәгәндәр бар.

Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ орденына тәҡдим ителгән сержант Хашим Минһажетдинов яраларҙан һәләк була. Украинаның Сумы өлкәһендә ерләнгән. Әлеге көндә ул ерҙәрҙә ҡаты һуғыш бара. "Хашим" китабын яҙған саҡта асыҡлауымса, Хашим Минһажетдиновтың полкы ла тап әле шул өлкәлә барған һуғыштарға бәйле аталған ерҙәрҙә алышҡан. Илле ике дошман һалдатын һәм офицерын юҡ иткән, ротаһын атакаға күтәреп, иң беренсе булып дошман траншеяларына бәреп инеп, еңеүҙе тәьмин иткән ҡурҡыу белмәҫ снайпер-парторг булып күҙ алдыма баҫа ул.

Әсәһе Сәрбиямалға, Солтанов Миһран һуғыштың тәүге йылында хәбәрһеҙ юғалды, тигән ҡағыҙ килә. Әммә ул тере ҡала һәм фронтта хеҙмәтен дауам итә, взвод командиры өлкән сержант Миһран Солтанов, ҙур батырлыҡ күрһәтеп, ҡырҡ дүрттең авгусында һәләк була. Оҙаҡ йылдар үткәс кенә наградаһы туғандарын тапты.

Былар - яуҙарҙа башын һалған утыҙ яугирҙың икәүһе генә...

Еңеп ҡайтҡандарҙы иҫләйем... Барыһы ла тере килеш күҙ алдымда торалар. Ул быуын кешеләре үҙҙәре тураһында бик һөйләп барманы шул. Әле ҡоро документ юлдарынан ҡаһарман ауылдаштарым тураһында мәғлүмәттәр барлайым.




Бына II һәм III дәрәжә Дан ордендары кавалеры, батыр артиллерист, орудие командиры Хатип Әйүпов, мәргән атып, һөжүм итеүсе дошман пехотаһын икегә бүлә, паника тыуҙыра, ҡырҡ ике гитлерсыны юҡ итә. Икенсе юлы, һөжүм итеүсе дошмандың юлында орудияһын бик оҫта маскировкалап, ҡапыл ҡаты ут аса, илленән ашыу дошманды юҡ итә һәм был алыш та еңеү менән тамамлана.

Ана, Сәхәүетдин Вәлиев орудияһы менән танк һәм бронетранспортер яндыра. Ҡойма ут яуыны аҫтында Заһретдин Сәғәҙәтов бер алышта ғына ете урында өҙөлгән телефон сымдарын ялғай, ике көндән һуң - тағы туғыҙ урында... Мәхмүт Әбсәләмов яралыларҙы һуғыш яланынан сығара, кирегә алғы һыҙыҡҡа снаряд тейәп алып китә. Снаряд складына ут тоҡанғас, ылаусы яугир бер нәмә лә уйлап тормай, уны һүндерергә ташлана. Ярҙам килеп еткәнсе янғындың таралыуына юл ҡуймай. Хөсәйен Сәйғәфәров, ҡырҡ ете яралыны яу яланынан алып сығып, санчасткә иҫән көйө килтереп еткерә. Батыр командирҙар Кинйәғол Ғәйнетдинов менән Тәлғәт Ғүмәровтар взводтарын атакаға күтәрә, Мораҙым Әбдрахманов ут аҫтында дошман ҡулында ҡалдырырға мәжбүр булған орудияның йоҙағын һүтеп ала һәм үҙе менән алып сыға... Был мәғлүмәттәр теркәлгән документтар ҡалын бер папкаға тупланған. Унда - арыҫлан йөрәкле ауылдаштарым батырлығы! Мәңгелек дан һеҙҙең барығыҙға ла!

Бөйөк Ватан һуғышының һәр һалдаты - батырҙарса һәләк булғанымы, хәбәрһеҙ юғалғанымы, әсирлек ғазаптарын кисергәнеме, батырҙарса һуғышып, күкрәген орден-миҙалдар менән тултырып, еңеү менән ҡайтҡанымы, "Германияны еңгән өсөн" миҙалынан башҡа наградалары булмағанымы - барыһы ла беҙҙең хәтерҙә! Кемдер бәрәү әйтмешләй, һәр һалдат, әгәр ул, окоптан башын ҡалҡытып, бер тапҡыр ғына булһа ла дошман яғына тоҫҡап атырға батырсылыҡ иткән икән, беҙҙең өсөн - батыр!

Әлеге көндә тыл ҡаһармандары тураһында яҙылған әҫәремде тамамланым. Ижадымда - ауылдаштарым, яҡындарым. Ауылымдың бер генә өйөн дә ул һуғыш урап үтмәгән, ялҡыны һәр береһенә ҡағылған. Ауылдарҙа, ҡайҙа барһаң да, Бөйөк Еңеү килтергән яҡындарҙың исемдәрен мәңгеләштереп обелисктар ҡалҡып тора. Улар инде күптән мәңгелек йорттарына ҡайтҡандар өсөн түгел, ә беҙҙең үҙебеҙ, тереләр өсөн кәрәк! Ул һуғышты онотоусолар ниндәй бәләләр килтереүенә әле үҙебеҙ шаһит...

Әйткәндәй, ауылдағы икенсе һәйкәл дә минең өсөн шул тиклем ҡәҙерле. Әсәйемдең тыуған ауылы Ҡолмаста бик матур һәйкәл комплексы ултыртып, ҙур эш ойоштора алыуыбыҙ менән дә сикһеҙ ғорурланам. Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, скульптор Мәүлетбай Хәлилов тарафынан һынландырылған "Хушлашыу" композицияһы шундай дан килеп сыҡты! Был комплекс илебеҙҙең төрлө тарафтарына һибелгән ҡолмастарҙың үҙ аҡсаһына төҙөлөүе менән бигерәк ҡиммәт! Ауыл юҡ, әммә уның урынындағы һәйкәл янынан сәскәләр йылдың бер миҙгелендә лә өҙөлмәй!

**Ринат ШӘЙБӘКОВ.**
**Белорет районы Йөйәк ауылы.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**Һуғыш тураһында кем яҙа? Әлбиттә, яҙыусылар! Элек тә, хәҙер ҙә! Һуғыш темаһына тотонорға нимә мәжбүр итте һеҙҙе, тип бөгөнгө заман яҙыусыларына мөрәжәғәт иттек.**

***Рәсүл БАЙГИЛДИН, "Миҙалһыҙ һалдат" повесы авторы:*** Бөйөк Ватан һуғышында Йылайыр районы Матрай ауылынан Байгилдиндар араһынан минең дүрт олатайым ҡатнаша. Тик бәрәүһенә, Илһам олатайыма ғына, иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға яҙа. Ә әсәйем яғынан ҡартатайым, Йылайыр районы Юлдыбай ауылының Хисмәт Моталлапов, һуғыштың башынан алып аҙағына тиклем фронтта була.

Интернетта "Мемориал" (www.obd-memorial.ru), "Память народа" (www.pamyat-naroda.ru) кеүек дөйөмләштерелгән архив материалдары банкы сайттары килеп сыҡҡас, туғандарым тураһында документтар эҙләй башланым.

Нуриәхмәт олатайым, атайымдың бер туған ағаһы, 1925 йылда донъяға килгән. Һуғышҡа 1943 йылда алына, пулеметсы була. Украинаның Сумы өлкәһе Конотопск районы үҙәге өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа 1943 йылдың 9 сентябрендә һәләк була. Атап үтелгән райондың Шевченко утарында ерләнгән.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1851 - 1857 йылдарҙа икенсе тапҡыр губернатор булған)**

Ырымбур граф Перовскийға һыу үткәргес төҙөй башлау өсөн рәхмәтле булырға тейеш. Был эштәр 30-сы йылдарҙа, уның төбәк менән тәүге идаралағы ваҡытында башлана. Инглиз механигы саҡырып килтерелә, унын ярҙамсылары итеп С.-Петербургта уҡып ҡайтҡан ике йәш кенә форштадт казагы тәғәйенләнә. Һыу үткәргес алыҫ булмаған арауыҡҡа тиклем төҙөлә. Перовский аҡсаны унын ҡарамағында булған хужалыҡ суммаларынан ала; ағас шулай уҡ ҡаҙна запастарынан алына. Генерал Обручев тәғәйенләнгәс, һыу үткәргес ташландыҡ хәлендә ҡала. Ҙур түләүгә эшләгән механик эшенән ебәрелә; ике казак уны тейешле кимәлдә ҡарап тота алмай. Төбәк менән яңынан идара итергә килгәс, граф Перовский һыу үткәргесте тергеҙә һәм фонтан яһата, унан өҫкә бөркөтөлгән һыу йәйге эҫе көндәрҙә һауаны еләҫләндерә. Бассейндағы һыу менән барса ҡала кешеләре бушлай файҙалана. Һыу үткәргес генерал губернатор Катенин ваҡытында шул көйөнсә ҡала, ә уны алыштырған генерал Безак һыу үткәргесте киңәйтә; һыу казак форштадына үткәрелә, бынын өсөн станица 7 мең һум аҡса түләй, ҡаланың төрлө урындарында һыу ала торған будкалар ҡуйыла. Һуңынан Безак ошо эштәрҙе башҡарған саҡтағы сығымдарҙы ҡала суммаларынан ҡаплатыуҙы талап итә, ә ҡала кешеләргә һыу менән файҙаланған өсөн ҙур булмаған түләү индерә.

Граф Перовский ҡалала баҡсалар булдырыуға ла башланғыс һала. Иң тәүге баҡса Ҡаруанһарайҙа ултыртыла, унда хәрби хеҙмәт урынына баҡса үҫтерергә мәжбүри рәүештә йәлеп ителгән башҡорттар эшләй. Баҡсаға 1852 йылда нигеҙ һалына. Ағастар иң яҡын урынлашҡан башҡорт биләмәләренән, әммә 100 саҡрымдан йырағыраҡ ерҙәрҙән, ылыҫлы ағастар Стәрләмаҡ өйәҙенән килтерелә. Ағастар тәжрибәле баҡсасы Лебедев күҙәтеүе аҫтында ултыртыла, ул үҙе крепостной кеше була, уны азат итеү өсөн помещик 1500 һум аҡса талап итә; был аҡса Лебедевҡа башҡорт суммаларынан үтескә рәүешендә бирелә.

Ағастар тиҙ генә ерегеп китә алмай, бик күбе ҡорой; улар урынына яңылары ултыртыла. Бынын сәбәбе һыу етмәүендә, уны бер саҡырым ярымдағы Архиерей күленән шул уҡ башҡорттар мискәләр менән ташый. Баҡса ултыртылған ер, Ҡаруанһарай төҙөлөшөнән ҡалған ҡалын сүп ҡатламы менән ҡапланғанлыҡтан, ағас үҫтереү өсөн ҡулайһыҙ була.

Ошондай насар шарттарҙа ла баҡса матур итеп тотола, сәскә клумбалары булдырыла.

Баҡсаға инеп йөрөү бары тик таҙа тип иҫәпләнгән публикаға рөхсәт ителә, кәрәк булған барса урындарҙа башҡорт һағауылдары тора.

Ҙурая барған баҡсала ағастарға һыу һибеү ауырға төшә, бигерәк тә башҡорт нарядтары бөтөрөлгәс хәл ҡыйынлаша. Баҡсаны тәртиптә тотоу өсөн ҡаҙнанан билдәле бер сумма бүлергә тура килә. 70-се йылдарҙа ҡала һыу үткәргестән һыуҙы бушлай бирергә риза була; торбалар һалына һәм һыу һибеү дөрөҫ башҡарыла; баҡса ныҡ итеп үҫеп китә һәм матурая. Публика баҡсала ял итергә ярата, әммә бында, кухнялы вокзал төҙөргә, хәмерле эсемлектәр һатырға рөхсәт бирелгәс, баҡсаға теләһә ниндәй публика йөрөй башлай һәм тәртипһеҙлектәр башлана.

Һис шикһеҙ, файҙалы, әммә ул саҡтағы Ырымбур өсөн ваҡытһыҙ булған башланғыстар иҫәбендә граф Перовскийҙың ҡарары менән төҙөлгән ике тирмәнде күрһәтергә була. Уларҙың береһе Банный ҡылымығының һул ярында, Поп ауҡалығында, ҡылымыҡтын, ә ул саҡта күлдең Урал йылғаһынан ағып сыҡҡан тапҡырында урынлашҡан. Бинаһы кирбестән төҙөлә, пар менән эшләүсе тирмән бойҙайҙы сифатлы он (крупчатка), кәрәк булғанда ҡәҙимге ябай он рәүешендә тарттырыу мөмкинлеген бирергә тейеш була. Ҡала кешеләрен Ырымбурҙан алыҫта урынлашҡан һыу тирмәндәренә йөрөүҙән ҡотолдороу күҙ уңында тотола. Төҙөлөш өсөн аҡса урман суммаларынан алына, кирбес һәм эзбизде башҡорттар әҙерләй, ағас ҡаҙна хужалығы өсөн әҙерләнгәндән бирелә.

Тирмән йүнләп эшләй алмай. Сифатлы он тарттырыу өсөн даими ашлыҡ запасы талап ителһә, етештерелгән ондо һатып алыусылар етерлек булырға тейеш: бындай онға бер ҡалала ғына ихтыяж аҙ була, сөнки ул ябай бойҙай онона ҡарағанда күпкә ҡиммәтерәк була. Бойҙай онон тарттырғанда тирмәнгә бер генә һалғанда ла байтаҡ ҡына ашлыҡ талап ителә, ә ашлыҡ хужалары тирмәнгә үҙҙәренә кәрәк булғанда ғына йөрөй.

Сауҙәгәр Федор Горячев, Перовскийға ярарға теләп, тирмәнде бик аҙ ғына хаҡҡа ҡуртымға ала, әммә уны бер йылдан ары тотмай. Тирмән әллә яҙ көнө Урал йылғаһы ташҡан саҡта емерелгән, әллә уны һүтеп алып ҡына киткәндәр. Горячев помещик Хоменконан ябай һыу тирмәнен ҡуртымға ала, уны сифатлы он тарттырыу өсөн көйләп, яҡшы килем ала башлай, ә хужаға ҡуртым өсөн 4000 һум ассигнация (1115 һум көмөш аҡса) түләй.

Ер эшкәртеү һәм урмансылыҡ училищеһына ҡаршы (хәҙер бында ғәскәри казак арсеналы) урынлашҡан ағастан һалынған икенсе тирмән казак аҙыҡ-түлек капиталы иҫәбенә төҙөлә һәм ат көсө менән эшләргә тейеш була. Перовскийҙың тәүге идаралығы осоронда ул бер аҙ эшләгән, әммә уны эшләтеүгә тотонолған сығымдарҙы ҡаплай алмаған. Генерал Обручев ваҡытында унын эше туҡталып тора. Бина буш тора йә иһә ғәскәри начальствоның ҡушыуы буйынса икенсе бер маҡсаттарҙа файҙаланыла. Граф Перовский икенсе тапҡыр килгәс, был тирмән яңынан эшләй башлай; Нижегород губернаһынан килтерелгән оҫта, крәҫтиән-тирмәнсе тирмәндән ҙур килем алып буласағына ышандыра. Тирмәнде төҙөкләндереү өсөн аҡса бүленә, оҫтаға йылына 350 һум көмөш аҡса менән түләү ҡарала, тарттырыр өсөн байтаҡ ҡына бойҙай һатып алына. Тирмән эшләй башлай, әммә вәғәҙә ителгән килем урынына зыян ғына күрелә, сөнки ондоң сифаты үтә насар була. Тирмәнсе ҡасып китә, тирмән эше буйынса хакимиәттә вазифаларын үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыусылар ҙа табыла, һәм был тирмән дә ташлана.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

Илһам олатайым да 1925 йылғы ине. Ул - Зыяетдин олатайымдың улы. Фронтҡа 1943 йылдың февраль айында китә. Танк бригадаһы идара ротаһында радиотелеграфсы булып хеҙмәт итә. Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм "Хәрби хеҙмәте өсөн" миҙалы менән наградлана. Һуғыштан һуң Мәскәүҙә йәшәй, шунда донъя ҡуя.

"Память народа" сайтынан тик Иматмедин олатайым тураһында ғына бер ни белә алманым. Ул да атайымдың бер туған ағаһы, 1921 йылғы була. 1941 йылдың 26 июлендә яраланыуы тураһында мәғлүмәт табылды. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Иң тетрәндергәне Зыяетдин олатайым яҙмышы ине. Байгилдин Зыяетдин Зариф улы 1902 йылда тыуған. Матрай мәктәбенең директоры була. Тәүҙә уҡытыусыларға бронь бирәләр, фронтҡа алмайҙар. Шуға һуғышҡа 1942 йылдың 20 майында ғына китә. Шул уҡ йылдың 7 июлендә Воронеж өлкәһенең Кантимировка ҡасабаһы эргәһендә немецтарға әсир төшә. 1944 йылдың 18 апрелендә Германияла Фореллькруг/ Зенне (хәҙерге Төньяҡ Рейн-Вестфалия ере, Шлосс-Хольте-Штукенброк ҡалаһы) концентрацион лагерында вафат була. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, ҡәбере лә бар: 30-сы рәт, 1984-се ҡәбер. Исемлектә 13210-сы булып теркәлгән. Ошо мәғлүмәттәрҙән тыш, ғаилә хәле, атаәсәһе, йәшәгән урыны тураһында рус һәм немец телдәрендә яҙылған концлагер формулярын күреү күңелдә тәрән эҙ ҡалдырҙы. Һуғыш еле үҙе килеп ҡағылғандай булды шул мәлдә. "Миҙалһыҙ һалдат" повесына тотоноу өсөн этәргес булды ул. Әҫәрҙең төп геройы Хисмәт ҡартатайым. Ул Зыяетдин олатайым менән һуғыш яланында осраша. Яуға киткән барлыҡ яҡындарымды ла күрһәтер өсөн сюжетты шулай ҡорҙом.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

### Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

XVII - XVIII быуаттарҙа "аймаҡ" һәм "түбә" терминдары ҙур ырыу йәки олоҫ эсендә ғаилә-ырыу һәм территориаль берәмектәрҙе билдәләү өсөн күп тапҡырҙар ҡулланыла. "Аймаҡ" - монгол осоронда ҡулланылышҡа инә һәм туғанлыҡта булған бер нисә ғаиләнең берлеген аңлата; "түбә" - территорияны аңлата, ғәҙәттә, ул ниндәйҙер аймаҡҡа ҡараған көтөүлек территорияһын күрһәтә. Боронғо ырыуҙар аймаҡтарға тарҡалғанда, һуңғылары ваҡыт үтеү менән үҙ аллы ырыуға йәки олоҫҡа әүерелә һәм артабан халыҡтың үҫеше һөҙөмтәһендә айырым олоҫтарҙың халыҡ составы ла үҙгәрә.

"Яңы башҡорттар" тип аталған ҡатлам барлыҡҡа килеү менән Башҡортостан халҡының составы һиҙелерлек үҙгәрә. Рус властары, башҡорттарҙың ерҙәренә припущенниктар килеп ултырғас, башҡорттарҙың айырымланыуын булдырмау өсөн кантондарға бүлгәндә (1798 йыл), уларҙың бишәүһенә мишәрҙәрҙе, ә ҡайһы бер төньяҡ-көнбайыш кантондарға типтәрҙәрҙе индерә. 1863 йылда донъя күргән "Башҡорттар тураһындағы положение" шулай уҡ типтәрҙәргә, мишәрҙәргә һәм ниндәйҙер кимәлдә татарҙарға ла ҡағыла. Шул сәбәпле, бигерәк тә башҡорттарҙың ер милекселәре булараҡ сағыштырмаса өҫтөнлөклө хәле һөҙөмтәһендә, типтәрҙәр ҙә, мишәрҙәр ҙә үҙҙәрен башҡорттар тип атай башлай. Шулай итеп "яңы башҡорттар" барлыҡҡа килә.

Батша хөкүмәтенең сәйәсәте "ирекле" ерҙәрҙе асыҡлау маҡсатында 1898 йылда башҡорт ерҙәрен межаларға бүлеү, башҡорттарҙың дөйөм ҡулланылышында ҡалған, әммә ирекле ерҙәрҙе асыҡлауға йүнәлдерелә. Был ирекле ерҙәр община тарафынан һатыла ла алған. Межалау ваҡытында властар айырым ырыуҙарға йәки уларҙың бүлексәләренә төрлө йылдарҙа бирелгән грамоталар нигеҙендә аҫабалыҡ хоҡуғын тикшергән һәм был ерҙәр айырым башҡорт дайсалары (дача) итеп билдәләнгән. Шул уҡ ваҡытта башҡорт ерҙәренә килеп ултырған припущенниктар өсөн дә ерҙәр бүленгән.

Тикшереү барышында шул да асыҡлана: бөтөн ерҙәрҙә лә башҡорттарҙыҡы булып иҫәпләнгән башҡорт дайсалары уларҙың милке булмай сыға. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ергә аҫабалыҡ хоҡуғы хөкүмәт тарафынан хөкүмәткә башҡорт ихтилалдарына ҡаршы көрәштә айырым хеҙмәт күрһәткән мишәрҙәргә бирелә һәм рәсми документтарҙа милекселәр аҫаба башҡорттар тип һанала башлай. Икенсе яҡтан, грамоталарынан ҡолаҡ ҡаҡҡан төп башҡорттар ергә булған аҫабалыҡ хоҡуғын юғалта һәм припущенник тип иҫәпләнә. Шундай осраҡтар ҙа күҙәтелә: ҡайһы бер алыҫ башҡорт дайсаһының төп башҡорттары икенсе дайса башҡорттары араһында йәшәгәндә припущенниктар хоҡуғында була.

**(Дауамы бар).**

***✓ Бер аҙҙан, иренең властар алдында бер ниндәй ғәйебе юҡлығын иҫбат итергә маташҡан әсәһен дә, башҡаларға үрнәк булһын өсөнмөлөр, өс көнгә Баймаҡ изоляторына ябып ҡуйҙылар.***

# ҺУҢҒЫ

Һикһәндең туғыҙын ҡыуып барған Усман бабай, мөйөштәге карауатында ятҡан урынынан тормай ғына, хәләл ефетенә өндәште: "Әбей, теге беҙҙең атай мәрхүмдәрҙең аҡланғаны хаҡында яҙылған гәзитте алып бирсе". Гәзиттең һарғайып бөткән әллә ҡасанғы был һанын күҙ ҡараһындай һаҡлап тота, ифрат та ҡәҙерлегә әйләнгән яҙманы әленән-әле алып уҡый ул. Әллә нисә тиҫтә йылдар үткәс кенә аҡланған золом ҡорбандарының алфавит буйынса төҙөлгән исемлегенән атаһының исем-шәрифен тағы бер мәртәбә ҡарап алыуын әллә ни күрә. Йөҙәрләгән фамилиялар араһынан оҙаҡ та эҙләмәй ул атаһын, сөнки Абдулов тигән фамилия унда иң тәүгеләрҙән тора. Нахаҡҡа хөкөм ителгән кешеләрҙең ғүмерен хайуандыҡы ҡәҙәре лә күрмәгән утыҙынсы йылдарҙағы төрмә "һөнәрселәре" уларҙы ла ана шулай алфавит тәртибендә яҙылған исемдәре буйынса сиратлап саҡыртып атҡандарҙыр, бәлки... Үҙен бына-бына ҡулға алырҙарын һиҙеп йөрөгән, балаларына "кулак Абдулов"тың фамилияһын ғүмер буйы йөрөтөүе ифрат та ауыр булырын күҙаллаған атаһы уларҙың барыһын да "Арыҫланов"ҡа төҙәттереүе генә лә шул замандың асылын ниндәйҙер кимәлдә һөйләй һымаҡ...

* * *

– Совет мәктәбе тик ярлы-ябағай өсөн. Кулак балаһына бында урын юҡ! - тине уҡытыусы башҡа балалар менән бергә беренсе синыфҡа уҡырға килгән Усманға. - Һине уҡырға алып, үҙемдең башымды төрмәлә серетәһем юҡ. Бар, ҡайт, өйөңә!

Был һүҙҙәргә ҡыйырһыған кескәй Усман һыңҡып илай-илай, өйөнә ҡайтып китте. Артында башҡа балаларҙың "кулак балаһы, кулак балаһы", тигән эләкләүҙәре ишетелде. Ихаталағы өй урынына ҡалған кескәй аласыҡҡа инеп, әсәһенең алдына башын ҡуйҙы ла, "Мине мәктәпкә алмайҙа-а-ар", тип тағы ла ҡысҡырыбыраҡ илай башланы... Өйҙәрен, атай йортон, яҙ уҡ тартып алғайнылар. Әсәһе, туғандары менән Усман ошо тар аласыҡ эсендә тороп ҡалды. Алты мөйөшлө өй, һарай, ул ғына ла түгел, өйҙәге барлыҡ ҡаралты-маҙар, иген, һауыт-һаба, бөтә булған кейем-һалымдарына тиклем ҡырып-һеперепп тигәндәй алып киткәйнеләр. Оло ағаһы Әҙһәмгә тип әҙерләгән өйлөк бураны ла боҙоп, ике йөк аты егелгән оло арбаға тейәп, ҡайҙалыр ташып бөттөләр.

Кейем-һалым араһында киткән "ғаилә көмөшө"н ылаусыларға бирмәҫкә тырышып, ун биш йәшлек Кинйәбикә апаһы епкә теҙелгән тәңкәләренә үҙенең сибек һулдары менән йәбешкән килеш бер талай улар артынан "һөйрәлеп" бара бирҙе, тик еп өҙөлөп, көмөш ергә сәселде. "Экспроприаторҙар" ҡыҙҙы тупаҫ рәүештә ситкә этеп ебәреп, тәңкәләрҙе йыйырға тотондо...

Ә атаһы унан да иртәрәк "ҡулға алынды". Март урталары булғандар, мылтыҡлы кешеләр килеп, ауылдан тағы бер-ике кешене Баймаҡҡа алып киттеләр. "Минең атайым ямаҡ түгел, минең атайым - яҡшы!.. Теймәгеҙ атайыма!.." - тип мылтыҡ тотҡан ағайҙың салбарына йәбеште Усман. "Ярай, улым, илама, тиҙҙән ҡайтырмын. Әсәңде, ағайҙарыңды тыңлап йөрө, йәме", - тип йылмайған булды күҙҙәре йәшләнгән атаһы. Усмандан олораҡ булған Исмәғил, Әнүәр ағалары, әлбиттә, ҡоралды кешеләргә ҡаршы һүҙ әйтергә ярамағанлыҡты аңлағандарҙыр. Улары бер ни ҙә өндәшмәне. Биш йәшлек Зиннурҙы етәкләп, әле ике айы ла тулмаған Ынйыбикәне күтәргән әсәһе өнһөҙ генә илап тороп ҡалды...

Эргәләрендә барыһын да күреп торған кешеләр нишләп уның атаһын ҡурсалашып алып ҡалмайҙар икән, тип аптыраны Усман. Ана, йыш ҡына уларға инеп, эскесе иренә зарлана-зарлана үҙенең балаларына бер-ике һыныҡ булһа ла икмәк һорап алып йөрөгән апай ҙа өндәшмәй тик торасы... Уның һәр саҡ иҫерек ире хатта мыҫҡыллы йылмайып ҡуйҙы. Балаларына һөт өсөн әлеге апайға бер һауын кәзәһен дә йәлләмәй биргәйне бит атаһы былтыр. Тик уның ата ялҡау ире ҡайҙалыр алып барып, кәзәне һатып эскән, тинеләр... Башҡа ауылдаштарына аҙ ярҙам иттеме уның ата-әсәһе? Хәйер, бер уның атаһын ғына алманылар бит инде. Хәллерәк тип һаналған байтаҡ ҡына өйҙәрҙән оҙаттылар "халыҡ дошмандарын"...

Ҡоралды һалдаттың һәр төрлө әрләшеүҙәренә лә ҡарамай, атаһын алып киткән конвойлы ылау артынан Сарҙаҡ тауын артылғансы эйәреп барҙы кескәй Усман. Яңы төҙөлә башлаған колхоз малдарын ҡарау эшенән бушана алмаған Әҙһәм ағаһы, сит ауылда тормошта булған Шәһиҙә апалары атаһы менән хушлаша ла алманы. Ошо китеүҙән аталары башҡаса ҡайтманы. Ул заман өсөн әҙәм балаһының ҡулға алынып та кире әйләнеп ҡайтмауы ғәҙәти хәл ине шул. Шуның өсөн дә, һис бер ғәйепһеҙ булыуҙарына ҡарамаҫтан, барыһы ла яҡындары менән бәхилләшеп китә ине.

Бер аҙҙан, иренең властар алдында бер ниндәй ғәйебе юҡлығын иҫбат итергә маташҡан әсәһен дә, башҡаларға үрнәк булһын өсөнмөлөр, өс көнгә Баймаҡ изоляторына ябып ҡуйҙылар. Шул арала әсәнән айырылған ике айлыҡ Ынйыбикә аслыҡтан, алһыҙ-ялһыҙ илауҙан, донъянан китте...

Аталарын "халыҡ дошманы" тип атауҙарына ҡайғы аша ғәжәпләнеү тойғоһо ла кисерҙе малай. Былтыр ғына ике-өс тиҫтәләгән йылҡыһының да бер бөртөгөн ҡалдырмайынса бирҙе бит атаһы калхузға. Барлыҡ һыйырҙарын, һарыҡтарын да биреп бөттөләр. Үҙенең бала уйы менән "колхоз" тигән нәмәне, баштараҡ, ғәйәт ҙур бер кеше һымаҡ итеп күҙ алдына килтерә ине бәләкәс Усман. Шуныса малын, хатта өйөн биргән кешене ни өсөн тағы ла "халыҡ дошманы" тип һанайҙар икән? Етмәһә, атаһына "кулак" тигән яман бер исем дә таҡтылар бит әле. Атайҙары кулак булғас, Усман да, уның туғандары барыһы ла "кулак балаһы" булып китте. "Кулак" тигән төшөнсәне лә бөтөнләйгә килбәтһеҙ, имәнесле бер кеше һымаҡ итеп күҙ алдына килтергән Усманды балалар урамда шулай тип атай башланы. Иң ҡыйырһығаны ана шуның өсөн дә булғандыр әле уның...

* * *

Матур йәшәгән саҡтарын да хәтерләй Усман. Саҡмағош йылғаһы буйындағы иркен йәйләүҙәрҙә ағалары алмашлап йылҡыларын һәм башҡа эре-ле-ваҡлы малдарын көтә ине уларҙың. Иренмәй, көн-төн тигәндәй үҙҙәре өсөн мал үрсетеп, эшләп туккән тирҙәре, әлбиттә, бушҡа булманы, етеш кенә йәшәнеләр. Ит, май-ҡаймаҡ, ҡатыҡтан өҙөлмәнеләр. Шуға алыштырып, Темәс баҙарынан ҡайһы саҡ башҡа ваҡ-төйәк тә алып килгеләй ине атаһы. Шуның өсөн дә, ҡайһы берәүҙәр ҡытлыҡ кисергәндә, уларҙың өйөндә икмәк тә һәр саҡ бар ине. Әсәһе Хөсниямал бигерәк тә кеше күңелле булды. Өйгә ингән кешене берәй ҡасан буш сығарғанын хәтерләмәй Усман. Йә бер аҙ май, ҡорот, икмәк, йә иһә ҡаҡлаған ит киҫәге тоттороп сығара ине ул ярлы-ябағаға. Ҡорбан байрамында бер-ике баш һарығын һуйып, бар ауылды тиерлек һыйлағандары Усмандың иң күңелле бала саҡ хәтирәләренең береһелер. Тик атаһы ғына тиҙерәк ҡайтһын ине лә, улар яңынан өй төҙөп, мал үрсетеп йәшәй башлаһындар ине. Әммә атаһы һаман ҡайтманы...

Инде егет ҡорона еткән Әнүәр ағаһы күптән түгел төҙөлгән колхозда эшләп, аҙ ғына булһа ла ҡурмаслыҡ иген дә әпкилгеләй ине. Тик көндәрҙән бер көндө ул эшкә киткән еренән өйгә әйләнеп ҡайтманы. Бер-нисә көндән уны ҡырҙа үле килеш таптылар. Үсле кешеләр сираттағы "кулак балаһын" үлтергәнсе туҡмап киткәндәр ине. Уны тикшереүсе лә, үлтереүселәрҙе фашлаусы ла булманы... Яраҡан Әнүәр ағаһы - ғаиләләге өсөнсө ҡорбан...

Ауыл урамынан, юлдан йөрөүҙә тыйылған әсәһенә кескәй Усман менән Зиннурын туйындырып, астан үлтермәү мәсьәләһе торҙо. Ярай әле, Исмәғиле ун биш йәшенә етеп, колхоз малын ҡарай башланы. Ул үҙҙәре йәшәгән аласыҡ өйөнә яғырға сытырмытыр ҙа алып килгеләй. Кулак балаларына ярҙам иткәндәрен белеп ҡалып, үҙҙәренә берәй бәлә-ҡаза булып тороуҙан ҡурҡҡан ауылдаштары араһында шулай ҙа яҡшы кешеләр ҙә табылды. Йә береһе, йә икенсеһе бер аҙ ғына булһа ла ашарға биреп, астан үлмәй генә ҡыш сыҡтылар. Бындай көнгә ҡалған бер улар ғына түгел ине шул. Бөтә ил шундай хәлдә ине бит. Йәй көндәре, әлбиттә, еңелерәк. Ҡырҙа һарна, ҡуян тубығы, ҡаҡы, балтырған, ҡымыҙлыҡ, ҡуҙғалаҡ кеүек ашарға яраҡлы үҫемлектәр күп кенә үҫә. Шулай шаҡтай ыҙалыҡтар менән булһа ла көн күреүен дауам итте улар...

Заманалар ниндәй генә ауыр, ҡатмарлы булыуына ҡарамаҫтан, Ер йөҙөндә яҡшы кешеләр һәр саҡ табыла, күрәһең. Күрше Этҡол ауылы уҡытыусыһы Ғөбәйҙулла ағай үҙенә оло ҡурҡыныс янай тип торманы, "кулак балаһы" булыуына ҡарамаҫтан, инде һигеҙ йәше тулған Усманды беренсе синыфҡа уҡырға алды. "Бәлиғ булмаған баланың бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡ", тине ул был хаҡта үҙенә өндәшкән кешеләргә. Ғөбәй ағай (ауылдаштары уны шулай тиеп кенә йөрөттө), ул саҡта ифрат ҙур, ҡыйыу эш атҡарған, тип әйтергә лә булыр ине. Сөнки, бындай кеше хаҡында кемдер берәү властарға анонимка яҙған хәлдә лә, уның "кулактарға ярҙам күрһәткәне" өсөн башы китеүе бик ихтимал ине бит...

Тормош үҙ яйы менән бара бирҙе. Усман мәктәпкә барған йылды Кинйәбикә апаһына ла бәхет йылмайҙы. Әле ун алты ғына йәш тулыуына ҡарамаҫтан, күрше Байым ауылынан уны егәрле, эшсән бер егет кәләшлеккә һоратты. Апаһы, алай ҙа, ялындырып торманы. "Өлөшөмә тейгән көмөшөм" тип сыҡты ла китте... Колхозда бригадир булып эшләгән ифрат та булдыҡлы Ишмөхәммәт Ғүмәров менән заманына күрә гөрләтеп донъя көтөп алды ла китте Кинйәбикә.

Аслы-туҡлы көйөнсә дүрт-биш саҡырым аралағы күрше ауылға йәйәүләп йөрөп уҡыны Усман. Шуға ҡарамаҫтан, мәктәптә үҙен ифрат та тырыш, һәләтле уҡыусы итеп танытты. Тик етенсе синыфты тамамлаған йәйҙә илгә фашист Германияһы һуғыш башланы. Нисек кенә теләмәһен, әммә Усман артабан уҡыуын дауам итә алманы. Инде ун биш йәше тулған үҫмер башҡа колхозсылар менән берлектә Ҡыҙыл Армиябыҙҙы аҙыҡ, кейем-һалым менән тәьмин итеү эшенә йомолдо. Һуғыштың тәүге көнөнән үк Әҙһәм һәм Исмәғил ағалары һуғышҡа алынды. Оҙаҡламай уларҙың һәләк булыуы хаҡында бер-бер артлы ике "похоронка" килде...

* * *

1943 йыл Усманға ла ун ете йәш тулды, көҙгә ҡарай инде уға "саҡырыу" тотторҙолар.

Октябрь урталары. Көндөҙ һәүетемсә йылы ғына торһа ла, төндә ерҙәге күләүектәр шекәрәләнеп туңа ла башланы. Фронтҡа алынғандар йыйылған көн апаяҙ, ҡояшлы. Этҡол ауыл советы янында байтаҡ ҡына кеше йыйылған. Байым ауылынан бала саҡтан белгән Хөсәйенов Нуритдин ҡорҙаш та бында икән. Бер-нисә ауылдан булған төрлө йәштәрҙәге ун бишләп кеше араһында Тәкәһуҡҡандан гармунсы Рәсүл ағай ҙа бар ине. Уны, һуғыш яраһы төҙәлеп бөткәнсе, тип, ике айға ғына ялға ҡайтарып торғандар. Бер аҙ аҡһаңҡырай. Хәрби кейемдә. Түшендә ике миҙалы ла бар. Уны күргәс, әле мыйыҡ та үҫеп етмәгән егеттәргә бер аҙ дәрт өҫтәлгәндәй булды. Өҫтәүенә, үҙенең тальян гармунын да алған бит әле. Әйтерһең дә, туйға йыйынған...

* * *

Өфө янындағы "Цыганская поляна"ла уҡсылар полкында ҡыҫҡа ваҡыт эсендә хәрби белемгә өйрәнгәндән һуң, ҡырҡ өсөнсө йылдың декабрь баштарында әле ун һигеҙе лә тулмаған Усман фронтҡа оҙатылды. Нуритдин ҡорҙашы ла, нисектер, уның менән бер часҡә, хатта бер взводҡа эләкте. Янында бер котелоктан ашап йөрөгән яҡташың булғас, әлбиттә, күңелгә бер аҙ йылы ла һымаҡ. Улар Белоруссия фронты ғәскәрҙәре составындағы Гвардия мотоуҡсылар бригадаһында автоматсы булып һуғышҡа инде. Көнсығыш Белоруссия ерендә ике ай самаһы оборона һуғышы алып барҙылар. Оҙайлы обороналың ни өсөн икәненә, әлбиттә, һалдаттар барыһы ла төшөндө. Ғәскәр ниндәйҙер ҙур алышҡа көс йыя... Унан - һөжүм итеү, тағы оборона, бер аҙ сигенеү... Тағы һөжүм... Ҡыш, яҙ үтеп, ҡырҡ дүртенсе йылдың йылы йәйе лә килеп етте. Могилев өлкәһендәге Бобруйск ҡалаһы өсөн биш көн, биш төн буйына барған ҡаты һуғышта бик күп иптәштәрен юғалтты Усман. Уның күҙ алдында ярылғыс пуля Хөсәинов Нуретдин ҡорҙаштың уң ҡулын өҙөп алып китте. Уны ашығыс рәүештә медсанбатҡа, унан тылға оҙаттылар. Ҡайһы ҡаланы ниндәй эҙмә-эҙлектә алғандарын да инде әллә ни хәтерләмәй Усман. Ул азат иткән Бобруйск ҡалаһынан тыш, Барановичи, Калинковичи, Гомель, Речица... Ә эреле-ваҡлы ауылдарҙы инде һанап та бөтөрлөк түгел. Фашистар тарафынан бөтөнләйгә яндырылап, тик мейес мөрйәләре генә һерәйеп ултырған тиҫтәләгән ауылдарҙы күрергә тура килде.

Речица ҡалаһы йүнәлешендә барған һуғышты бөгөнгөләй хәтерләй ул. Эйе, бөгөнгөләй, сөнки ошо алышта уның һуғыш юлы ҡырҡа һынылыш кисерҙе. Уларҙың мотоуҡсылар полкы ҡаршыһында ятҡан немецтар, бар көстәрен һалып, кинәт кенә контратакаға күсте һәм Усмандарҙы ҡыҫырыҡлай башланы. Шул мәл, һул ҡулының беләгенә немец пуляһы килеп тейҙе. Ҡул һөйәген һындырып, үтә сығып та китте. Ятҡан килеш яраһын бәйләп бөтөүгә һалдат аңын юғалтты. Бәлки, аңһыҙ килеш оҙаҡ та ятмағандыр. Ул һушына килгәндә, уйһыуыраҡ урында, автоматының өҫтөндә йөҙтүбән ята ине. Яҡында ғына, ун биш-егерме аҙым тирәһендә ҡуйы урман башлана. Тирә-яҡ беҙҙең һәм немец һалдаттары мәйете менән тулған. Был ер ваҡытлыса дошман ҡулында икәненә тиҙ төшөндө Усман. Тәүҙәрәк килгән немецтар уны үлгәнгә һанап, үтеп тә киткәндәрҙер, әммә яҡында ғына ике дәү фриц күренде. Үҙ-ара ниҙер мығырҙап һөйләшә-һөйләшә, совет һалдаттарының мәйеттәрен типкеләп-тикшереп ҡарап китәләр. Автоматтан атып, яралыларҙы үлтереп йөрөйҙәр... Яй ғына баҫып килеүҙәренә ҡарағанда, былары - таҙартыусылар. Усман хәрәкәтһеҙ ҡалды. "Йә Раббым, ошо урында ғынамы минең үлемем... Әсәй..." Ошо минутта ул үлемен ҡаршы алырға әҙер ине. Ҡабырғаһына көслө тибеүҙән, ирекһеҙҙән ыңғырашты. "Хәҙер автомат очереды буласаҡ, һәм ул яҡты донъя менән хушлашасаҡ... Лә иләһә илләллаһ..."

**✓ Финанс министры вазифаһынан хаҡлы ялға сыҡҡан Советтар Союзы Геройы Сөләймәнов Шәриф Сөләймән улы үҙенең һалдатын ҡунаҡҡа саҡырғайны. Кеселекле һәм кешелекле кеше ғүмер буйына шулай булып ҡала икән ул.**

# ВЕТЕРАН



*Отставкалағы гвардия ефрейторы Арыҫланов У. Д. (уртала, хәрби формала), янында хәләл ефете Рәкиә инәй. 2005 йыл Еңеү байрамы көнө.*

Ниндәйҙәр мөғжизә менән, немец атманы. Әллә патронын йәлләне, әллә ни... Тик береһе автомат төйәһе менән уның каска кейгән башына ғәйәт көслө итеп тондорҙо. Ә икенсеһе уң яҡ ҡалаҡ һөйәгенә бар көсөнә һуғыу менән Усман тағы ла һуштан яҙҙы, артабан ни булғанын белмәй. Үлде тип уйлап, фрицтар артабан киткәндәрҙер, моғайын... Күпмелер ятҡандан һуң, аңына килгәс, үҙен ошо мәлдә инде әсирҙәләр, тип уйланы. Һаҡ ҡына күҙҙәрен асып ҡараны. Тегеләр юҡ ине. Аллаһ Тәғәлә, бәлки, әсәһенең көн-төн ҡылған доғаларын ҡабул иткәндер... Ул - тере! Әсирҙә лә түгел! Автоматын ҡулына алды ла, бар көсөн йыйып, әйелә-боҫа яҡындағы урманға йүгерҙе. Партизан отряды булған урманға ҡапылда тығылырға немецтар ҡурҡа икәнен ишетә-белә ине һалдат. Белоруссия урманы ла, Башҡортостандағы һымаҡ, һәр төрлө ашарға яраҡлы үҫемлектәргә бай икән... Ҡымыҙлыҡ, һарна, балтырған кеүек үләндәр, әлбиттә, Усманға бик-бик таныш. Ана шул һәр төрлө үлән менән генә туҡлана-туҡлана, өс көн, өс төн урманда аҙашып йөрөгәндән һуң, тамам хәлдән тайып, бер оло юлға килеп сыҡты. Шешенеп барған яралы ҡулы ла тәкәтһеҙ әрней. Тән температураһы ла күтәрелгән буғай. Теге немец һуҡҡан уң ҡалаҡ һөйәге лә яныҡ ҡына ауырта, моғайын, ярсылғандыр... Кинәт машиналар геүелдәгән тауыш ишетелде. Тәүҙәрәк, юл ситендәге түңгәклеккә боҫто. Килә ятҡан техникалы ғәскәр, бәхеткә, үҙебеҙҙекеләр булып сыҡты. Хәлһеҙләнгән яралы һалдатты шунда уҡ алып госпиталенә оҙаттылар. Госпиталдә ике айҙай ятып, яраһы уңалғас та, үҙенең часына ебәреүҙәрен үтенде. Әммә госпиталь начальнигы, оло ғына медицина подполковнигы: "Часыңды барыбер ҡыуып етә алмаясаҡһың, һалдат. Дары еҫен татыған һалдаттар бөтә частарға ла кәрәк. Ана, һине алырға бер артиллерист килгән", - тине. "Артиллерист һөнәрле түгелмен. Мин - пехотинец". "Ничего, солдат, научим", - тине артиллерия капитаны. Усманға кәрәк булған документ-фәләнде алдан әҙерләп тә бөткән булғандар икән. Уның менән бергә төҙәлеп сыҡҡан ете-һигеҙләп һалдатты "полуторка" машинаһына тейәп алып та киттеләр.

- Сулейманов, прими пополнение, - тине уларҙы оҙатып килеүсе капитан. - Һиңә иң яҡшыларын һайлап алып килдем, - тип шаяртты. Ләкин уның шаяртыуы үтә лә етди ине. Сөнки ул саҡтағы урыҫ офицерҙары әйтмешләй, "дары еҫен еҫкәгән" һалдаттар алғы һыҙыҡтағы һәр бер часта "на вес золота" ине.

- Ҡайҙан? - тип һораны йөҙгә үтә лә етди күренгән ҡара ҡашлы уҫал ҡарашлы өлкән лейтенант тап-таҙа башҡорт телендә.

- Баймаҡ районынан, - тине яҡташын осратҡанға күңелләнеп киткән Усман комбаттың түшендәге алтын йондоҙона ҡарап.

- Ниндәй һөнәрең бар?

- Автоматчик.

- Бында барыһы ла автоматчиктар. Заряжающий булырһың, әлегә. Старшина, һалдатты ҡабул итеп ал, - тип бойорҙо ла, етеҙ генә атлап, китеп барҙы.

Аҙ һүҙле, ҡыйыу батарея командиры ҡулы аҫтында хеҙмәт итергә әлегеүенә һөйөндө Усман. Сығышы буйынса Краснокама районынан булған Сөләймәнов Шәриф Сөләймән улы менән бергә хеҙмәт итеүенә һаман да һәр саҡ ғорурлана. Ҡурҡыу белмәҫ командирын, өҫтәүенә, үҙ башҡортоң янында һуғышыу, дәүеренә күрә, үҙе бер бәхет ине шул. Һалдаттар менән бер котелоктан ашап, бергә окоп төбөндә йоҡлап йөрөгән был яҡташы тәү күреүҙә генә уҫал тойолған икән. Ифрат та изге күңелле кеше булып сыҡты ул. Бер ҡасан да ябай һалдаттың көнкүрешенән ситкә тайпылманы. Һәр саҡ беренсе нәүбәттә уларҙы ҡайғыртыр булды...

Инде хәҙер артиллерист булып киткән Усман тәүҙә снарядтар ташыны, унан танкыларға ҡаршы ата торған етмеш алты миллиметрлыҡ пушканың заряжающийы һөнәрен үҙләштерҙе. Шул арала төҙәләп атырға ла өйрәнеп алды. Наводчик яраланып, госпиталгә ингәс, расчетта иң яуаплы тип һаналған төҙәләп атыусы вазифаһына тәғәйенләнеләр. Шул расчеты менән һәр саҡ алғы һыҙыкта, фашистарҙың башына етә-етә, шул уҡ ваҡытта үҙ иптәштәрен дә юғалта-юғалта, көҙгә Польша ерендә һуғыша ине инде ул.

Яңы 1945 йылды Польша ерендә ҡаршыланы. Үҙенең отрядына табан сигенгән һайын нығыраҡ ҡаршылыҡ күрһәтә ине немецтар. Люблин, Лодзь, Познань, тағы бер ике ҡаланы (исемдәре иҫендә ҡалмаған) һәм һаңлыҙ күп ауылдарҙы азат итеп, сәнәғәт яғынан әһәмиәтле булған пунктарҙы, тимер юл селтәрҙәрен баҫып алыуҙа ҡатнашҡан частар составында фашистарҙы артабан әҙәрлекләнә Усман. Ана шул алыштарҙың береһендә күрһәткән батырлығы өсөн юғары командующийҙың приказы менән өсөнсө дәрәжә Дан ордены менән наградланды.

Март айы көндәренең береһендә, инде Германия ерендә торған уларҙың позицияһына - алғы һыҙыҡҡа бер-нисә генерал һәм офицер оҙатыуында маршал Георгий Жуков килде. Һуғышсыларҙы дәртләндереү ниәте менән окопҡа төшкән был оло начальник башына кокардалы папаха, ә өҫтөнә ҡундан тышланған погонһыҙ ҡыҫҡа тун кейгән. Бер-ике һалдаттан ашау, кейем яғын һорашҡас, ни өсөндөр иғтибарын Усманға йүнәлтте. Бәлки, һалдаттар араһында иң йәше булғанғалыр, әллә урыҫ булмаған милләттән икәне күренеп торғанғамы икән... "Кайны яктан һин, сынок?" тип һораны. Һалдат үҙенең Башҡортостандан икәнен әйткәс: "Башҡорттар ҡыйыу халыҡ, мин уларҙың батырлығын Петроградты Юденичтан һаҡлағандан һәм Польша фронтынан беләм. Салауат тоҡомдары бирешмәҫ. Тиҙҙән Берлинды штурмлаясаҡбыҙ. Алыш бик ҡаты буласаҡ", - тине.

"...Дошманды Польша еренән ҡыуып сығарҙыҡ, хәҙерге көндә немецтарҙың үҙенең ерендә һуғышабыҙ. Баш осонан снарядтар осоп тора. Берлин ҡалаһына 40 саҡырым ғына етмәй торабыҙ. Был ҡала ла тиҙҙән беҙҙеке буласаҡ... Әсәй, Ҡыҙыл Армияның еңеүен һорап, Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылып ултыр. Мин ошо һуғышта юғалып ҡалһам да һис кенә лә ҡайғырмағыҙ. Аллаһ ҡушһа - үленер, ҡушмаһа - йөрөләр..." Латин хәрефтәре менән әсәһенә яҙылған ошо өсмөйөшлө хаты әле булһа ла иң ҡәҙерле әйбер булып һаҡланып ята. Һалдаттың һуңғы хаты...

...Утыҙ беренсе март иртәһе. Тиҫтәләгән немец танкыһы Усмандарҙың нығынған позицияһына табан килә. Ике яҡтан да көслө атыш башланды. Дошмандың бер-нисә танкыһын яндырып өлгөргән уларҙың расчеты янында снаряд шартланы. Бар донъяның аҫты-өҫкә әйләнде. Унан тынлыҡ һәм ҡараңғылыҡ... Лә иләһә иллаллаһ... Усман сираттағы мәртәбә яҡты донъя менән хушлашты... Башҡа бер ни ҙә хәтерләмәй ул. Тәүҙә эвакогоспиталь, унан Новосибирск ҡалаһындағы тыл гопитале, башынан һәм эске органдарынан снаряд ярсыҡтарын алыу буйынса әллә нисә ҡатмарлы операция...

* * *

Шинель скатҡаһын яуырын аша элеп, арҡаһына вещмешок аҫҡан, башына пилотка, аяғына кирза итек кейгән Усманды Ҡуяндар ауылынан өҫдүрт йөҙ метр арала ятҡан Сарҙаҡ тауы итәгенә тиклем ике санитар оҙатып килде. Санитарҙарҙың ни өсөн шунан ары үтеп, ауылға инмәгәндәре ошо көнгәсә сер булып ҡалды. Ҡабалан булғандарҙыр, күрәһең...

Һай ғына булған Саҡмағош йылғаһы аша кисеп сығып, әсәһе уны ҡосаҡлап алды.

- Ҡайттыңмы, балам?.. - Баштараҡ, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмайыраҡ торҙо инде гәзизенең ҡайтырына өмөтөн өҙгән Хәсниямал инәй. Сөнки һуғыш тамамланыуға ла ике ай самаһы үтеп киткән, тере ҡалған яугирҙар барыһы ла тиерлек ҡайтып бөткән...

Әсәһенең шул мәлдәге илауларан йөҙөн генә бер аҙ хәтерләй Усман. Әммә тауышын ишетмәне. "Һаумы, әсәй!" тип әйтергә лә уҡталды ул, әммә "һа... һа..." тигән генә өндәр сығара алды. Немец танкыһы снаряды ярсығы ингән баш мейеһенең ауыр контузияһы уны ҡолаҡтан һәм телдән дә яҙҙырған. Бөтә Европаны йәйәүләп, йә иһә шыуышып тигәндәй үткән, сәстәре салланып өлгөргән был яугирға ун туғыҙ ғына йәш ине...

Контузиянан әле арынып етмәгән, ымлап ҡына һөйләшә алған яугир һуғыш йылдарында бөлгөнләккә төшкән ауыл хужалығын күтәреүгә ең һыҙғанып тотондо. Һуғыш тамамланып ике йыл да үтеп китте. Бер көн колхоз йомошо буйынса Темәстән алыҫ булмаған Әмин ауылына килде Усман. Уныҡ ҙа көнгә янған битенә саң ултырған, ырымыҫҡа һымаҡ унда-бында етеҙ генә йүгереп, иген тоғында эшләп йөрөгән ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, йәтеш ҡәүҙәле йәш кенә мөләйем һылыу ҡыҙға бер ҡарауҙа ғашиҡ булды ла ҡуйҙы егерме беренсе йәш менән барған егет. Ымлап булһа ла һөйләшеп, был тыр ғына Молотов өлкәһендә ярты йыл хеҙмәт әрмеһенең әсесеһенән татып ҡайтҡан ун ете йәшлек Рәкиә менән танышып, бергә тормош ҡорорға килештеләр...

Ҡырҡ йылдан ашыу колхоз эшендә эшләп, хаҡлы ялға сыҡты Усман олатай. Шул йылдарҙа әкренләп ишетә, һөйләшә лә башланы. Рәкиә инәй менән ингәиң терәшеп, ифрат та татыу ғаилә булып, 68 йыл бергә йәшәне улар. 8 бала үҫтереп, 21 ейән һәм ейәнсәрен, алтмышлаған бүләбүләсәрен күреү бәхетен насип итте Аллаһ Тәғәлә уларға. Етмешенсе йылдар аҙағында, хөкүмәттең ваҡ ауылдарҙы бөтөрөү буйынса сираттағы сәйәсәтенә ярашлы, Ҡуяндарҙан күрше Байым ауылына күсеп килде улар. Йорт-ҡураны бөтөнләйгә емереп, күсенеп, яңынан төҙөү мәшәҡәттәре шаҡтай ауыр булһа ла, башҡа әллә күпме ҡыйынлыҡтар күргән кешегә быныһы ғына әле түҙерлек икән... Утыҙынсы йылдары емертелгән Байым мәсете урынына янынан ғибәҙәт йорто төҙөүгә лә ифрат әүҙем тотондо Усман олатай. Хәлитов Зәки, Вәлиев Әнүәр олатайҙар менән берлектә, башҡа ауылдаштары ярҙамында туҡһанынсы йылдар башында бынамын тигән өр-яңы мәсет тә төҙөп ултырттылар...

Әйткәндәй, әлеге яҡташ командиры менән туҡһанынсы йылдар башында Өфө ҡалаһында ҡабаттан осрашты ул. Гәзит аша хәбәрләшеп, бер-береһен тапҡас, Башҡорт АССР-ының финанс министры вазифаһынан хаҡлы ялға сыҡҡан Советтар Союзы Геройы Сөләймәнов Шәриф Сөләймән улы үҙенең һалдатын ҡунаҡҡа саҡырғайны. Кеселекле һәм кешелекле кеше ғүмер буйына шулай булып ҡала икән ул. Командиры уны үҙенең өйөндә өс көн башҡортсалап ҡунаҡ итте. Һуғыш яланындағы хәтирәләрен, яуҙа һәләк булған иптәштәрен иҫкә алдылар. Ҡала музейҙарына, Тукай урамындағы мәсеткә алып йөрөнө уны Шәриф Сөләймән улы. Ҡунаҡ ашы ҡаршы тигәндәй, оҙаҡламай Усман да командирын саҡырырға ниәтләп, һарыҡ һимертеп йөрөгән саҡта гәзит аша ҡайғылы хәбәр алды. Етмеш бишенсе йәш менән барған башҡорт ҡаһарманы Шәриф Сөләймән улының йөрәге тибеүҙән туҡтаған икән...

Ауыр контузия эҙемтәһе - әленән-әле баш әйләнеү өйәнәктәренән ғүмер буйы яфаланған яугир, отставкалағы гвардия ефрейторы Арыҫланов Усман Дәлхә улы йыл да Еңеү көнө байрамына беренсе дәрәжә Ватан һуғышы, өсөнсө дәрәжә Дан ордены һәм башҡа ун бишләп миҙал таҡылған хәрби форма кейеп, ауылдаштары менән осрашырға клубҡа йөрөнө. Яугир ауылдаштарының барыһын да ерләп бөткәс, иң һуңғы Бөйөк Ватан һуғышы ветераны 89-сы йәшендә (2014 йыл) вафат булды. Ауылдаштары, туғандары уны Ҡуяндар зыяратында ерләне. Усман олатайҙың хәләл ефете - Байым ауылында иң һуңғы тыл ветераны булған Рәкиә инәй Ғиниәт ҡыҙы үҙе 2024 йылдың ғинуарында, 93-сө йәшендә донъя ҡуйҙы. Бөгөнгө көндә уларҙың ике ейәне МХО-ла хәрби бурысын үтәй.

Йөшләй генә атайһыҙ ҡалған Усман олатайҙың башта иҫкә алған апаһы - Кинйәбикә инәйҙең дә балалары бөгөнгө көндә илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә тормош көтә. Уның бер улы хаҡында айырып әйтке килә. Баймаҡ районында ғына түгел, республикала исеме билдәле булған арҙаҡлы шәхес ул. Һәләтле, абруйлы хирург, медицина фәндәре кандидиты, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Миңлеғәле Ишмөхәммәт улы Ғүмәров үҙ ғүмерендә меңәрләгән кешенең һаулығын, ғүмерен һаҡлап алып ҡалыуға булышлыҡ иткән. Усман олатайҙың ана шул туғаны һәм ауыл хакимиәте тырышлығында ауылда ике обелиск төҙәлгән. Икеһендә лә оҙон-оҙон исемлектәр. Уларҙың береһе утыҙынсы йылдарҙағы золом ҡорбандарына, ә икенсеһе - Бөйөк Ватан һуғышында яу ҡырында ятып ҡалған ауылдаштарға арналған. Ике исемлек тә күпләп теҙелеп киткән Абдулов һәм Арыҫланов фамилиялары менән башлана...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы подполковник.**

***✓ Бисәһе, аҡса таба белмәйһең, тип ыжыны-ыжыны ла, яңғыҙ улдарын алып үткер кешегә сығып китте. Яратып алһа ла, бергә йәшәгән дүрт йыл эсендә, үтмәҫ бысҡы һымаҡ, тәкәтен ҡоротоп бөткәйне. Балаһы өсөн эсе янды.***




* * *

– Ағайҙар, хәлегеҙ нисек? - Был Инсаф - "Мамай". "Геродот" - Ибраһим өнһөҙ генә баш бармағын күрһәткән була. "Бирешмәйбеҙ!" Йәрәхәте яңаҡта булғас, һөйләшеүе ҡыйын. Бәхеткә күрә, үтә тәрән түгел, ахыры, тиҙ төҙәлер. Шулай тип уйлай Азамат, әйтерһең дә, алда ғүмер бар һымаҡ итеп. Кеше күңеле үлемде бер нисек тә ҡабул итә алмай шул. Уйы менән тормошҡа йәбешеп ята, бәлки, уй тупраҡҡа ҡайтҡан тән менән тороп ҡалалыр... Ул арала Инсаф килеп, фляжкаһынан һыу уртлатты. Булыр-булыр ҙа кеше шул тиклем ипле, игелекле булмаҫ. Һуғышта кешенең кемлеге бик тиҙ беленә.

Азамат "Мамай"ҙың полигондан килгән тәүге көндәрен иҫкә төшөрҙө. Яурындары төшөнкө, йөҙө һытыҡ, ләғер генә бәндә. Һөйләшеп тә, кешегә ылығып та бармай. Үтә сабырмы, әллә самаһыҙ йыуашмы? Уға ҡарайһың да, был оҙаҡҡа бармаҫ, алдан уҡ үлергә әҙерләнеп килгән, тигән тойғо ҡала. Ундайҙар тәүге бойҙан һуң уҡ йә үлә, йә яралана, йә һына. Тәүге заданиеға командир уны "Сая" позывнойлы Чечняны үткән тәжрибәле, ҡырыҫ, аҙ һүҙле уҙаман менән ҡуйҙы. Киттеләр. Азамат ниндәйҙер ауыр тойғо менән арттарынан ҡарап ҡалды. Ярай тегендә мажараһыҙ ғына көн үткәреп, әмерҙе үтәп, кире сығып килгәндә, "Сая" минала шартлаған. Яра ауыр: аяҡ тубыҡтан өҫтә өҙөлгән. Ҡанды туҡтатыуы ҡыйын. Яра алған элекке баҫыу ере - ҡулдан-ҡулға күсеп йөрөй торған үлемесле урын. Дошман минометтары тоҫҡалған, һауала дрондар аҫылынып тора. Бындай ерҙәргә яралыларҙы эвакуациялай торған төркөм тығылмаҫҡа тырыша. Бер кешене сығарам тип, дүрт-бишәү ятып ҡалған осраҡтар күп. Был хаҡта барыһы ла белә. Ундай урындарҙа ҡандары ағып бөтөп, байтаҡ егеттәр зарығып ятып йән бирә. Аҙаҡтан мәйеттәрен дә оҙаҡ ваҡыт алырға форсат сыҡмай. Бына шундай һуғыш, бөтөнләй яңыса, заманса.

Егеттәрҙең барыһының да башынан ошондай уй үткәндер, әммә һис кем өндәшмәне. Сөнки иртәгә, йәки хатта бер сәғәттән, йә бер минуттан (һуғышта бөтәһе лә күҙ асып йомғансы үҙгәрә) үҙеңдең дә "Сая" һымаҡ ҡанһырап, үлем көтөп ятыуың ихтимал. Машинаға тейәлделәр ҙә киттеләр. Эңер төшөп килгән ваҡыт. Барып еткәнсе күҙ бәйләнәсәк. Бәлки, теүәл генә ҡайта алырбыҙ, тигән бөләңгерт кенә өмөт сатҡыһы бар. Әллә инде... "Мамай" тәүге тапҡыр, йүнләп үҙен нисек тоторға ла белмәй. Кәүҙәгә лә "Сая"нан ике тапҡырға бәләкәйерәк. Жгут менән тарттырып ҡанды туҡтатһа, промедол ҡаҙаһа ла әлхәм. Егерме минут тирәһе машинала барҙылар. Артабан ярты сәғәттән ашыу - йүгерә-атлап. Үҙебеҙҙең позицияларҙың сигенә барып етеп килгәндә, "Мамай" бәйләнешкә сыҡты. Ағаслыҡ эргәһендәге ҡаты юлға етеп туҡтаған. Ә был "Сая" яралланған урындан ярты километр тирәһе. Ярай, исмаһам, үҙе сыға алған. Яралыны ҡайҙа ҡалдырғанын әйтер. Эскә йылы инеп китте. Ашығырға кәрәк. Ҡараңғы. Аяҡтарға ботлап мәте йәбешкән. Барған һайын аҙымдар ауырая, хәл бөтә, үпкә алҡымға тығыла. Бына фонарь яҡтыһы елпелдәп алды. "Мамай"! Йүгереп барып эргәһенә ауҙылар. Эргәһендә - "Сая"! Үҙ аңында! Алып сыҡҡан. Хатта "Сая"ның: "Өҙ ҙә ташла, барыбыр эшкә ашмаясаҡ", - тиеүенә ҡарамаҫтан, "Хәҙер врачтар ялғап ҡуя белә", - тип ит тә һеңерҙә генә аҫылынып торған аяҡты ла ҡалдырмаған (Ә бит врачтар, ысынлап та, аяҡты нисектер ҡабат йыя алған. Ҡыҫҡараҡ булып ҡалған-ҡалыуын да. Ни тиһәң дә, үҙеңдеке үҙеңдеке инде). Организмға адреналин һирпелгән саҡта рухы ныҡ, ихтыяры көслө кеше үҙендә ғәйәт ҙур ҡеүәт тоя, башы сәғәт һымаҡ эшләй. Бәхеткә күрә, "Мамай" ана шундай кеше булып сыҡты. "Сая"ны йәһәт кенә носилкаға һалып, кире йүгерҙеләр. "Мамай" ҙа носилкаға йәбеште. "Етер һиңә! Былай ҙа әҙәм ҡулынан килмәҫлекте эшләгәнһең! Шул тиклем араны дрондар, миномет уты аҫтында, мәтеһе аҡтарылып ятҡан баҫыуҙа ни йәнең менән һөйрәп шыуышып килдең!" - тиҙәр. Ни тиклем ҡеүәт: беләк көсө лә, рух та кәрәк бының өсөн. "Рәхмәт, туған! Һин "Сая"ны ғына түгел, беҙҙе лә үлемдән ҡотҡарҙың! " Илла-алла менән машинаға килеп еткәс кенә асыҡланды: ярсыҡ үҙенең дә маңлайын сыйып үткән, тиреһе әйләнеп, һыңар күҙен ҡаплап тора, шыбырҙап ҡан аға. Машинаға ултыртып, үҙен дә госпиталгә ебәрҙеләр. Тиҙ арала ямалып кире килгәнендә, инде үҙ күреп, туған итеп ҡаршыланылар. Бындай яугирҙар алғы һыҙыҡта алтындан да ҡиммәт. Янында шундайҙар булғанда, йәнең дә тынысыраҡ, ҡурҡыуыңды ла йүгәнләп була. Ни булһа ла ташламаҫына ышанаһың. Ә ул аҙаҡтан "Сая"ға: "Ағай, һин үлеп ҡуйма инде. Һөйләшеп ят, һөйләш, мин үлектәрҙән ҡурҡам!" - тип ялынғанын һөйләп көлдөргәйне.

Бер мәлде Сабир:

- Мин тәүҙә "Муравей" инем, - тип кемдең нисек позывной һайлағанын һорашырға тотоноп китте. - Ҡырмыҫҡа кеүек бөтөн нәмәне ташығаным, запаслы булғаным өсөн командир ҡушҡайны. Тик бигерәк оҙон, уңайһыҙ. Ә мин үҙем "Алабай" тип алайым тигәйнем.

- Ә нишләп Алабай?

- Тыуа-тыуғанымдан "әрһеҙ алабай" тип әрләнә торғайным. Тик егеттәр "Шырмый" тип алды ла китте.

- "Шырмый" шәберәк. Әйтергә лә йәтеш, юмор ҙа бар. Үҙеңә бик тә килешә.

- Бына Инсаф абзый дөрөҫ һайлаған. Мамай хан, хандың да ниндәйе, тарихта тороп ҡалғаны.

- Хан, имеш, - тип ғәҙәтенсә тыйнаҡ көләмһерәне Инсаф. - Мәмәй мин, ә урыҫса Мамай була. Бәләкәйҙән йәбешкән ҡушамат.

- Әһә, итерһең һине мәмәй! - тип көлөштөләр.

Ә "Мамай" шаяртмай ине. Ипле, сабыр, эшсән әсәһенең "Аш менән атҡанға ла таш менән ат", "Харам беҙгә килешмәй", "Кеше рәнйешен алып ҡуйма", тип ныҡып үҫтергән аяулы балаһы ул. "Ярар, балам, ҡуй. Ярар, балам, күнәйек! Ярар, ярар", тип гелән тыйғанға өйрәнгән. Саҡ ҡына иртәрәк, совет осоронда, тыуған булһа, улай ауырға ла төшмәҫ ине, урынын да табып китер ине, бәлки. Хеҙмәт кешеләренең ҡәҙере, намыҫлы эштең баһаһы бар ине бит ул заманда. Ә тыйнаҡлыҡты - йыуашлыҡ, ихласлыҡты - алйотлоҡ, аҡсаны тормош маҡсаты итеп күргән өҙгөс капитализм ҡаршыһында, оятһыҙлыҡ алдында ул ҡаушап ҡалды. Ҡайҙа ғына эшкә урынлашып ҡараманы: бер урында - бурлыҡ, ҡушылып урлашмаһаң, һин - дошманһың. Икенсе урында - эскелек. Табынға ҡушылмаһаң, һин - ят бауыр! Өсөнсө урында маҡтап-маҡтап эшләтәләр ҙә бер тин түләмәй алдап ҡайтаралар...

Бисәһе, аҡса таба белмәйһең, тип ыжыны-ыжыны ла, яңғыҙ улдарын алып үткер кешегә сығып китте. Ҡатын өсөн өҙәлмәне "Мамай". Яратып алһа ла, бергә йәшәгән дүрт йыл эсендә, үтмәҫ бысҡы һымаҡ, тәкәтен ҡоротоп бөткәйне. Балаһы өсөн эсе янды. Ныҡ ауыр булды. Ә ҡатын: "Ирем көнсөл. Һинең бала менән осрашыуыңды яратмай", - тип, улын күрһәтмәҫ тә булып китте.

Аңҡы-тиңке килеп йөрөгәндә әсәһе ауыр сиргә һабышты, йылдан ашыу ғазапланып ятып йән бирҙе. Был донъялағы берҙән-бер ғәзиз кешеңә ярҙам итә алмау, күҙеңә ҡарап һыҙланып, зарығып ятыуы аҡтыҡ көстө алды. Бына шундай төшөнкөлөккә бирелеп йөрөгәндә ҡатыны: "Малайҙы яңы ирем уллыҡҡа алырға теләй. Исмаһам, бала һәйбәт тәрбиә күреп, етешлектә үҫһен", - тигән булып, ризалыҡҡа ҡул ҡуйҙырып алды. Дөрөҫөн генә әйткәндә, тормоштан ваз кисеп, төшөнкөлөккә бирелеп йөрөгәндә мобилизация бер мөмкинлек һымаҡ булды ул.

Повестка алғас, көймәне лә, ҡыуанманы ла. Үҙенә тотош ҡул һелтәгәйне. Ғәҙәтенсә, кешегә ауырлыҡ төшөрөп, имгәк булмаһам ярар ине, тип кенә уйланы. Быға саҡлы тормошта мәмәйлек булып тойолған талымһыҙлыҡ, нәфсеһеҙлек, баҫалҡы сабырлығы, тоғролоғо, фиҙакәрлеге, ярҙамсыллығы, тырышлығы һуғышта бик кәрәкле сифаттар булып сыҡты. Ғүмерендә беренсе тапҡыр ошонда үҙ-үҙенән ҡәнәғәтлек алып, рәхәт тойғо кисерҙе.

* * *

Яраланып, госпиталдә ятып сыҡҡас, бер генә ҡайтып әйләнде Инсаф. Шунда ла күңеле ныҡ ҡырылып килде. Кешеләрҙең һаман да битараф йәшәй алғаны башына һыйманы. Хатта үсәгән һымаҡтар. Илдә ни тиклем насарыраҡ булһа, шул тиклем уларға яҡшыраҡ. Әйтерһең, тик бында ғына ғәҙелһеҙлек, азатлыҡ юҡ. Ә башҡа яҡтарҙа ал да гөл, хатта ожмах. Кешеләре лә фәрештә һымаҡ. Ҡайҙан барлыҡҡа килгән ул бындай хыянатсыл рух? Ана үҙенең еҙнәһе генә лә, дүрт бала атаһы, тормоштоң әсеһенсөсөһөн татыған кеше. Оялмай ҙа, ауыҙы ла ҡыйшаймай: "Көйөп китмә, ҡәйнеш, украиндар беҙ башҡорттарға теймәй ул", - тип ҡарап тора. Нишләп тик башҡорттарға ғына теймәҫкә тейештәр? Был хаҡта үҙе лә белмәй. Ауыҙынан сыҡҡанды ҡолағы ишетмәй, ахыры.

- Һинең башҡортлоғондо тикшереп торған кеше булырмы, еҙнә? - тип ябай ғына итеп аңлатып ҡараны. - Улар өсөн беҙ барыбыҙ русня. Күҙ алдыңа килтер, мин бер һөжүмде генә һөйләйем. Промкала булды был хәл. Туп-тура, үрә баҫып киләләр: өҫтәренә беҙҙең пулялар түгел, ямғыр яуған һымаҡ... Бөтөн обойманы атып бөтәһең, ә уға барыбер. Мин атам - ул ҡолай, тағы тора, бер нәмә лә булмаған һымаҡ тағы килә. Башына йәки йөрәгенә тейҙерергә кәрәк. Ә брониктағыларҙың йөрәгенә тейҙереү ҡыйын. Башына атаһың: йығыла, тик ҡайһы берҙәре хатта башһыҙ ҙа торорға, һаман атларға маташа. Ҡурҡыштан сәстәр үрә тора. Ә бит ул яңғыҙы түгел, йөҙәрләгән киборг һинең өҫтөңә менеп килә. Улар ауыртыуҙы ла, ҡурҡыуҙы ла тоймай. Ҡырып һалаһың, ә артынан бүтәндәр ябырыла. Тағы, тағы, тағы... Беҙ инде үлтереп арыныҡ, ә улар һаман-һаман ташлана...

Телевизорҙан һуғышты кино шикелле генә ҡарап өйрәнгән еҙнәһе ҡәйнешенә ышанғыһы килмәй, шикләнеп ҡарай.

- Шунан?

- Шул. - Ағарынып киткән "Мамай" һаман күҙ алдында торған ауыр күренеште ҡыумаҡ булып, башын сайҡап ҡуйҙы. - Наркотик һымаҡ бер шыйыҡса эсәләр ҙә, тәьҫире ун көнгә етә.

- Ҡайҙан беләһең?

- Аҙаҡтан, әсир төшкәндәре һөйләне. Шунан егеттәр бер блиндажда шешәләренә "Тере һыу" тип яҙылған шыйыҡса тапҡан. Бына шундай һуғыш, еҙнә. Быға тиклем булмағанса аяуһыҙ. Хатта Чечняла былай түгел ине, тип һөйләй унда ҡатнашҡан егеттәр. Һинең кемлегең, нимә уйлауың уларға кәрәкмәй. Һин - русня, москаль. Улар һиңә һөсләтелгән. Нисек, кем һөсләткән, ни өсөн - ул хаҡта уйларға һуң инде. Бына шуларға ҡаршы торорға тура килә, еҙнә. Ә һин, көймә, тиһең. Был - компьютер уйыны түгел.

Аңланымы еҙнәһе, юҡмы. Әммә йөҙөнә ҡурҡыу шәүләһе яғылды былай. Һуғыштан түгел, "мәмәй - мәмәй инде" тип быға саҡлы эшкә һанамаған ҡәйнешенән нығыраҡ шөрләне, ахыры. "Ярар, илап ҡалған кеше булмаҫ", тип уйлай яугир.

Апаһы менән еҙнәһенең иплəп кенә түләнергә тейешле аҡсаларҙы нисегерәк юллап алыу тураһында һорашыуынан, еҙнәһенең ҡыйыҡты алмаштырырға, өйҙө профнастил менән көпләргә кәрәк, тип һөйләнеүенән ҙур аҡсаға өмөттәре барлығын төшөнә ул. "Ярай, берҙән-бер туғаным бит апайым. Әсәйем ауырығанда ла ҡарашты. Рәхәтен күрһендәр", - тип уйлаһа ла, яманһыу инде ул. Үкендерә лә. Ҡабаттан башлап йәшәргә ине ул. Әллә нисек көшмөрәп, баҫылып йәшәлгән... Ниҙән ҡурҡылған? Әгәр тағы ғүмере булһа, бөтөнләй башҡаса, иркен тын алып, күкрәк киреп, күтәренке күңел менән йәшәр ине һымаҡ... Улын да бер нисек ҡайтарып ала алыр ине ул. Берәй яйы табылыр ине...

**(Дауамы. Башы 14-17-се һандарҙа).**

*ОБЕЛИСК ҺАҠЛАЙ ХӘТИРӘ*

# ПОЛИТРУК ЯҘМЫШЫ

**Ауылыбыҙ уртаһындағы Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандары иҫтәлегенә ҡуйылған обелиск янына килеп баҫһаң, үҙең дә һиҙмәҫтән, күҙҙәр таныш исем-шәрифтәр эҙләй башлай. Ундайҙары, һуғыштан иҫән-һау ҡайтып, беҙ күреп-белеп эргәлә донъя көткәндәре, бик аҙ, әлбиттә. Әммә улар хаҡында ла хәҙер генә, хәрби комиссариаттар мәғлүмәт бирә башлағас, архивтар асылғас ҡына белдек, сөнки үҙҙәре ауыҙ тултырып маҡтана, күкрәк ҡаға торған кешеләр түгел ине. Пинжәктәренә мәңгегә беркетелгән орден-миҙалдары ла 9 майҙа клуб эргәһендә үткән тантаналы сарала ғына күренеп ҡалды. Мәктәпкә осрашыуҙарға килһәләр ҙә, һуғыш тураһында артыҡ һөйләмәй, сал сәсле, һыр баҫҡан ябыҡ йөҙлө бабайҙар, ҡәүҙәләрен тура тотоп, ошо һуғыштың тере шаһиттары булып, ҡара таҡта эргәһендә баҫып торҙо.**

Ветерандар төшкән фотоһүрәттәрҙе ҡарап ултырһаң, күпме кеше өнһөҙ-тынһыҙ ғына был яҡты донъянан китеп барған һәм беҙ улар хаҡында бер нәмә лә белмәй ҡалғанбыҙ, тигән уй килә. Ә бит ҡарт һалдаттарҙың һәр береһе беҙҙең иғтибарға лайыҡ булған, һәр береһе ауыр һуғыш йылдарына бәйле тәрлө һынауҙар, яу юлы үткән.

Баҡый Хафиз улы Тасмағолов (1913 - 2002 йылдар) ғүмере буйы Мәсетле районы Теләш ауылында көн итһә лә, тыумышы менән Яңы Мөслимдеке. Ул ҡатыны, уҡытыусы Миннур Йосоп ҡыҙы Йосопова менән магазин ҡаршыһында ғына йәшәгәс, ошо юлдан мәктәпкә лә йөрөгәс, оҙон буйлы, асыҡ йөҙлө бабай булып бик яҡшы хәтерҙә ҡалған. Бәхеткә күрә, район гәзитендә эшләгән саҡта уның менән әңгәмә ҡороп, мәҡәлә лә баҫтырғанмын. Ярты быуат элек яҙылған был юлдар әллә ҡасан булған ваҡиғаларҙы хәтергә төшөрә. Ул саҡта бабайға 74 йәш ине. Тура ҡарашлы, яҡты хәтерле, ваҡиғаларҙы йылына, көнөнә бәйләп һөйләгәне иҫтә ҡалған.

Баҡый исеменең мәғәнәһе мәңгелек тигәнде аңлата икән. Күрәһең, атаһы улына исем ҡушҡанда уның тормош юлы ябай булмаҫын, яҙмышына бик ауыр заман, йәшәү һәм үлем хәлдәре йәнәш кенә йөрөгән һуғыш яланы ла һәм унда уға тәрлө һынауҙар үтергә тура киләсәген дә һиҙенгән. Уҙ-үҙен белә башлағандан уға тормоштоң әсе-сәсәһен байтаҡ татырға тура килә. Бик күп тиңдәштәре уның хәтерендә аслыҡтан шешенгән сүрәттә ҡала, сөнки бала саҡтары аслыҡ йылдарына тура килә. Ниндәй ауыр заманалар булһа ла, ул Яңы Мөслим ауылындағы ете йыллыҡ мәктәптең бишенсе синыфына тиклем уҡый ала. Артабан уҡырға мөмкинлек теймәй, ғаиләлә өсөнсө ул булған Баҡый ағалары менән эшкә сыға. Буйлыраҡ малайҙарҙы баҫыуға йөрөтәләр бит ул саҡта.

Ҡыҙыл Армия сафындағы һалдат юлын Баҡый Хафиз улы 1935 йылда артиллерия полкында тәҙәүсе булып башлай. Һалдат тормошоноң тәүге ауырлыҡтарын кисерергә тура килгән Алыҫ Көнсығышта урынлашҡан Раздолье станцияһын ул бер ҡасан да онотмай. Әрме хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас, һалдат гимнастеркаһын милиция формаһына алмаштыра. Уның тормошо тынғыһыҙ, борсолоулы төндәр, тәрлө ҡиҫкен хәлдәр менән бәйле була. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ебәреүҙәрен һорап хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт итһә лә, тәүге йылдарҙа ғаризаһын кире ҡағалар. 1942 йылдың авгусында ғына ул һуғыш уты уртаһына - Сталинградҡа эләгә. 262-се артиллерия полкының батарея орудияһы командирын алышҡа инер алдынан партияға алалар. Төп вазифаһына өҫтәп, тағы ла яуаплыраҡ эш йөкмәтәләр, ул сәйәси тәрбиә буйынса командирҙың урынбаҫары - политрук итеп тәғәйенләнә.



Ул дәшһәтле көндәр ветерандың хәтерендә мәңгегә уйылып ҡала. Бигерәк тә Мелитополь янында булған дошмандарҙың танк атакаһы киҫкен була. 1943 йылдың 14 ғинуарында Ростов өлкәһе Пухляков станицаһы янындағы алышта орудие командиры Тасмағолов, пушканы алғы һыҙыҡҡа 300 метрға тиклем яҡынайтып, тура төбәп атып, ҡаршы килеүсе дошмандың контратакаһын кире ҡаға һәм дошман пехотаһын тарҡата, бер взвод һалдаттарын һәм станоклы пулеметты юҡ итә. Ошо алыштағы ҡыйыулығын "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән билдәләйҙәр. Һуңынан гвардия өлкән сержанты Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, ә Запорожье өлкәһе Ова-Любимовка ауылы эргәһендәге алыш өсөн I дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән наградлана. Шулай итеп, орудия батареяһы командиры Баҡый Тасмағолов Сталинградтан Көньяҡ Пруссияға тиклем барып етә. Әммә алыштарҙың береһендә ул ҡаты яралана һәм госпиталгә эләгә.

Һөйләшеп ултырғанда Баҡый бабай һарғайып бөткән, бер-береһенә һалам остоғо менән беркетелеп ҡуйылған ҡағыҙҙар килтереп сығарҙы, ул партия взностары түләү тураһындағы ведомостар икән. Был ваҡытта әңгәмәсем: "Украина һаламы", - тип көләмһерәп әйтеп ҡуйҙы. Һалам киҫәген тартып алып, исемлекте уҡыйым, бары бер фамилия ғына һәр биттә ҡабатланып килә, ә башҡалары алышына. Баҡый бабай һәләк булғандарҙың исемдәрен, милләтен асыҡлап, уларҙың ҡайҙа, ниндәй алышта, нисек һәләк булғанын һөйләй. Минең өсөн теҙелеп киткән фамилиялар ғәҙәти өнһөҙ-йәнһеҙ исемлек кенә булһа, уның өсөн йөрәген һыҙлатҡан һәләк булған яуҙаштары тураһында хәтирә икәнен аңлайым. Ҡасандыр улар иңгә-иң терәшеп алышҡа сыҡҡан, ҡайғылары ла, шатлыҡтары ла уртаҡ булған. "Күптәрҙең ғүмерен һуғыш йотто. Донъяла һуғыштан да яман бер нәмә лә юҡ. Шуға тыныс тормоштоң ҡәҙерен белергә кәрәк", - тине ҡарт һалдат.

Ҡәһәрле һуғыш был быуын кешеләренең ғүмерен шулай телгеләп сыҡҡан: һуғышҡа тиклем, һуғыш һәм һуғыштан һуңғы тыныс тормош. Был өс ваҡыт төшөнсәһе лә бер һүҙҙән ҡоролған һәм тормоштары ла унан сығып билдә алған. Ил яҙмышы хәл ителгәндә Баҡый бабай ҡайҙа булған? Был йәһәттән күңеле тыныс, ул иле менән бергә дошманға ҡаршы көрәшкән!

Баҡый Хафиз улының һуғыштан һуңғы тормошо Теләш ауылы кешеләре менән бәйле булды. Ул "Коммунист" колхозында, сельпола бугхалтер булып эшләне, почта бүлексәһендә мөдир вазифаһын биләне. Ҡайҙа ғына хеҙмәт итһә лә, ауыл халҡы уның эште юғары кимәлдә алып барғанын, тыныс, кешеләр менән итәғәтле мөғәмәлә иткәнен иҫләй. Бәлки, кешеләргә һаҡсыл ҡарашы ветерандың, һуғыш ваҡытында командир булып, бик күп яуҙаштарын юғалтыуҙан да ҡалғандыр.

Иңдәренә һуғыш төшкән быуын кешеләре яҡты донъяны ҡалдырып китеп бөтөп бара. Беҙҙең арала улар тыныс ҡына ғәҙәти тормош алып барғанда, беҙ батырлыҡтарын тәрәндән аңлап етмәнек, күптәре ҡәҙер-хөрмәт күрмәй йәшәне. Ә бит Бөйөк Ватан һуғышында еңеп ҡайтҡан яугирҙар арҡаһында күп йылдар тыныс илдә бәхетле йәшәнек. Ошо тормошто яулауҙа Баҡый бабайҙың да өлөшө ҙур булған.

**Мәүлиҙә ӘХМӘТЙӘНОВА.**
**Мәсетле районы**
**Теләш ауылы.**

*ХӘТЕРЛӘП...*




# АТАЙҘАР ӘЙТКӘНЕНӘ ТОҒРОБОҘ

**Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы яҡынайған һайын илебеҙҙең немец илбаҫарҙарын еңеү өсөн ниндәй ауырлыҡтар, күпме көс, күпме кеше ғүмере, күпме ауырлыҡтар аша үтеүе асығыраҡ сағылыш таба. Беҙҙең ғаиләлә лә бар ундай тарих.**

Беҙҙең атайыбыҙ Байморатов Ғизылхаҡ Ҡотлобай улын һәм уның ҡустыһы Хәснәлхаҡты 1941 йылдың авгусында һуғышҡа алып киттеләр. Әсәйем Рабиға дүрт бала менән яңғыҙ тороп ҡала. Атайым 162-се айырым тәҙәләүсе батальонында сапер булып, һуңынан 17-се уҡсылар дивизияһында стрелок булып хеҙмәт итә. Ҡустыһы Хәснәлхаҡ менән һуғышҡа инмәҫ элек үк айырылышалар. Был уларҙың һуңғы осрашыуы була. Хәснәлхаҡ хәбәрһеҙ юғала. Атайым 1942 йылда Смоленск өлкәһе Ельня янында ауыр яра алып, инвалид булып тылға ҡайтарыла. Яраланып ҡайтҡас, уның яраһы һыҙлап, төндәр буйы йоҡлай алмай ыңғырашып сығыуын әсәйем һөйләй торғайны. Уның һөйләүе буйынса, ул 1939 йылғы фин һуғышында ла ҡатнашҡан. Сөнки уның шул һуғыш ваҡытында бик ҡаты һыуыҡтар булыуын, шинель менән генә булып, күп һалдаттарҙың аяҡ-ҡулдарын туңдырыуын, туңып үлеү осраҡтары ла булыуын һөйләгәне хәтерҙә.

Яраһы аҙыраҡ тәҙәлгәс, атайымды "Правда" колхозы рәйесе итеп ҡуялар, сөнки ул уҡымышлы кеше һаналған, уҡый-яҙа белгән. Һөйләүҙәре буйынса, кешеләргә этлеге теймәгән, яңғыҙ ҡатындарға, ярлыларға ярҙам итергә тырышҡан. Нисәнсе йылдар булғандыр, район етәкселәренә белгертмәй-нитмәй, Турайғырҙа бер йылғы янындағы яланға тары сәсеп, халыҡҡа таратып бирә. Сөнки халыҡ ас була. Һәр ваҡыттағыса (ошаҡсылар табыла), был хәлдә органдарға алып барып еткерәләр һәм атайымды ҡулға алып, Мораҡҡа алып барып ябып ҡуялар. Был ваҡытта Нуҡайҙа мәктәп директоры булып Зәбихулла ағай эшләгән була. Шул барып, һөйләшеп, ул ғәйпле түгел, тип, атайымды сығарып ала. Колхоз рәйеслегенән һуң ул оҙаҡ йылдар лесник булып эшләй. Унан һуң, халыҡ магазинһыҙ этләнә, тип, ишек алдындағы келәтте магазин аса. Ул шулай нисек кенә булһа ла халыҡҡа ярҙам итергә, ауыр хәлдәрҙе еңелерәк үткәреү юлдарын эҙләргә тырыша.

Ғаиләлә һигеҙ бала үҫтек. Атайыбыҙ һәр ваҡыт беҙгә, уҡырға кәрәк, тип әйтә торғайны. Шуғалыр ҙа һигеҙ баланың етеһе юғары белемле булып, матур тормош көттөләр һәм көтәбеҙ. Тик оло апайым Рафиғаны ғына, әсәйемә бер үҙенә ауыр, тип, башланғыс кластан һуң уҡытмағандар.

Хәҙеге ваҡытта Украина ерҙәрендә шул уҡ фашистарға ҡаршы һуғыш бара. Унда апайымдың ейәне Руслан, ҡәйнеш Денис, Радик кейәү, ҡоҙабыҙ Салауат уҙ хәрби бурыстарын үтәйҙәр. Атайымдың "Уҡырға кәрәк, илде һаҡларға, яҡларға кәрәк", тигән бурысын үтәп, оло улының малайы Мөхәмәт хәрби хеҙмәткәр булып, майор дәрәжәһендә пенсияға сыҡты. Минең ҡатыным Хәҙисә, үҙем һәм улым Мансур әске органдарҙа эшләп, майор дәрәжәһендә пенсияға сыҡтыҡ.

Ошо ауыр ваҡыттар үтеп китеп, һуғыштар туҡтап, матур көндәр килер тип өмөтләнәбеҙ. Беҙҙең балалар, киләһе быуындар тыныс тормошта йәшәһендәр ине, тип доғалар ҡылабыҙ.

**Булат БАЙМОРАТОВ.**

*✓ Ул ваҡыттағы ил етәкселегенең әсирҙә булғандарға ҡарашы үтә лә насар ине. Мөхәмәт олатайҙы ла ай һайын тип әйтерлек тикшереү органдары саҡыртып, һорау алып ҡаңғырта. Пенсия ла түләмәйҙәр уға.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАҠ БУЛЫУ...

## ғүмерҙе оҙайта

■ Ябай алма - бик яҡшы дауа. Ул йөрәк өйәнәге хәүефен күпкә кәметә. Бының өсөн көнөнә бер алма ашау ҙа етә. Ә бына Норвегия кардиологы П. Овеха йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн арыш икмәге ашарға тәҡдим итә. Быны ул арышта йөрәккә бик кәрәкле липома кислотаһы барлығы менән аңлата. Сингапур ғалимдары иһә ҡайһы бер йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуынан тауыҡ һурпаһы дауалай, тигән һығымтаға килгән. Уның составындағы матдәләр йөрәкте тейешле кимәлгә ҡайтара, ҡан тамырҙарын холестериндан таҙарта.

■ Калифорния университеты ғалимдары 1921 йылда үткәрелә башлаған тикшеренеүҙәргә нигеҙләнеп, ғүмер оҙайлығына бәйле ҡыҙыҡлы һығымталар яһаған. Улар раҫлауынса, юмор хисе ташып торған, тормошто һөйөүсән кешеләр, ғәҙәттә, ҡыҫҡа ғүмерле була. Бындайҙар артыҡ тәүәккәл булыуҙары арҡаһында, үҙҙәрен йышыраҡ ҡурҡыныс аҫтына ҡуя икән. Ә бына һаҡ булыу, аҡыллы шикселлек ғүмерҙе бермә-бер оҙайта. Ғаилә ҡороп йәшәүсе ир-егет яңғыҙаҡтарға ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй. Шулай уҡ үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ғына өйләнгән ирҙәр бәхеттәрен бер нисә тапҡыр һынағандарға ҡарағанда оҙайлыраҡ ғүмер кисерә, имеш. Хеҙмәт яратыусылар ҙа эш яратмаусы йәштәштәренә ҡарағанда ғүмерлерәк була. Шулай уҡ эргә-тирәләгеләргә ярҙамсыл булыу сәләмәтлеккә лә, ғүмер оҙайлығына ла ыңғай йоғонто яһай, ти ғалимдар.

■ Ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙе, матди килемде, сәләмәтлекте үҫемлектәрҙең энергияһы ярҙамында көйләргә була. Белгестәр әйтеүенсә, амариллис гөлө ғашиҡтар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшырта. Адиантум - ҡатын-ҡыҙ үҫемлеге. Ул гүзәл затҡа ярҙам итә, ҡытай раузаһы ир менән ҡатындың тойғоларын тағы ла сағыуыраҡ итергә һәләтле. Тормошоғоҙҙа үҙгәрештәр булыуын теләһәгеҙ, бегониялар үрсетегеҙ. Белгестәр тап бегонияның шәхси тормошто яйға һалырға булышлыҡ итеүен билдәләй. Алһыу, ҡыҙыл һәм ҡыҙғылт һары төҫлө сәскә атыусы бегонияларҙы бер көршәккә ултыртһағыҙ, рух күтәренкелеге, энергия көсәйеүен тойорһоғоҙ. Хлорофитум - тәбиғи кондиционер, ул кире энергияны ыңғайға әйләндерә. Был гөлдө аш бүлмәһендә тотоу яҡшыраҡ. Төнөн кислород бүлеп сығара торған үҫемлектәр - каланхоэ, алоэ ла бүлмәләге һауаны яҡшыртасаҡ.

■ Британия тикшеренеүселәре ҡәһүәне алыштыра алырҙай аҙыҡ-түлек исемлеген баҫып сығарҙы. Организмға зыян килтермәй генә тиҙ уяныу мөмкинлеге биргән аҙыҡтар исемлегендә беренсе урынды ябай һыу алып тора. Ул арыуҙы, көсөргәнеште бөтөрә, шулай уҡ организмды йоҡонан уятып ебәреү һәләтенә эйә. Ҡәһүәне шоколад та алыштыра ала, ти белгестәр. Какаола организмды тонуста тотоусы матдәләр бар, бынан тыш, шоколад энергия запасын да тулыландыра. Иртә менән ҡыҙыл алма ашау ҙа организмды уятырға мөмкинлек бирә, ул шулай уҡ витаминдарға ла бай. Был исемлектә сәтләүек, тауыҡ ите, балыҡ, һоло бутҡаһы һәм йәшел сәй ҙә бар. Тикшеренеүҙең авторҙары иҫәпләүенсә, организмға үҙен уятып һәм дәртләндереп ебәреү өсөн кофеин түгел, тап туҡлыҡлы иртәнге аш кәрәк.

■ Ғалимдар авокадо кеше организмында матдәләр әйләнешен нормаға килтерә ала, тип иҫәпләй. Улар 7 йыл дауамында 17,5 мең кешене күҙәтеп, көн һайын авокадо ашаусыларҙа метаболик синдром үҫеше хәүефе ныҡ түбәнәйеүен асыҡлаған. Әлегә сәләмәтлеккә авокадоның йоғонтоһо тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән. Яуап биреүселәрҙең сәләмәт өлөшө шулай уҡ йәшелсә, емеш-еләк һәм витамин, микроэлементтарға бай ризыҡтарға өҫтөнлөк биреүе тураһында белдергән.

*ОБЕЛИСК ҺАҠЛАЙ ХӘТИРӘ*

# БЕР ҒАИЛӘНӘН...

## биш ул ҡатнаша ул һуғышта

**Тыуған ауылым Бөрйән-Йылға урамы буйлап үтәм... Мәктәп алдындағы обелискыға төбәлеп, таныш исемдәргә ҡарап, оҙаҡ ҡына уйланып тын торам...**




Баймаҡ районының Бөрйән-Йылға ауылында барлығы егермеләп кенә йорт... Ошо кескәй генә ауылдан 24 кеше яуға киткән һәм ҡап яртыһы - 12 ир-егет тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта алмаған. Улар араһында минең олатайым - атайымдың бер туған ағаһы Сәфәрғәле Ҡаҙаҡбаев та бар. 1940 йылдың 15 сентябрендә армия сафына алынған 21 йәшлек егет, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, хеҙмәт иткән еренән тура фронтҡа ебәрелә... Оҙон 5 йыл буйына һуҙылған данлы-ҡанлы яу юлы Еңеү көнө яҡынлашҡанда ғына, 1945 йылдың 14 апрелендә өҙөлә.

Ә бына Хөснөтдин менән Хәнифә Тләүсиндәрҙең бер түгел, 5 улы илебеҙ һағына баҫҡан! Мөхәмәт, Мөхәмәтғәле һәм Кинйәғәле имен-һау тыуған ауылына әйләнеп ҡайтһа, Ғәлиәхмәт (1905-1942) менән Шәйәхмәт (1900-1942) илебеҙ тыныслығы өсөн яу ҡырында башын һалған. Ауылдағы обелискта уларҙың да исемдәре уйылған...

Ошо илһөйәр ғаиләнең бер улы тураһында айырым әйтеп үткем килә. Ул - фронтта бер аяғын ҡалдырып ҡайтҡан Мөхәмәт олатай Тләүсин. 1914 йылдың 15 мартында Бөрйән-Йылға ауылында тыуған. Рядовой-автоматчик, белеме - 2 класс ҡына. "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланған. 1942 йылдың 8 августында 95-се уҡсы-пехота дивизияһына ебәрелә. Сталинград ҡалаһын обороналауҙа ҡатнаша һәм 1942 йылда шундағы ҡот осҡос мәхшәр эсендә ҡаты яраланып, аңын юя. Иҫһеҙ ятҡан Мөхәмәтте һәм башҡа байтаҡ яралы иптәштәрен Котельниково янында фашистар пленға ала һәм бер лагерҙан икенсеһенә күсереп йөрөтәләр. Мөхәммәттең яралы аяғында гангрена башлана. Бәхеткә күрә, әсирҙәр араһында бер табип та була. Тап ул бер ниндәй санитария-гигиена талаптарының булмауына, медицина инструменттарының юҡлығына ҡарамай, булған ғына ҡоралы - бысағы менән иптәше Мөхәмәттең аяғын ампутациялай. Ниндәйҙер мөғжизә менән төҙәлә уның аяғы. Һуңғы булған урыны - Германияның киң билдәле, иң аяуһыҙ Маутхаузен концлагеры. Ҡот осҡос шарттарҙа тотолоуҙарына, аслыҡҡа, яланғаслыҡҡа, үҙәккә үтер ауыр эштәргә ҡарамай, йәш егеттең организмы бөтөн был мәхшәрҙе еңеп сыға. Бәлки, йәшәүгә теләге шул хәтлем көслө булғандыр! Өйҙә бит уны ҡатыны менән кескәй улы Фәрит көтә! 1944 йылда совет ғәскәрҙәре, лагерға һөжүм итеп, әсирҙәрҙе ҡотҡара һәм бер аяҡта булһа ла Мөхәмәт Тләүсин һуғышта ҡала, Украина фронтында кавалерист булып, яу юлын дауам итә.

Һуғыштан ҡайтҡас, Мөхәмәт олатай үҙенең тыуған Бөрйән-Йылға ауылында йәшәй. Фронтҡа китмәҫ элек өйләнгән Халикова Миңлебикә Абдулғәней ҡыҙы (1918 йылғы) менән 11 балаға ғүмер бирәләр. Тик балаларының өсәүһе, ауырып, сабый саҡтарында мәрхүм була. Ә 8 балаһына өлгөлө тәрбиә биреп, уҡытып, башлы-күҙле итәләр. Бер аяғы булмаһа ла, ағастан яһалған протез менән туҡылдата баҫып йөрөп, матур итеп лайыҡлы донъя көттө, бөтөн кеше эшләгән эште башҡарҙы, урман хужалығында эшләне.

Әммә ул ваҡыттағы ил етәкселегенең әсирҙә булғандарға ҡарашы үтә лә насар ине. Мөхәмәт олатайҙы ла ай һайын тип әйтерлек тикшереү органдары саҡыртып, һорау алып ҡаңғырта. Башҡа һуғыш ветерандарыныҡы кеүек пенсия ла түләмәйҙәр уға. Бары хеҙмәт стажы тулып, 60 йәшкә еткәс кенә ябай пенсия юллауға өлгәшә хөрмәтле ветеран. Һуғышта бергә булған фронтташ дуҫтары менән осрашҡанда ғына илай-илай әсирлектә күргәндәрен һөйләһә лә, балалары, тормош иптәше алдында бер ҡасан да ул турала ауыҙ асып һүҙ әйтмәй. Үҙенә ҡарата булған ғәҙелһеҙлекте лә фашламай, ташламалар ҙа дауламай, кешелек сифаттарын юғалтмай, тормоштоң һәм йәшәүҙең йәмен тойоп, матур итеп донъя көттө Мөхәмәт Хөснөтдин улы Тләүсин. Һуғыш яралары ла һыҙлағандыр, күңел яралары ла тынғылыҡ бирмәгәндер, моғайын. Барлыҡ ғазаптарын үҙе менән алып китте - 1984 йылда, 70 йәшендә баҡыйлыҡҡа күсте Мөхәмәт олатай...

**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА.**

*ОБЕЛИСК ҺАҠЛАЙ ХӘТИРӘ*

# СОВЕТТАР СОЮЗЫ ГЕРОЙЫ ЛА...

## ошо төйәктә тыуған

*"Батыр булып үлгәндәргә һәйкәлдәр торһон...*
*Тик терееләр - тере булһын. Тик терееләр һәйкәлдәргә ҡарап торһон...*
*Ҡарап торһон һәм һәр ваҡыт, һәр көн, һәр сәғәт, һәр минут, тын алған һайын һәйкәлдәргә лайыҡ булып үлергә лә әҙер торһон!..."*
*(Фәрит Иҫәнғолов "Һәйкәлдәр - терееләр өсөн" романынан)*

**Әбйәлил районы Күсем ауылындағы обелиск - халыҡ инициативаһы менән 1967 йылда районда иң тәүгеләрҙән булып төҙөлгән хәтер һәйкәле. Ул Бөйөк Ватан һуғышына киткән 76 яугир араһынан, ҡаһармандарса һәләк булып, тыуған ауылына әйләнеп ҡайта алмаған 41 ауылдашыбыҙҙың яҡты иҫтәлегенә арнап ҡуйылған.**



Изге эштең башында Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, хөрмәтле уҡытыусы Ғүмәр Ғилман улы Ғилманов, ауылдың әүҙем ир-егеттәре Хәҙис Ғайсин, Мостафа Хәйбуллин, уҡытыусылар М. Зәйнуллин, Әүхәҙей Мурзин, колхозсылар Иһәш Атауллин, Мәжит Хәйруллин тора. Уларҙың башланғысын ауыл халҡы дәррәү күтәреп ала һәм обелискты эшләп тә ҡуя, текмә тотоп, кәртәләп алалар. Обелискты асыу тантанаһында Ғүмәр Ғилман улы 41 яугирҙең исемлеген уҡый. Бер ғаиләнән генә өс кешене тартып алған һуғышты халыҡ берсә ҡәһәрләһә, берсә ул яугирҙарҙың исеме ташҡа уйылып яҙылыуына ғорурлыҡ тойғоһо кисерә. Район гәзитендә сыҡҡан мәҡәләлә Ғүмәр

✓ *Һуғыш йылдарында бөлгөнлөккә төшкән колхозда аслыҡ-яланғаслыҡ хөкөм һөрә. Бер аяҡһыҙ булһа ла, протезда йөрөһә лә, колхоз етәксеһе итеп 22 йәшлек фронтовик атайымды һайлайҙар.*



ХӘТЕРЛӘП...

# СТАЛИНГРАД ФРОНТЫНДА СЫНЫҠҠАН

**Бөйөк Еңеүгә - 80 йыл. Тыуған илебеҙҙең азатлығы өсөн көсөн дә, ғүмерен дә ҡыҙғанмай фашист илбаҫарҙарын тар-мар иткән, үҙебеҙҙең Ватанды ғына түгел, Европа илдәрен дә фашизмдан ҡотҡарған батырҙар рәте бик һирәк хәҙер, ләкин уларҙың ҡаһарманлығы халыҡ хәтеренән бер ҡасан да юйылмаҫ.**



Атайым Нәжип Ғайфулла улы Әсәҙуллин тураһында был яҙмам. Ул Иглин районының Әмит ауылында 1923 йылда тыуған. Һуғыш башланғанда Фирғәнә далаларында геологоразведка төркөмөндә эшләп йөрөй. Ватанды һаҡларға китеү ниәте менән ашығып тыуған ауылына ҡайта. 1941 йылдың ноябрендә уны Гурьевск хәрби пехота училищеһына уҡырға ебәрәләр. Училище тамамлаған 19 йәшлек лейтенанттар Сталинград фронтына ҡараған 2-се гвардия Армияһының резерв полкына эләгә. Котельниково станцияһы янында ҡамауҙа ҡалған Паулюс армияһын ҡотҡарырға килгән генерал-фельдмаршал Манштейндың танк дивизияһын туҡтатыу бурысы ҡуйыла полкка. Бик зур юғалтыуҙар менән 1943 йылдың 3 февралендә, ниһайәт, Сталинград азат ителә. Гурьев һәм Аҡтүбә хәрби пехота училищеларын тамамлап килгән йәп-йәш лейтенанттарҙың күбеһе Сталинград ерендә мәңгегә ятып ҡала. Был ваҡиғалар Юрий Бондаревтың "Горячий снег" романында нисек бар, шулай тасуирланған.

Сталинградты азат итеүгә бәйле хәл иткес һуғыштарҙан һуң, фронт көнбайышҡа табан хәрәкәт итә. Көньяҡ фронттың 2-се гвардия Армияһы 49-сы гвардия дивизияһы составында ротаның йәш командиры Нәжип Әсәҙуллин Украинаны азат итеүҙә ҡатнаша. Ворошиловград, Новочеркасск, Краснодон, Камышск һәм башҡа ҡалаларҙан дошмандарҙы ҡыуалар. "1943 йылдың июль айында Ростов өлкәһен азат итеп, Перемышль аша немецтарҙы Польшаға ҡыҫырыҡлап сығарҙыҡ, беҙҙең һалдаттар ҙур батырлыҡ күрһәтте, юғалтыуҙар ҙа күп булды", - тип хәтерләр ине атайым.

1943 йылдың 18 авгусында Львов ҡалаһын азат иткәндә ул ҡаты яралана һәм госпиталдә өс ай дауаланып ята. Һаулығы ҡаҡшау сәбәпле демобилизациялайҙар. Ләкин Ватан алдындағы изге бурысын тулыһынса үтәргә ант биргән батыр офицер был хәбәргә ҡыуанмай. Нисек тә Берлингә барып етеү теләге барыһынан да көслөрәк була, үҙен кире фронтҡа алыуҙарын һорай. Шулай итеп, атайым маршал Конев етәкселегендәге 1-се Украина фронтына рота командиры сифатында эләгә. Польшаны, Чехословакияны азат итеүҙә ҡатнаша. "1945 йылдың 16 апрелендә Краков ҡалаһын азат иткәндә ҡаты яраландым. Бөйөк Еңеү тураһындағы хәбәрҙе Силезия тирәһендә санитар поезда барғанда ишеттек. Ул көндө оноторлоҡ түгел: күҙемдән сыҡҡан йәштәрҙә әрнеү ҙә, сикһеҙ шатлыҡ та бар ине. Яралы һалдаттар үҙҙәренең һыҙлаһыуҙарын онотоп торҙолар. Поезд яралыларҙы Саратов ҡалаһына алып килде", - тип һөйләй ине атайым.

Госпиталдә бер аяғын ҡалдырып, ҡултыҡ таяғына таянып, батыр командир тыуған ауылына 1945 йылдың октябрь айында ғына ҡайтып инә. Һуғыш йылдарында бөлгөнлөккә төшкән колхозда аслыҡ-яланғаслыҡ хөкөм һөрә, эшсе ҡулдар - ҡатын-ҡыҙҙар, үҫмерҙәр, инвалид фронтовиктар. Бер аяҡһыҙ булһа ла, протезда йөрөһә лә, колхоз етәксеһе итеп 22 йәшлек фронтовик атайымды һайлайҙар. 1946 йылда уҡытыусы Гөлсөм Фәйрүзова менән ғаилә ҡора. Улар биш балаға: дүрт ҡыҙға һәм бер улға ғүмер бирҙе. Бырыбыҙҙы ла уҡытып, ҙур тормош юлына сығарҙылар. Балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә, бүлә-бүләсәләренә ватансылыҡ тәрбиәһе бирҙеләр, байлыҡҡа, кеше хаҡына ҡыҙыҡмаҫҡа, кешелекле һәм кеселекле булырға өйрәттеләр.

Атайымды Турбаслы мәктәбенә осрашыуҙарға, уҡыусылар алдында сығыш яһарға саҡырып торҙолар. Ул бер ваҡытта ла тормошҡа зарланманы, мин фронтовик, миңә тейеш, тип һорап йөрөмәне. Уҙ көстәре менән йорт һалып инде额ләр, ветерандарға тәғәйен фатирҙы ла юлламанылар. Әсәйебеҙ ҙә, атайыбыҙ ҙа хәҙер беҙҙең арала юҡ инде. Атайыбыҙ өсөн 2015 йылдың 9 майы һуңғы Еңеү байрамы булды.

**Рәйсә ӘСӘҘУЛЛИНА,**

**Башҡортостандың мәғариф отличнигы, Рәсәй Федерацияһының иң яҡшы уҡытыусыһы.**

---

Ғилман улының түбәндәге һүҙҙәре бар: "Бер ҡасан да онотолмаҫлыҡ иҫтәлекле ваҡиға булды. Күрше-тирә ауылдарҙан, ял йорттарынан йөҙәрләгән кеше, төрлө яҡтарҙа йәшәгән ауылдаштар һәм район үҙәгенән саҡырылған ҡунаҡтар килде. Йыйын ҙур булды. Әйтерһең дә, бөтә халыҡ яу ҡырынан ҡайтып килгән батырҙарын ҡаршы алды. Әйтерһең дә, халыҡ алдында батырҙар теҙелеп баҫҡан..."

Ауыл уртаһынан ағып ятҡан, хәҙер инде кескәй генә, әммә мөләндә киң йылға булған Бикембәттең текә ярында ҡалҡҡан обелиск яуҙан ҡайтҡан ветерандар, һәләк булғандарҙың туғандары өсөн иҫтәлек кенә түгел, һәр ваҡыт йәш быуынға тәрбиә һабаҡтары бирер изге урын да булды. Йыл һайын унын эргәһендәге майҙансыҡта мәктәп уҡыусыларын октябрятка, пионерға алыу тантаналары үтер ине. Шул уҡ балалар, обелискыны шефлыҡҡа алып, уны уҡытыусылары менән бергәләп тәрбиәләп торҙолар. Йыл һайын Бөйөк Еңеү көнөндә ауылыбыҙҙың осонан урам буйлап ошо изге урынға тиклем оркестр уйнап килер, уның артынан бихисап бала, йәштәр эйәрер булды. Ауыл халҡының һәммәһе лә, олоһо-кесеһе, байрам тантанаһына эркелешеп килде.

Бөйөк Ватан һуғышынан ауылыбыҙҙың 76 ҡаһарманы араһынан 35-е, Еңеү яулап, тыуған яҡтарға ҡайта. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында Күсемдән 4 ветеран яу юлын үтә, уларҙың береһе - милләтебеҙҙең аҫыл улы, полк командиры, Советтар Союзы Геройы генерал-майор Таһир Тайып улы Кусимов. Ауылыбыҙҙың ғына түгел, данлы тарихыбыҙҙың ғорурлығы булған Таһир Кусимовҡа тыуған нигеҙендә музей асылған. Уға тиклем Ғүмәр Ғилман улы ауылдың башланғыс мәктәбендә Дан мөйөшө булдыра, артабан, бар фиҙакәрлеген һалып, батырыбыҙҙың исемен лайыҡлы юғарылыҡтарға күтәреүгә өлгәшә.

Бөйөк Ватан һуғышынан еңеү менән ҡайтҡан ветерандарыбыҙ үҙҙәре беҙҙең арала булды, ә фотоһүрәттәре һәр ваҡыт халыҡ тупланған учреждениеларҙа күҙ алдында эленеп торҙо. Ул яугир олатайҙар, берәм-берәм беҙҙе ҡалдырып китеп, ауылыбыҙҙың һуңғы ветераны Ғүмәр Ғилман улының мәрхүм булыуына һигеҙ йыл үткәс, 2015 йылда, әүҙем ауылдаштарыбыҙ йәнә ошо ветерандарҙың да исемдәрен обелискыла мәңгеләштереү мәсьәләһен күтәреп сыҡты. Ә башҡалар, шулай уҡ ситтә йәшәгән ауылдаштарыбыҙ тәҡдимде күтәреп алды һәм ғәмәлгә ашырып та ҡуйҙылар.

1967 йылда обелискының нигеҙенә киләсәк быуындарға хат яҙып һалынған була. Ошоно иҫтә тотоп, яңыртҡанда тағы бер мөрәжәғәт ҡалдырырға хәл итте ауылдаштарым. Ул хатты миңә яҙырға насип булды.

**Зөлфирә ҠАРАҒУЖИНА.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ алтынсы хат: "Башҡа илдәрҙең тәбиғәте"

Болгарияла тәбиғәт һәм кеше араһындағы мөнәсәбәттәрҙең ғәжәйеп бер һыҙаты бар: улар бер-береһенә асыҡ. Был һыҙат Болгарияның беренсе баш ҡалаһы - Плискеҙа ла бер аҙ сағыла. Плиске ҡалаһы атамаһының тамырында Рәсәйҙең боронғо ҡалаларының береһе булған Псков атамаһы нигеҙендәге һүҙ ята (борон был "Плесков" Плиска менән "аҙаштар" булған). Ике ҡала ла тигеҙ, яҫы урында урынлашҡан һәм шуға ҡарап аталған. Плискеҙағы матур һарай емереклектәрендә, уның диуарҙарында, юлдарында һәм таш юлдарында ҙур таштар ята. Үҙенең мөһабәтлеге, ауырлығы менән был таш блоктар тирә-яҡ киңлектең ҡеүәтле горизонталдәрен раҫлаған кеүек.

Болгарҙарҙың ата-бабалары ултыраҡ тормошҡа күсә генә башлағанда ат һәм мал көтөүе еңел булған яҫы далаларҙы ҡалдырып китә алмай, шуға беренсе мәркәҙдәрен ҡурсауы еңел булған тауҙарҙа түгел, ә көтөүлектәр уртаһына һала. Үҙҙәренең ултыраҡ тормошҡа күсеүен раҫлау өсөн улар беренсе ҡалаларын ҙур-ҙур иң ҡаты таштан төҙөй, шул рәүешлә үҙҙәренең ҡымшанмаҫлығын, ергә берегеүен сағылдыра.

Болгарияның икенсе баш ҡалаһы - Преслав икенсе төрлө урынлашҡан: тауҙар ҡамауында, уйһыулыҡта. Туҫтаҡҡа оҡшаш уй уртаһында данлыҡлы Түңәрәк сиркәү. Уратып алған тауҙар үҙәгендә Түңәрәк сиркәүе булған Преслав үҙе тирәләй урынлашҡан ҡуйы урманлы тауҙарҙың мөһабәт ҡамауында ҡалған.

Тәбиғәт һәм кешенең бер-береһенә ҡарата бына ошолай асыҡ мөнәсәбәттә булыуы Болгарияның өсөнсө мәркәзе - Велико-Тырново ҡалаһында тағы ла үҙенсәлеклерәк һәм көслөрәк һиҙелә. Велико-Тырново ҡалаһының төп районды бейек ҡалҡыулыҡтарҙа урынлашҡан, ике иң мөһиме шулай - үтеп ингеһеҙ кәлгәле Царевец һәм күп һанлы сиркәүҙәре, монастырҙары булған Трапезица. Ә ҡалҡыулыҡтар араһында Янтра йылғаһы бормаланып аға, уның һыуҙарында ҡаланың матурлығы сағыла. Ә был тау, ҡала һәм йылғаның ҡатмарлы мөнәсәбәттәре өҫтөнән тағы ла бейегерәк тауҙар ишелә яҙып тора. Шуларҙың береһен Тырново халҡы Момина крепость - Ҡыҙ ҡәлғәһе - тип атаған, уны ҡыҙҙар ҙа һаҡлай алған, үҙенән-үҙе шундай үтеп инмәҫлек булған ул. Тау ҡала кеүек, ҡала тау кеүек... Тауҙар һәм ҡалалар берберенән айырылмаҫлыҡ булып берләшкән, бергә йәшәйҙәр төҫлө. Болгарияның хатта сағыштырмаса яны, "яңырыу осорондағы" ҡалалары ла шундай уҡ. Шуларҙың береһе - Копривщица.

Копривщица - "беренсе туп" ҡалаһы. Бында күп быуатлыҡ Осман иҙеүенә ҡаршы ихтилал башланған. Был ҡаршы күтәрелешкә тәбиғәт, Кропивщицаны уратып алған тауҙар һәм ҡарурмандар көс биргән. Һәм ҡарағыҙ әле, тауҙар, урмандар һәм ҡалалар бында һаман да ниндәй берлектә йәшәй. Ҡала уртаһындағы ике ҡатлы ғәҙәти болгар йорттары араһында ҡара, мөһабәт, иҫ китмәле бейек шыршылар тора. Был урман ҡалаға ингән. Ә һәр йорттан һарыҡ көтөүҙәре йөрөгән тау битләүҙәре, ҡаланың тирә-яғы күренә; нәҡ һәр йорттан (әлбиттә, иҫкеһенән, сөнки заман архитекторҙары быны аңламай). Эш шунда, болгарҙар ғәжәйеп өйҙәр уйлап тапҡан. Был йорттарҙағы ҡаттар иркеле урынлаштырылған һәм икенсе, хужалар йәшәгән ҡат һәр ваҡыт тәҙрәһенән урам һәм тирә-яҡ тәбиғәт күренеше асылырлыҡ итеп һалынған: таулы икән - тауға, диңгеҙ буйында икән - диңгеҙгә. Юғары художестволы мәғәнә һалынған талғын һыҙыҡ - "кобылица" (көйәнтә) биҙәге Болгария тауҙарына ауаздаш кеүек йорттарҙа, ҡоймаларҙа һәм ҡапҡаларҙа ҡабатлана.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

✓ *Революционерҙар революция яһамай. Улар бары тик властың урамда ятҡанын шәйләй һәм шуны күтәреп кенә ала.*

*(Ханна Арендт).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ КАВАЛЕРИЯ ДИВИЗИЯҺЫ




**17-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тырыз. Ҡотошов. Ламед. Һыҡра. Ялҡын. Ғүмәров. Май. Быу. Актер. Нимәрә. Нуҡта. Ҡош. Уймаҡ. Ысыҡ. Ауыл. Лапаҫ. Оя. Ир. Шифа. Тарамыш. Урман. Заһитов. Нимә. Уҡ.

**Вертикаль буйынса:** Мушников. Һайыҫҡан. Бонапарт. Ҡыяр. Абазин. Ағуна. Түтәл. Ҡолға. Мәҙинә. Миәкә. Шыршы. Иш. До. Завод. Ваҡ. Ява. Уҡлау. Кран. Ер. Нур. Ҡыҫан.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ИНСЕЛӘНГӘН...

Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылынан Махсус хәрби операцияла һәләк булған Әҡсән Мырҙағәлинды иптәштәре "золотой" тип йөрөткән була. Ысынлап та, алтын ҡуллы ғына түгел, алтын йөрәкле лә була ул. Бер нигә ҡарамай, яу яланында һәләк булған иптәштәренең кәүҙәләрен сығарыуҙа ныҡышмаллыҡ күрһәтә. Төнөн яңғыҙы ғына яланға инеп, Күсей ауылы батыры Таһирҙың да кәүҙәһен дә алып сыға. Таһирҙың ата-әсәһе рәхмәт йөҙөнән уға бүләк эшләргә ниәт иткән була. Әммә Әҡсән дә һәләк була...

Күсей ауылынан Рәхимә һәм Юлай Кинйәбаевтар ниәтен атҡарып, Әҡсән Мырҙағәлиндың улы Санъярға ҡолон тапшырҙы. "Таһир менән Әҡсән бер взводта ине. Улыбыҙ мәрхүм булғас, Әҡсән уның кәүҙәһен сығарам тип һүҙ бирҙе. Тәүҙә Байыш егетен алып сыҡты. Унан иптәштәре менән улымдың кәүҙәһен сығарҙы. Таһирҙың сәғәтен, амулетын, шәхси әйберҙәрен биреп ебәрҙе. Ҡайтҡас, Күсейгә килергә вәғәҙә иткәйне. Үкенескә күрә, осрашып булманы. Үҙе лә һәләк булды. Таһир улыбыҙҙың позывнойы "Хомяк" ине, үҙ-ара "Зубник" тип тә йөрөткәндәр. Сөнки фронтҡа киткәнсе улыбыҙ Өфөлә "Эми-Дент"та эшләне, коллегаларынан кәрәкле әйберҙәр алдыртып, яугирҙарҙың тешен дауаланы. Беҙ Әҡсәнгә ниәт итеп, бүләк әҙерләгәйнек. Аманатыбыҙҙы үтәп, ҡолондо уның улына тапшырҙыҡ. Әҡсәндең ғаиләһе менән танышып, күңелебеҙ булып ҡайттыҡ", - ти Рәхимә апай. Сая малай Санъяр был ҡолондо батырҙар иҫтәлеге итеп ҡабул итер, атланып сабыр, атаһы Әҡсән һәм яҡташы Таһир кеүек батыр булып үҫер, тыныс күк йөҙө аҫтында бәхетле йәшәр тип ышанабыҙ. Мырҙағәлиндарға ла, Кинйәбаевтарға ла Хоҙай күркәм сабырлыҡ бирһен! Оло йөрәкле, ҡыйыу улдарығыҙ өсөн рәхмәт!

**Резедә ВӘЛИЕВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 май "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш, Ф. Ғарипов). 12+

**12 май "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+

**13 май "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль мелодрама. 16+

**14 май "Әҙләнем, бәғрем, һине..."** (Т.Миңнуллин, А.Нәҙерғолов), мелодрама. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), иҫтәлектәр. 12+

**11 һәм 15 май "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Ҡунафин, Р. Хәкимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+

**13 май "Алые паруса"** (А. Грин, М. Күлбаев), романтик фантазия. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**9 һәм 10 май "О героях былых времен"** (М.Батурин). 18:00. 12+

**10 май "Аленький цветочек"** (С.Аксаков). 12:00 һәм 15:00. 6+

**11 май "Буратино"** (А.Толстой). 12:00 һәм 15:00. 0+

**15 май "Сказание о Петре и Февронии"** (Е. Тикиджи-Хамбурьян). 15:00. 12+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 май Нелли Кадраеваның** концерты. Фортепиано. 12+

**15 май 86-сы концерт миҙгелен ябыу.** Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына һәм Ватанды һаҡлаусылар йылына арналған концерт. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**14 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), иҫтәлектәр. 6+

**15 май "Ватан ҡайҙан башлана"**, әҙәби-музыкаль лекторий. 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**9 май "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М.Ҡунафин), драма. 6+

**10 май "Жизнь за други СВОя"** (З.Прилепин, О.Демидов, А. Колобородов, А. Газимова). 12+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**11 һәм 12 май Әнүәр Нурғәлиевтың** концерты. 12+

**15 май 31-се ижад миҙгелен ябыу** тантанаһы. Концерт. 6+

## БР Милли музейы

**9 май "Еңеү көнө"**. Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арналған акция. 12:00-16:00. 12+

**15 май "Һуғыш геройы булған хайуандар"**. Интерактив экскурсия. 15:00. 6+

БЕР АМАНАТ

# АУЫРЛЫҠТЫ ЙЫРҘАР ЕҢЕЛӘЙТӘ

**Халыҡ ижады тарих һөйләй, күптән булған, йә күп ваҡыт та уҙмаған ваҡиғаларҙы сағылдыра. Шуның өсөн халыҡ ижадына бик тә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу, уларҙы йыйып, йәш быуынға еткерергә, аңлатырға кәрәк. Бына мин дә Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын байрам иткән көндәрҙә Белорет районы Татлы ауылында тыуып үҫкән, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ауырлыҡтарҙы үҙ иңендә татыған, оло хөрмәткә лайыҡ инәйҙәрҙең йырҙарын, сеңләүҙәрен гәзит уҡыусыларға тәҡдим итмәксе булдым.**



Зөлфиә Лоҡман ҡыҙы Маннанова 1917 йылдың 7 ноябрендә Татлы ауылында тыуған. 1933 йылда Фәррәх ағайға кейәүгә сыға. Ире һуғышта биш йыл йөрөп ҡайта һәм күп тә үтмәй, ҡаты ауырыуҙан донъя ҡуя. Зөлфиә Лоҡман ҡыҙы һуғыш ваҡытында төрлө ауыр эштәр башҡара. "Ауырлыҡты йырҙар еңеләйтә..." тип йырлай бит йырсы. Зөлфиә апайҙарҙың да күңел йыуанысы булғандыр йырҙар ул замандарҙа.

*Бейек кенә тауҙы менгән саҡта*
*Таймаҫ та ғына итек булһасы.*
*Ошо ла тормош, һай, һәйбәт саҡта*
*Кис тә булмаҫтай көндәр булһасы.*
*Һайлап алып ҡына менһәң ине*
*Яҡшы ғына аттарҙың турыһын.*
*Әллә барып та күрәйем микән,*
*Мәскәү ҙә генә тигән ҡурыһын.*
*Алтын да ғына микән был донъя*
*Көмөш тә генә микән был донъя.*
*Ҡәҙерҙәрен белеп көткән йәштәргә,*
*Гөл-сәхрә лә микән дә был донъя.*
*Кесе Инйәр буйы туғай - туғай,*
*Туғайында һайрай бер турғай.*
*Шул турғайҙай булып һайрар инем,*
*Тел асҡысы ла бирмәй шул Хоҙай.*

Ҡафия Хөсәйен ҡыҙы Моталлапова 1913 йылдың 13 февралендә Татлы ауылында тыуған. Уларҙың бәхетле йәшлеген ҡәһәрле һуғыш селпәрәмә килтерә. Тормош иптәше Ғәбит ағай һуғыштан әйләнеп ҡайта алмай, Тыуған ил өсөн башын һала. Шуныһы фәһемле: улар шиғыр юлдары менән бер-береһенә тәрән мөхәббәттәрен белдереп, өҙөлөп-өҙөлөп хаттар яҙышҡан. Ҡафия инәйҙең иренә яҙған йыр-таҡмаҡтары.

*Ай яҡтыһы ла бит бик уҡ яҡты -*
*Боҙ өҫтөнән үткән юл кеүек.*
*Башҡайымда ла уйым юҡ кеүек,*
*Йөрәккәйем яна ут кеүек.*
*Ағиҙелкәй һыуҙың аҡ күперерен,*
*Ҡулҡайыңа алып һабын ит.*
*Ярһыма ла йөрәк, ай, ярһыма,*
*Хоҙай ҡушҡан эшкә сабыр ит.*
*Урам осҡайынан бөрәү килә,*
*Үҫкән үлән менән тиң булып.*
*Рәхәтләнеп кеше донъя көтә,*
*Һөйгән йәре менән тиң булып.*
*Бәләкәс кенә минең дүнәнем,*
*Дүнәнемә күрә үгәнем.*
*Донъя ҡыуанысын күрмәүемдә,*
*Үҙ яҙмышҡайымдан күрәмен.*
*Һауаларҙан килә ике ҡошҡай,*
*Ҡанат осҡайҙарын талдырып.*
*Ирке менән ирем китмәҫ ине,*
*Дүрт балаһын яңғыҙ ҡалдырып.*
*Беҙҙең урамдарҙан, ай, арҡыры,*
*Ағып ята һыуҙың һалҡыны.*
*Китте яныҡайым, ай, яҡыным,*
*Яна шул йөрәгем ялҡыны.*
*Урман, тау-таштарҙы яңғыратып,*
*Ишетелә машина тауышы.*
*Шул машинаға ултырып китте,*
*Ҡайҙа ла икән ризыҡ яҙмышы.*

Ғәбит ағайҙың һуғыштан яҙған шиғри хаттарынан өҙөк:

*Үткән йәйҙә бесән саптым,*
*Түңәрәк күл итәген.*
*Күңел генәм һиҙеп торған,*
*Башҡайымдың китерен.*
*Һинең ҡашҡынайың бигерәк нәҙек,*
*Әллә алдырҙыңмы ҡашынды?*
*Яндарыңа килһәм, киткем килмәй,*
*Әллә әйләндерҙең башымды?*
*Эй, йәнем, һин - ер еләге,*
*Кукта күгәрсенем һин.*
*Һауаларҙа, йыһандарҙа,*
*Теләгән теләгем һин.*

Ҡафия инәй Ғәбит ағай һәләк булғас яҙған:

*Ағастар япраҡ ярыр яҙ булғас,*
*Тупраҡ алды, ғүмере аҙ булғас.*
*Илама ла башым, ай, һыҡтама,*
*Нисек итәң, ғүмере аҙ булғас.*
*Йүгереп кенә сыҡтым үңергә,*
*Күк үләнкәй үҫкән күперге.*
*Байтаҡ та ғына ғүмерем үтеп китте,*
*Бәрәкәт бирһен ҡалған ғүмергә.*
*Һандуғасҡай һайрай, ай, сук-сук, тип,*
*Ҡунар ботаҡкайым юҡ-юҡ, тип.*
*Һандуғасҡай һайрай, мин илайым,*
*Бәхеткәйҙәрем, ай, юҡ-юҡ, тип.*
*Һауаларҙа оса, ай, күбәләк,*
*Ҡанат осҡайҙары түңәрәк.*
*Үйнап ҡына көләп йөрөүемдән,*
*Һыҡтаған сактарым күберәк.*
*Юл буйынан да, ай, юрғалай,*
*Аяҡкайы ҡыҙыл күгәрсен.*
*Илама ла башым, ай, һыҡтама,*
*Рәхәт көндәр әле күрерһең.*

**Франгил ҒӘЛИЕВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Межгорье ҡалаһы.**

ТЕЛҺӨЙӘР

## ҒИШЫҠ МӘЛӘКТӘРЕ

**Китап һөйөүселәр ҡайһы бер әҫәрҙә үҙҙәре өсөн бөтөнләй таныш түгел һүҙҙәргә тап була. Мәғәнәләрен һүҙлектәрҙән асыҡлаусы ныҡыштар ҙа бар. Беҙҙең дә иҫәп шундай төпсөр, маҡсатлы заттарҙан ҡалышмау.**

**Мыр.** Емеште, япраҡты һәм башҡа нәмәне ашап, тишеп йөрөгән төрлө ҡорт, ҡарышлауыҡ. *Мыр баҫыу. Мамыҡ шәлгә мыр төшмәһен. Һыу мыры - дымлы урында була торған ваҡ ҡына бер көнлөк себен. Һаҙлыҡта һыу мыры йонсота. Һыу мыры күҙгә кереп бара. Мыр һымаҡ булыу - иҫәпһеҙ күп булыу. Ямғырҙан һуң бәшмәк мыр һымаҡ булып ҡалҡҡан. Ә тау итәгендә еләк мыр булып түшәлеп ята.*

**Мәләкә.** Мәләкә - эш барышында үҙләштерелгән оҫталыҡ; тәжрибә. *Ҙур мәләкә. Яңы технологиялар өлкәһендә мәләкә алыу.*

**Мәләү.** Үлән тамырын ҡаҙа торған үткер осло таяҡты белдергән һүҙ. *Уңайлы мәләү. Мәләү менән дегәнәк тамырын ҡаҙыу.*

**Мәләк.** "Фәрештә" һүҙе урынына "мәләк" тигәне лә тура килеүен иҫтә ҡалдырайыҡ. *Нурлы шәфҡәттән яралған (бер мәләктәй саф ҡатын Ш.Бабич). Ғишыҡ мәләктәре.*

**Мәрҙән, мәрҙәс.** Аҫыл ир-егет тигән мәғәнәне һәм хуплағанды, ҡеүәтләгәнде белдергән һүҙҙәр. *Халыҡ еңеүсене "Мәрҙән!" тип маҡтай. Бәйгелә "Һай, мәрҙәс!" тигән һүҙҙәр яңғырап тора.*

**Шулай итеп, туған телдә уҡыу, яҙышыу, аралашыу уны белеүҙә мәләкәне байытыр.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ИР МЕНӘН ҠАТЫН...

## икеһе лә бер ҡамырҙан

Бер кеше тәхеткә менһә, ҡырҡ кеше атҡа менә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тоғролоҡ - ул үҙ вәғәҙәңдә тороу.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Изге кеше, ул хатта ҡол булһа ла - ирекле, яуыз кеше, ул хатта батша булһа ла - ҡол.

**(Августин).**

Революционерҙар революция яһамай. Улар бары тик властың урамда ятҡанын шәйләй һәм шуны күтәреп кенә ала.

**(Ханна Арендт).**

Был хәҡиҡәт күптән билдәле: икенсе урын бирелгәндәр һис һүҙһеҙ беренсе урынға лайыҡлы.

**(Джонатан Свифт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡарт атай үҙенең өлкән улы менән шәп ағымлы йылға буйына килә һәм һыу инеп сығырға була. Мауығып китеп, ул менән атай ярҙан алыҫыраҡ йөҙөп китәләр һәм йылғаның иң шәп аҡҡан өйөрөлтмәкле урынына барып сығалар. Ағым уларҙы өйөрөлтөп-өйөрөлтөп ағыҙып алып китә. Ағым менән көрәшкән егет өйөрөлтмәккә эләккән атаһының сал башын ғына күреп ҡала. "Бөттө, атайым һыуға батты инде!"- тигән уй ғына ялтлап үтә башынан. Егет саҡ-саҡ батмайынса ҡалып, хәлдән тайып, көскә ярға килеп сыға. Ярға аяҡ баҫыу менән һыу төбөнә киткән атаһын иҫләп, ҡайғыға бирелергә лә өлгөрмәй, ҡаршыһында бер ни булмағандай кейемен һығып ултырған атаһын күреп ҡала.**

**- Был мөмкин түгел! - тип ҡысҡырып ебәрә улы. - Мин һинән йәшерәк һәм көслөрәкмен, шулай булһа ла ағымды көскә еңдем, шул тиклем арыным. Ә һин бер ни булмағандай ярҙа ултыраһың, нисек ҡотолдоң?**

**- Эй, улым, - ти ҡарт атай, - шул аҡылды һис ҡасан онотма: ниндәйҙер ауыр хәл килеп тыуа һәм был ауырлыҡтан еңел генә ҡотолоп булмаясағын, уның һинән көслө икәнен аңлайһың икән, тимәк, уға ҡаршы көрәшеп, көсөңдө әрәм итергә, ҡаршы торорға ярамай. Бындай осраҡта көсөңдө һаҡлау һәм уңайлы мәлде көтөү яҡшы...**

**- Бында был аҡылдың ни ҡыҫылышы бар? - тип аптырай улы атаһының ни әйтергә теләгәнен аңламайынса.**

**- Ҡыҫылышы бар шул. Бына мин дә ағымға ҡаршы торманым, ә уға үҙемде йылға төбөнә алып төшөүгә юл ҡуйҙым. Йылға төбөнә төшкәс, аяҡтарымды терәп, бар көсөмә ырғылдым да, һыу өйөрөлгән ыңғайы өҫкә күтәрелдем..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25018

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
7 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 875

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.